ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 октябрь (карасай) 2019

№41 (875)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Батшаларға баш эймәгән әйләләрбеҙ!



6-7

Көсөбөҙ - тамырҙарыбыҙҙа!



8-9

Иҙелбашы - аҡ ниәттәр башы



12

Рәсәйҙең баллы йөрәге беҙ!



13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!***
***Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 3 октябрҙән 13 октябргә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2020 йылдың беренсе яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә - 611 һум 70 тингә яҙыла алаһығыҙ.***
***Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.***
***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Республика көнө байрамы ҡасан һәм ниндәй ваҡиғалар айҡанлы барлыҡҡа килде? Хәтирәләр менән уртаҡлашып алайыҡ әле...




***Сибәғәт РАХМАНҒОЛОВ, 1995-2003 йылдарҙа "Юрматы" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе:*** СССР тигән ҙур дәүләт уҙған быуаттың һикһәненсе йылдарында ҡот осҡос дауыл сығып, ғәрәсәт уртаһында ҡалған карапты хәтерләтә ине. Ваҡиғалар ағышын ҡулында тоторға тейеш булып та, идара итеүгә һәләтһеҙ Горбачевтың булдыҡһыҙлығы арҡаһында, илдең әле бер төбәгендә, әле икенсеһендә милләт-ара сыуалыштар башланды. Әзербайжандағы Ҡарабах, Ҡырғыҙстандағы, Үзбәкстандағы ҡан ҡойоштар янып ятҡан утҡа кәрәсин һипкәндәге кеүек тәьҫир итте. Уларҙың ҡайһы берҙәре һис бер ойошоуһыҙ барлыҡҡа килһә, Ош йәки Алматы ҡалаларындағы бәрелештәрҙең артында Америка Ҡушма Штаттарының махсус ойошмалары торғанлығын йылдар үткәс кенә белдек.

Ваҡиғалар киҫкенләшкән бер мәлдә Башҡортостанда ла республикабыҙға киңерәк иҡтисади үҙаллылыҡ, союздаш статусы биреүҙе, башҡорт телен, рус теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле итеп таныуҙы талап иткән лозунгылар көнүҙәк булып китте. Ошо сығыштарҙы, талаптарҙы системаға һалып, бер көскә туплау өсөн ниндәйҙер ойошма кәрәк ине. Хәтерем яңылышмаһа, 1988 йылдың яҙында Мәләүез ҡалаһында республикабыҙҙың иң беренсе "Көнгәк" башҡорт халыҡ үҙәге барлыҡҡа килде. Власть органдары, әлбиттә, башта уны танырға теләмәне. Бары тик ойошманың лидеры Сәйфулла Әмировтың ул ваҡытта илебеҙҙә тыйылған "Америка тауышы" радиоһы аша сығышынан һуң ғына тейешле органдар "Көнгәк"те рәсми теркәне.

1989 йылдың башында, мәләүездәрҙән үрнәк алып, бындай ойошмалар Ишембай, Салауат, Стәрлетамаҡ, Күмертау ҡалаларында барлыҡҡа килде. Һуңынан улар баш ҡалабыҙҙағы "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенә һыйынып, бер йоҙроҡ булып төйнәлде. Быйыл 100 йыллығын билдәләгән Башҡортостаныбыҙҙың һуңғы 30 йылдағы яңы тарихын "Көнгәк", "Юрматы", "Аҡбуҙат", "Аманат", "Тере шишмәләр" һәм, әлбиттә, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәктәренең актив эшмәкәрлектәренән башҡа күҙ алдына килтереүе мөмкин түгел. Тап ошо ойошмалар республикабыҙҙың үҙаллылығына нигеҙ һалды, башҡорт теленә дәүләт статусын яңынан ҡайтарҙы. Республикабыҙҙа президент институты уларҙың талабы менән барлыҡҡа килде, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ҙа - уларҙың эшмәкәрлеге емеше.

(Дауамы 2-се биттә).

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ЯҠШЫЛЫҠ БУЛҺЫН АТЫҒЫҘ...

**Йәмғиәттә ыңғай ҡараш, ыңғай тойғолар киреләренән күберәк булғанда йәшәүе шул тиклем күңелле. Шөкөр, ошоно тойоп, күреп, ҡыуанып йөрөйөм һуңғы ярты йылда. Ҡала урамдарында асыулы йөҙҙәр ҙә һирәгәйә төштө, кешеләр йылмая башланы кеүек миңә.**

Былар барыһы ла уларҙың йәшәйешебеҙ, көнкүрешебеҙ менән ҡәнәғәт үк булмаһалар ҙа, киләсәккә өмөттәре барлығына ишара яһай. Кеше бит ул гел ғәҙеллек көҫәй, яҡшылыҡтың яуызлыҡты еңеүенә ышанып йәшәй. Барыһы ла үҙеңдең ҡулыңда, тип аҡыл һатыр ошо урында ҡайһы берәүҙәр. Әммә һинән тормаған нәмәләр ҙә бар шул. Әйтәйек, ябай ғына бер миҫал. Нисәмә йылдар ыҙа сиктергән йәмәғәт транспортында берәй ҡасан тәртип булыр, тигәнгә ышанмай инем. Бөгөн эшкә ПАЗ автобусына ултырып килдем, уның шәхси ҡулдарҙа икәне күренеп тора. Әммә дәүләт автобусындағы кеүек туҡталыштарҙы иғлан итәләр, ҡулаҡса менән бер рәттән, түләү өсөн юл картаһы ҡабул ителә, уның менән билет хаҡы 5 һумға осһоҙораҡ та. Бына ошо тәртипте, нисек кенә теләһәм дә, зарланһам да, мин булдыра алмайым. Ул өҫтән ҡушыу буйынса эшләнә.

Килде бит заман, төрлө кимәлдәге етәкселәр ябай халыҡты күрә башланы түгелме? Йылылыҡ миҙгеле башланыуы ошо хаҡтағы уйҙарға этәрҙе әле. Быға тиклем көндәр һыуыҡ торһа ла, йылылыҡ бирергә ашыҡмайҙар ине. Йылылыҡ миҙгеле башланыу менән дә әле фатирҙарҙа аҙнаун көн йылы булмай, коммуналь хужалыҡтарҙың яуабы ла әҙер: шулай тейеш, көнөндә үк йылы йорттарға барып етмәй. Быйыл халыҡ аптыраны. Иртәнге ундар тирәһендә телевизорҙан, республика етәксеһе йылы бирергә ҡушты, тип һөйләп торалар. Ҡатынға әйтһәм, көлә минән, белмәйһеңме ни, йәнәһе, берәй аҙна көтөргә кәрәк. Төшкө сәйҙе эскәндә батареялар йылы ине инде. Улай ҙа була икән дәһә! Тимәк, элек тә мөмкин булған, ябай халыҡ тураһында уйлаусы ғына булмаған. Бында шуныһына ғына эс боша: ни өсөн кемдер, үҙ эшен, үҙ бурысын яҡшы итеп башҡарһын өсөн кемделер әрләргә, иҫкәртеү яһарға, хатта ҡурҡытырға тейеш? Кире стимулға, әйтәйек, вазифаһынан ҡыуылыуға нигеҙләнгән хөкөм системаһы ғына етәкселәрҙе эшләргә дәртләндерәме икән ни? Әйтәм, Рәсәй Президенты ла күпселек осраҡта ошо ысулды ҡуллана, ана, һыу баҫыуҙан зыян күргән төбәктәргә ҡырҡ барырға, урындағы етәкселәргә ҡырҡ иҫкәртеү яһарға мәжбүр булды.

Беҙҙең быуын башҡарған эшенән ҡәнәғәтлек алыуҙы, кешеләргә файҙалы булыуҙы, халҡындың тормошон яҡшыртырға ынтылыуҙы төп урынға ҡуйып хеҙмәт итте. Ошо ҡараш кире ҡайтһын ине бөгөнгө йәмғиәткә. Кеше булып ҡалайыҡ, быныһы инде һәр кемдең үҙенән тора.

**Ирек СӘЙЕТҒӘЛИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

12+

*✓ Без үҙ еребеҙҙә, үҙ илебеҙҙә генә башҡорт халҡы булып йәшәй алабыҙ. Шулай булғас, милли һыҙаттарыбыҙҙы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлау, ер, илебеҙҙе төрлө хөрәфәттәрҙән ҡурсалау һәр башҡорттоң йән бурысы.*



## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

**Телде һаҡлау мәсьәләһе бер минән генә тормай, мин бер үҙем нимә ҡыла алам, мин урыҫса һөйләшкәндән генә донъя үҙгәреп китмәҫ әле, тигән һымаҡ һылтау табып, үҙҙәрен йыуатып ғәмһеҙ йөрөүселәр ныҡ яңылыша. Бөгөнгө үҙебеҙҙең хәлебеҙгә беҙ, башҡорттар, бөтәбеҙ ҙә яуаплы!**

# БЕРҘӘМДӘРҘЕ ӨЛГӨ ИТӘЙЕК!

Бер милләттәшебеҙҙең генә лә тауышын һанға һуҡмау беҙҙең өсөн үлемесле, сөнки беҙ унар миллионлы халыҡ түгел. Бөгөн үҙебеҙҙең яҙмышыбыҙҙы: телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, рухиәтебеҙҙе, йөҙөбөҙҙө һаҡлау һәр беребеҙҙән тора! Хәлебеҙҙе үҙебеҙ хәстәрләмәһәк, әллә ҡайҙан, әллә кем килеп ярҙам итер тигән өмөт юҡ. Беҙ үҙ еребеҙҙә, үҙ илебеҙҙә генә башҡорт халҡы булып йәшәй алабыҙ, ә ситтәгеләр башҡорт милләте вәкилдәре йә башҡорт диаспораһы ғына була ала. Шулай булғас, ихтыяждарыбыҙҙы яҡлау, милли һыҙаттарыбыҙҙы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлау, ер, илебеҙҙе төрлө хөрәфәттәрҙән ҡурсалау һәр башҡорттоң йән бурысы. Үҙен ысын башҡорт балаһы тип таныҒандың йәшәү маҡсаты ла ошо булырға тейеш!

Эйе, яуаплы ауыр йөктөң ҡамыты елкәне өйкәр, инде баҫыр, ваҡыты менән алҡымдан алып, тынды ла ҡыҫыр, ләкин был изге йөгөнән еңел туғарылған халҡы, ырыуы, тоҡомона хыянат иткән кеше булыр. Ундай кешегә ваҡытында баһаһын биреп, әйтеп барыу зарур. Шунһыҙ булмай! Чечендәрҙең үҙ халҡына, йолаларына ҡаҡшамаҫ тоғролоғона һоҡланыусы мин генә түгел. Улар, ысынлап та, үҙ булмышынан аңлы рәүештә ме йә сараһыҙҙанмы ситләшкән ҡәрҙәштәренә аяуһыҙҙар һәм нәфрәттәрен күрһәтергә ҡурҡмайҙар. Йәндәре ҡабул итмәгән күренештәргә ике йөҙләнеп йә күрмәмеш булып ҡыланмайҙар, үҙҙәре булып ҡала беләләр, шуға ла берҙәмдәр...

Үҙебеҙ берҙәм булып, аңыбыҙҙы, заңыбыҙҙы заман кимәленә күтәрә алһаҡ, ихтирам итерҙәр, талаптарыбыҙҙы, хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлай алһаҡ, талап, мәнфәғәттәребеҙҙе ҡәнәғәтләндерерҙәр, фекерҙәребеҙҙе һанға һуғырҙар, тәҡдимдәребеҙ менән иҫәпләшерҙәр. Шул осраҡта ғына киләсәгебеҙ тотороҡло, ышаныслы, уңышлы булыр, Алла бирһә. Донъябыҙ менән ғәҙел идара итергә өйрәнһәк, киләсәктә халҡыбыҙҙың ирекле, берҙәм, бәхетле йәшәүен тәьмин итә алырбыҙ, яҙмышыбыҙҙың, тормошобоҙҙоң хужалары үҙебеҙ булырбыҙ. Ватаны көслө, нәҫеле һау-сәләмәт вариҫтарыбыҙ беҙҙән ҡәнәғәт булыр. Еңеллектә егетлек кәрәкмәй, ауыр саҡта егет булайыҡ!

**Урал МОСТАФИН.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Республика көнө байрамы касан һәм ниндәй вакиғалар айканлы барлыкка килде? Хәтирәләр менән уртаклашып алайык әле...

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәгенең шул йылдарҙағы сәркәтибе:*** Илебеҙҙә лә, республикабыҙҙа ла демократик үҙгәрештәр башланғас, һәр милләт вәкилдәре, күңелендә быуылып килгән уй-хыялдарын тормошҡа ашырыу өсөн, төрлө ойошмалар төҙөй башланы. Мин Белорет районының Йөйәк ауылында уҡытыусы булып эшләп йөрөгәндә Өфөнән бер төркөм иптәштәр мине яңынан Өфөгә, яңы ғына ойошҡан, рәйесе Рәшит Шәкүр булған "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенә сәркәтип итеп саҡырҙы. Шуға, бөгөнгө байрам булараҡ билдәләнгән көндөң нисек барлыҡҡа килеүе тотош күҙ алдымдан үтте, тиергә мөмкин.

Республиканың Юғары Советы 1990 йылдың 11 октябрендә Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итте, тип әйтеүе генә еңел. Уға саҡлы "Башҡортостанға - союздаш республика статусы" тигән талапты хуплап, ҡултамғалар йыйған саҡта күпме бәхәстәр, күпме фекер алышыуҙар, янауҙар булды. Беҙ баҫалҡылыҡ һаҡланыҡ. Ҡайһы бер мәсьәләләрҙә ҡыҙыу ҡанлы йәштәребеҙ беҙҙе ҡартайыуҙа, йәштәрсә фекер йөрөтә белмәүҙә ғәйепләне. Бындай оло мәсьәләне хәл итеү алдында торғанда дыуамал, яндырай булыуҙың ярамағанлығын аңлатырға тура килде уларға. Ошондай ваҡытта "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге эше ҙур роль уйнаны. Үҙәктең Башҡортостан территорияһында һәм башҡорттар йәшәгән күрше төбәктәрҙә филиалдары эшләне. Малаяҙҙа Дауыт Хәйретдинов яңғыҙы ойошманың "Замандаш" гәзитен сығарҙы. Уның биттәрендә рус телле башҡорттар өсөн мәҡәләләрҙе рус телендә лә бирергә тура килде.

Халыҡ тарихы, көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан башҡорттары яҙмышы, республика суверенлығы, тел статусы, кадрҙар мәсьәләһе, миграция процестары, милли мәктәп концепцияһы, тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы һәм башҡа бик күп мәсьәләләр ҡарала торғайны идара ултырыштарында ла, йыйындарҙа ла. Ул ваҡытта "Урал" үҙәгенә бирелгән бүлмәне "Смольный" тип йөрөттөләр. Ул райондарҙан шылтыратыуҙар, ҡаланыҡыларҙың килеп үҙ кәңәштәрен биреүҙәре, юғарыға саҡыртыуҙар... Гимн өсөн һүҙҙәр яҙып та, флаг өлгөләре тегеп тә алып киләләр, герб хаҡында ла фекерҙәр әйтәләр. Даими армия, республиканың үҙ аҡса өлгөһө, хатта армиябыҙ ҙа булырға тейеш, тигән фекерҙәр әйтәләр ине. Ер кодексы, Һыу кодексы, тупраҡ һәм сүплек проблемалары, Иштуған һыуһаҡлағысы, Ағиҙел атом станцияһы... Төрлө тәҡдимдәр, бихисап үтенестәр, һорауҙар... Улар барыһы ла һуңынан Б.Н. Ельцинға һәм Хөкүмәткә мөрәжәғәт эшләгән саҡта файҙаланылды.

Ҡыҫҡаһы, республикабыҙҙың суверенитет тураһында халыҡ фекере тыуҙырыуҙа "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге, уның филиалдары, "Йәшлек" гәзите ғәйәт ҙур роль уйнаны. Рәшит Шәкүр, Дамир Вәлиев, Марат Ҡолшәрипов, Диас Йәнтүрин, Мөхәмәт һәм Тәлғәт Исҡужиндар, Хәлил Барлыбаев, Зөфәр Еникеев, Мазһар Иҫәнбаев һәм башҡа бик ил улдары һәм ҡыҙҙары, ғәмле йәштәребеҙ булғанға үҙаллылыҡ яулау кимәленә халыҡ булып ойошоп, тарҡалмай килеп етТек тә инде.

***Сөмбөл АБДУЛҒАФАРОВА, уҡытыусы:*** Беҙ - тап ошо рухи һәм сәйәси күтәрелеш осоро балалары, тип әйтһәң дә яҙыҡ булмаҫ, сөнки ул замандарҙа иң популяр булған "Йәшлек" гәзитендә көнүҙәк темалар һәм проблемалар даими яҡтыртылып, халыҡ араһында аңлатыу эштәре киң ҡолас менән алып барыла ине. Шуға күрә, илдәге сәйәси хәл-ваҡиғаларҙы ситтән күҙәтеүсе генә түгел, ошо ваҡиғалар уртаһында ҡайнап йөрөүселәр ҙә булдыҡ.

Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инеү тап шундай республиканың гөрләп торған ваҡытына тура килде. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге ойоштороған митингылар булһынмы, "Аҡ тирмә" клубының мәҙәни сараларымы - беҙ, башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында уҡыусы студенттар һәр саҡ уларҙың уртаһында йөрөй торғайныҡ. Беренсе курсты тамамлар алдынан баш ҡалала фенол фажиғәһе килеп тыуҙы. Уҡыуҙы туҡтатып, беҙҙе бер аҙнаға ҡайтарып ебәрҙеләр. Ошо ваҡиғанан һуң йәшелдәр хәрәкәте киң ҡолас алды. Һәм ҡайҙа ғына, ниндәй генә сара үтмәһен - унда студенттар әүҙем ҡатнашты. Хатта уҡытыусыларҙың бәғзеләре үҙҙәре үк дәрестән митингыға ебәрә ине.

Икенсе курста уҡығанда башҡорт, башҡорт-рус, журналистар бүлектәре бер аудиторияла декан урынбаҫарының лекцияһына йыйылғанбыҙ. Күңел, әлбиттә, митингыла йөрөй, әммә дәрес ҡалдырырға ла ярамай - декан урынбаҫары үҙе бит! Дәрес башланыуҙы белдереп ҡыңғырау шылтырап, бер-нисә минут үттеме, юҡмы, аудиторияға лектор килеп инде һәм: "Дорогие мои башкиры. Что вы тут сидите, когда идет борьба за суверенитет и язык!" - тип, барыбыҙҙы ла дәрестән азат итте. Совет майҙанындағы митингынан һуң беҙ, башҡорттар тупланып, Ринат Байымовтың "Башҡортостан-гөлбостан" тип йыр башлауын күтәреп алып, Салауат һәйкәленә юлландыҡ. Иң алдан Беренсе башҡорт автономияһының флагын тотоп, Спартак Хөсәйенов барҙы. Батырыбыҙ исемен йөрөткән майҙан быға тиклем бындай тантананы күргәне булмағандыр, моғайын! Унда студенттарҙың ритайымы гелән ойошторолһа ла, был - ысын мәғәнәһендә рух байрамы, азатлыҡ байрамы ине.

11 октябрҙә республиканың төрлө мөйөштәренән килгән халыҡ, студенттар Юғары Совет сессияһы барған Ижтимағи-сәйәси үҙәк бинаһы тирәһенә йыйылды. Ингән һәр депутат талаптар, лозунгылар яҙылған плакаттар тотҡан халыҡтың тере коридоры аша үтә. Ултырыш башланғас, тышта тороусыларға тура трансляция алып барылды. Көн һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ һис бер таралышмай депутаттарҙың ҡарарын көттө. Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүе тураһында ҡарарҙы ишетеү менән урамда ниндәй хистойғолар ҡайнағанын әйтеп аңлатырлыҡ түгел. Һәм... бер нисә минуттан Ижтимағи-сәйәси үҙәк бинаһы ҡыйығында торған Рәсәй флагы ергә осоп барып ятты. БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының башҡорт бүлеге студенты, курсташыбыҙ, Баймаҡ егете Рәсүл Арыҫланов алып ташланы уны. Һуңынан, әлбиттә, уны судҡа ла торттырҙылар, әммә рухи азатлыҡ тәмен тойған халыҡ уны хөкөмдән яҡлап алып ҡалды.

Бөгөнгө йәштәр өсөн, бәлки, был әллә ҡасан булған тарих, әкиәт кеүек тойолалыр, әммә был көндәр беҙҙең йәшлегебеҙҙең сағыу ҙа, шанлы ла, данлы ла көндәре булып хәтерҙә һаҡлана.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың Дәүләт телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса программаны ғәмәлгә ашырыу хәҙер Мәҙәниәт министрлығынан Мәғариф министрлығы ҡарамағына тапшырыла. Был программаны тормошҡа ашырыуға 2019 йылдан 2024 йылға тиклем БР бюджетына 3,7 миллиард һум аҡса һалынған. 32 миллионы - "рус теле", 172,5 миллионы - "Башҡорт теле", ә 3,5 миллиарды туған телдәр программалары өсөн йүнәлдереләсәк.

✓Республика көнө алдынан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградаларын тапшырҙы. Бөтәһе 62 кеше ордендар, исемдәр, почет грамоталары һәм рәхмәт хаттары менән билдәләнде. Бүләкләнеүселәр төрлө өлкәлә эшләй: сәнәғәт, төҙөлөш, энергетика, элемтә, дәүләт хеҙмәте, сауҙа, социаль өлкә, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, фән, мәҙәниәт һәм сәнғәт, матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары, физкультура һәм спорт.

✓Район советы депутаттары ҡарары менән Фәнис Әминев Баймаҡ районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта бөгөн республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте, ул муниципалитет башлығына эшендә уңыштар теләне.

✓Республикала 138 мең кеше, уларҙың 93 меңдән ашыуы - балалар, 5 октябрҙә барлыҡ ҡалаларҙа һәм райондарҙа уҙған "Йәшел Башҡортостан" акцияһында ҡатнашты. Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, бер көндә Башҡортостанда, Республика көнө алдынан, 69 мең ағас ултыртылды, шуларҙың 38 меңе - бейек ағастар. 396 тораҡ пункт йәшелләндерелде. Был көндө йәшелләндерелгән участкаларҙың дөйөм майҙаны 146 гектар тәшкил итте. Республика етәксеһе Радий Хәбиров та акцияға ҡушылды һәм Сипайлово биҫтәһендә Яр буйы урамында Өфө мэры Өлфәт Мостафин, 155-се лицей уҡытыусылары, уҡыусылары һәм ата-әсәләр менән бергә ҡарағайҙар ултыртты.

✓"Йәшел Башҡортостан" акцияһы мәлендә Башҡортостанда 245 тематик аллея булдырылды. Улар араһында - Стәрлетамаҡта Батырлыҡ аллеяһы - республикала иң оҙоно, Нефтекамала саған аллеяһы. Бынан тыш, иҫәп буйынса икенсе акция үткәреү һөҙөмтәһендә Башҡортостанда "Сипайлово ҡарағайҙары" аллеяһы, Тормош аллеяһы, Ғаилә аллеяһы, Азатлыҡ аллеяһы, балалыҡ скверы һәм башҡалар барлыҡҡа килде.

✓ **_Боронораҡ ниндәйҙер һүҙҙе ҡысҡырып әйтеү ошо һүҙ белдергән нәмәне саҡырыуға тиң, тип ҡаралған. Шуға күрә, архаик йәмғиәттәрҙә билдәле бер һүҙҙәрҙе атап әйтеү ҙә тыйылған була._**



*КИНӘЙӘ*

# ТЫЙЫЛА БЕЛГӘН - ЗАТЛЫ

**Әҙәм балалары ошо фани донъяға фәҡәт тәбиғи бер зат рәүешле тыуалыр. Яңы ғына тыуған бәпестең ихтыяждары ла әллә ни күп түгел һымаҡ - инәһенең һөтөн имеп, ризыҡлана ла, тәүлектең байтаҡ өлөшөн йоҡлап уҙғара ул. Тамағы туҡ, ятҡан урыны йылы, тән ағзалары таҙа тороп, әсәһенең ҡуйыны вә йомшаҡ ҡулдары, наҙлы йөҙө - бына шул да етә сабыйға.**

Үҫә, йәше арта барған һайын бала өлкәндәр донъяһына - йәмғиәт ҡанундары буйынса йәшәгән мөхиткә эйәләшә бара. Тап ошо мөхиттә ул тыйыу-тыйылыу төшөнсәһен белдергән һүҙҙәргә буйһоноу зарурлығын үҙләштерә башлай. "Ярамай - теймә - тик кенә тор - шаулама" кеүек һүҙҙәр аша (әлбиттә, шул һүҙҙәрҙәге интонацион баҫым, хис-эмоция көсөргәнешлеге менән бәйләнештә) баланың яңы ғына үҫешә башлаған аңына тыйыу асылы һәм ғәмәле үтеп инә. Әгәр шулай булмаһа, кеше социаллəшә, йәғни йәмғиәти затҡа әйләнә лә алмаҫ ине.

**Тыйыуһыҙ тәрбиәләнгән балала эгоцентризм уғата көслө булып, был артабанғы тормошонда башҡалар менән иҫәпләшмәү, үҙ нәфсеһенә хужа була алмау, ошо нигеҙҙә төрлө конфликтлы ғәмәлдәр башҡарыу, хатта йәмғиәт ҡанундарын һәм дәүләт закондарын тупаҫ боҙоуға тиклем барып етеү кеүек күренештәргә юл аса. Тимәк, хуплау, маҡтау, дәртләндереү менән бер рәттән, тыйыу ҙа кешене шәхес итеп формалаштырыуҙың һөҙөмтәле бер механизмы итеп ҡаралырға тейеш.**

Тыйыу ғәмәленең үтә боронғо тамырҙары бар, ул кешелектең тәүге тормош формацияһы замандарында, ырыу-ҡәбиләләргә ойошоп йәшәй башлаған осорҙа уҡ формалаша башлаған. Ошо эпохаға хас булған тотемдар, инаныстар, ғөрөф-ғәҙәттәр кешеләр башҡарған ғәмәлдәрҙә лә, аралашыу телендәге һүҙҙәрҙә лә сағылыш тапҡан. Шул мөхиттә йәмғиәти тыйыуҙар барлыҡҡа килә. Тыйыуҙың тәү һәм төп асылы - ниндәйҙер ҡурҡыныс, хәүефле ситуацияларҙан ҡотолоу әмәлен табыу, үҙеңә һәм башҡаларға зыян килтерерлек ғәмәлдәрҙән һәм һүҙҙәрҙән ихтыяри рәүештә баш тартыуҙы талап итеү.

Боронғо ата-бабаларыбыҙ һүҙ һәм ҡылынған ғәмәлде бер рәткә ҡуйып, уларҙың берҙәй файҙалы йәиһә зыянлы булыуына инанған. Мәҫәлән, боронғолар ҡарғыштан ныҡ хәүефләнгән, төбәп әйтелгән кешенең башына ҡарғыш төшөрөн мотлаҡ, тип иҫәпләгән. Шайтан алғыры, телеңә төртмә сыҡҡыры, нәҫелең ҡороғоро, муйының һынғыры, башың аҫтыңа килгере һәм башҡа ҡарғыштар ошо архаик осорҙарҙа барлыҡҡа килеп, хәҙерге ваҡытҡа тиклем килеп еткән. Яҡындарыңды, баланды ҡарғау тыйылған ғәмәл, тип һаналған.

Боронораҡ ниндәйҙер һүҙҙе ҡысҡырып әйтеү ошо һүҙ белдергән нәмәне саҡырыуға тиң, тип ҡаралған. Шуға күрә, архаик йәмғиәттәрҙә билдәле бер һүҙҙәрҙе атап әйтеү ҙә тыйылған була, улар урынына бәғзе бер зарарһыҙыраҡ, тип иҫәпләнгән атамалар ҡулланылған.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең көрәштәше, билдәле ғалим Абдулҡадир Инан боронғо уғыҙҙарҙа бүре һүҙен әйтеү тыйылған булып, унын ҡорт һүҙе менән атала башланыуы хаҡында тап шундай аңлатма бирә. Боронғо төркиҙәрҙә ерһыу, ут, изге тау, бәғзе бер тәбиғәт күренештәре менән бәйле тыйыу ғәмәлдәре була. Мәҫәлән, "Урал батыр" эпосында күл һыуын эсеүҙе тыйыу батыр васыяты формаһында бирелә.

Христиан дине тәғлимәтенең нигеҙ ташы булған Инжилдә лә Илаһ исеменән кешеләргә бер нисә тыйылған ғәмәлдәр хаҡында вәғәз ебәрелә. Бында берҙән-бер Илаһтан башҡа аллаларҙы таныу, ерҙә үҙеңә кумир (табыныу һыны) яһау, өҫтәге күк йөҙөндә, һәм аҫтағы ерҙә, ерҙән түбән һыу эсендәге нәмәләрҙең һүрәтен төшөрөү, тикте юҡҡа Илаһтың исемен әйтеү, кеше үлтереү, зина ҡылыу, урлашыу, үҙеңә яҡын булғандың өҫтөнән ялған шаһитлыҡ итеү, унын йортон, ҡатынын, ҡолон һәм ҡол ҡатынын, үгеҙен йә ишәген, башҡа берәй нәмәләрен үҙеңә алырға теләү ғәмәлдәре тыйыла. Бындай ҡәтғи тыйыу-тыйылыу талаптарының кешеләрҙе архаик замандарҙан бирле үтәлеп килгән мәжүсилек ғөрөфтәренән арындырыу, шулай уҡ христиан әхлағына ярашлы яңы нормалар индереү зарурлығынан барлыҡҡа килеүе шик тыуҙырмай.

Ғәрәп, һуңынанораҡ төрки халыҡтар ерлегендә Ислам дине тарала башлағас, мосолмандар өсөн харам һаналған, Ислам әхлағына ҡаршы килгән гөнаһлы ғәмәлдәрҙән тыйылыу хаҡында билдәле ҡанун-нормалар пәйҙә була. Бындай тыйыуҙар изге Ҡөрьән-Кәримдә, шулай уҡ хәҙистәрҙә асыҡ күрһәтелә. Уларҙың бар тарафтарҙа киң билдәлелек алғандарынан суҫҡа итен ашауҙан, хәмерле эсемлектәрҙән тыйылыу, балиғ булған ҡатын-ҡыҙҙарға башҡалар алдында хиджабһыҙ йөрөү, уғрылыҡҡа барыу, зина ҡылыу, ғәйбәт һөйләү, кенә тотоу һ.б. шундай тыйыуҙарҙы атап китергә була.

Әйтергә кәрәк, тыйыуҙар системаһы, асылда, ижтимағи күренеш булып формалаша, бында һәр осорға хас үҙенсәлектәр, айырмалыҡтар сағылыш таба.

**Бер осорҙа тыйылған ғәмәл икенсе бер заманда үҙ көсөн юғалта, бәғзе бер илдәге тыйыу икенсеһендә рөхсәт ителә. Мәҫәлән, совет осоронда күп ҡатынлылыҡ закон тарафынан тыйылды, ә хәҙерге Рәсәйҙә ундай ҡәтғи тыйыу талабы булмаһа ла, бындай күренеш юҡҡа иҫәп. Шулай уҡ диндәге тыйыуҙарҙың ғәмәлдәге власть тарафынан хупланмауы ла, хатта ки, дини талаптың закон тарафынан тыйылыуы ла бик мөмкин.**

Миҫал өсөн уҡыусы ҡыҙҙарҙың йә уҡытыусы ҡатын-ҡыҙҙың Рәсәй мәктәптәрендә яулыҡ ябынып йөрөүе закон тарафынан тыйылыуын иҫкә алырға була.

Әйткәндәй, Исламда рәсем төшөрөү, бигерәк тә кеше йәиһә башҡа бер тереклектең һүрәтен эшләү тыйылған, тип иҫәпләнә. Зыяраттарҙа ҡәбер ташына мәрхүмдең фотоһын ҡуйыу-ҡуймау хаҡында һорашҡан саҡта ла муллаларҙан, дини белемле заттарҙан ҡәтғи һәм нигеҙле белешмә алып булмай. Шул уҡ ваҡытта кешенең фотоға төшөргә булған теләген бер ниндәй ҙә дини тыйыу юҡҡа сығара алмай, сөнки был хәҙерге цивилизацияның үтә лә ябай бер күренеше булып нығынған. Хатта ки үҙҙәрен "саф Ислам" яугирҙары тип йөрөткән фундаменталист мөжәһидтәр ҙә фото-, видеоматериалдар төшөрөп, интернет селтәренә ҡуя хәҙер. "Заман башҡа - заң башҡа"ның асыҡ сағылышы был: алдараҡ әйтелгәнсә, һүрәт төшөрөү заманында христиандар Библияһы тарафынан да тыйылған ғәмәл була. Бында ул саҡтарҙа диндарҙар бер генә маҡсат ҡуя - кеше һын (бот) эшләп, һүрәт төшөрөп, үҙенә кумир яһамаһын да, шуға мәжүсиҙәрсә табынмаһын. Әммә шуныһы ла аптыратырлыҡтыр: шул уҡ христиандар, Ғайса бәйғәмбәрҙең, изге Мәрйәм әсәнең, әүлиә (святой) тип танылған заттарҙың һүрәттәренән тәре яһап, ошоларға табыныу ғәмәлдәрен башҡарғандай тойола беҙгә.

Йәнә шәхсән үҙемә үтә ҡыҙыҡлы тойолған бер һорау менән христиан динен тотҡандарға мөрәжәғәт иткәнем бар. "Библияла христиандарға суҫҡа итен ашау тыйыла, һеҙгә ошо тыйыу мәғлүмме?" Яуап: "Юҡты һөйләмәгеҙ инде, бының булыуы мөмкин түгел". Һис ышандырырлыҡ әмәл юҡ, хатта Библия китабынан һүҙмә-һүҙ яҙылғанды уҡып ишеттергән хәлдә лә.

Һуңғы осорҙа элегерәк Волга-Көньяҡ Урал ерлегендә киң таралған суфыйсылыҡҡа ҡағылышлы күренештәр ҙә күп бәхәстәр, аңлашмаусанлыҡтар тыуҙыра. Ҡысҡырып һамаҡлап, түңәрәкләп тороп, бейеү ритмына һалынған хәрәкәттәр менән зекер әйтеүҙе беҙҙең "традицион" руханиҙарыбыҙ ҙа, уларҙы күрә алмаған салафиттар ҙа берҙәй тыйырға тырыша. Мосолман әүлиәләре тип танылған заттарҙың, хатта Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ҡәберенә зыярат ҡылыу ҙа "саф исламсылар" тарафынан тыйылған ғәмәлдәр рәтенә ҡуйыла. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бәғзе бер йәшерәк быуын мосолман милләттәштәребеҙ башҡорт донъяһында быуаттар дауамында нығынып, рухи мираҫыбыҙҙы тәшкил иткән йырбейеү сәнғәтенән дә бөтөнләйгә баш тартырға саҡыра. Йәнәһе, кеше ошо рәүешле шайтан ҡотҡоһона бирелә. Әммә башҡорт йыры, башҡорт ҡурайының моңо бер нисек тә, халыҡса әйткәндә, бер грамм да мәжүсилек менән бәйләнмәгән, һис бер диндән яҙыу ғәмәленә инмәйҙер.

**Ә ҡайһы бер диндәштәребеҙ миллилектән дә ваз кисмәксе түгелме һуң? Йәнәһе, мосолманлыҡ миллилекте танымай. Бында бер генә яуап мотлаҡтыр: Ислам халыҡтарҙы, милләттәрҙе айырып ҡарамай, уларҙың барыһына ла хаҡ мосолманлыҡты ҡабул итеү мөмкинлеге бирелгән. Юғиһә, беҙгә, башҡорт мосолмандарына, туған телебеҙҙе лә онотоп, ғәрәп теленә күсеү юлын һайларғалыр, ә? Юҡ шул: Хаҡ Тәғәлә ер йөҙөндәге барса халыҡтарын да, уларҙың телдәрен дә бер тиң итеп яратҡан, һәм ошо хәҡиҡәттән ваз кисеү үҙе бер яҙыҡ булыр ине.**

Тыйыу тураһындағы ошо яҙмамда тағы ла бер нәмәне иҫкә алыу урынлылыр. Ер йөҙөндә һәр нәмәнең үҙ урыны, һәр тереклектең тәбиғи үҙ маҡсаты, унын асылына һалынған йәшәү рәүеше бар. Тик кешегә генә фекер йөрөтөп, барса тойған-аңлаған-эшләгәненә баһа бирә алып, йәмғиәт тыуҙырған үлсәм менән үлсәп йәшәү мөмкинлеге бирелгән. Был Бөйөк Юғары Аң - Хаҡ Тәғәлә бүләгелер. Ярамаған, алама вә зыянлы ғәмәлдәрҙе лә кеше үҙе аңлап, үҙе баһалай алғанда ғына үҙ-үҙен шуларҙан тыйылырға мәжбүр итә ала. Психологтар әйткәнсә, эске контроль булмаһа, тышҡы контролдән генә артыҡ фәтеүә булмаясаҡ. Ошоға ярашлы, тыйыу ғәмәлдәрен дә, улар донъяуи булһынмы, дини талаптарҙан сығарылһынмы - фанаттарса түгел, кешелек үлсәменә һалып, аңлап вә кисереп ҡабул итеү дөрөҫөрәк булыр ине.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы парламент тематикаһы буйынса иң яҡшы эшкә журналистар һәм блогерҙар конкурсын уҙғарыу тураһында белдерҙе. Ҡатнашыусыларҙан индивидуаль һәм коллектив ғаризалар ҡабул ителә. Конкурста 2019 йылдың 1 сентябренән 2020 йылдың 31 ғинуарына тиклем киң мәғлүмәт сараларында, социаль селтәрҙәрҙә баҫылып сыҡҡан эштәр ҡатнашырға мөмкин. Ғаризаларҙы 2020 йылдың 1 февраленә ҡәҙәр ебәрергә кәрәк.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте эксперттар проекттарын архитектура күҙлегенән иң матур һәм әһәмиәтле тип таныған республика төҙөүселәренә премия тапшырырға ниәтләй. Өфөлә Рәсәйҙең төҙөлөш министры Владимир Якушев ҡатнашлығындағы республика төҙөүселәре менән осрашыуҙа Башҡортостан Республикаһы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин ошо хаҡта белдерҙе. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе һүҙҙәренсә, "типовой йорттарҙан ситкәрәк китергә, уларҙы күркәмерәк һәм сағыуыраҡ итергә кәрәк".

✓ 11 октябрҙә, Башҡортостан Республикаһы көнөндә, Сибайҙа Башҡортостандың "Сәләм" яңы телевизион каналы эшләй башланы. Ҡаланың үҙәк майҙанында көндөҙгө сәғәт 12-лә "Сәләм" хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында телеканалдың презентацияһы булды. "Сәләм" телеканалы Башҡортостан ҡалаларында һәм районларында муниципаль һәм урындағы телестудияларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн булдырылған. Яңы телеканал эфирында урындағы студияларға биш сәғәт бүленә.

✓ 2019 йылда Башҡортостандың бөтә ашығыс медицина ярҙамы бригадаларын планшет компьютерҙары менән йыһазландырыуға дәүләт килешеүе төҙөлдө. Билдәләнеүенсә, мобиль компьютерҙар ярҙамында табиптар онлайн режимында саҡырыуҙар ҡабул итергә, юлда барғанда уҡ сирҙең тарихы менән танышырға, беренсел медицина документтарын тултырырға, дауаханаға пациенттың хәле һәм уға талап ителгән ярҙам тураһында хәбәр итергә тейеш.

✓ Башҡортостанда Жәлил Кейекбаев һәйкәленең иң яҡшы проектына асыҡ конкурс башланды (1911-1968). Һәйкәлде Ғафури районының Ҡаранйылға ауылында Жәлил Кейекбаевтың йорт-музейы биләмәһендә ҡуйыу күҙаллана. Авторҙар ғаризаларҙы 5 сентябргә тиклем Ғафури районының мәҙәниәт бүлегенә тапшырырға тейеш. Адресы: Красноусол ауылы, Октябрь урамы, 2, 115-се бүлмә. Тел. 8 (34740) 2-12-48.

ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛДАРҘЫ ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕРГӘ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы стратегик сессияһының пленар кәңәшмәһендә ауылдарҙы төҙөкләндереү программаһын булдырырға тәҡдим итте.** "Ҡала мөхитен төҙөкләндереү программаһы өсөн бик рәхмәтлебеҙ. Ләкин республикала халыҡтың 40 проценты ауыл ерендә йәшәй, беҙҙә ҙур ауылдар күп. Хәҙер кешеләр күп нәмәне күрә, уларҙың донъяға ҡарашы үҙгәрә. Әгәр элек ауылда сквер йәки парк тураһында һөйләй башлаһаң, кәртәгә сығыу менән парк башлана, тиген яуапты ишетергә мөмкин ине. Хәҙер ауыл халҡы ла үҙҙәрендә төҙөкләндерелгән уңайлы биләмәләр булыуын һорай. Ҡатын-ҡыҙ, туфли кейеп, бала менән яҡты һәм хәүефһеҙ урамда йөрөй алырға тейеш. Был, әлбиттә, министрлыҡҡа һорау түгел, ләкин беҙ ауыл биләмәләрен үҫтереү буйынса программаларҙы ла аҡса менән тулыландырыу йәһәтенән ҡарарҙарҙы ҙур түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. Ауыл биләмәләрен дә төҙөкләндерергә теләр инек. Ғариза өсөн кәрәкле документтарҙы тапшырҙыҡ", - тине Радий Хәбиров.

✓**1 октябрҙән Өфөлә "Алға" берҙәм транспорт картаһы эйәләренең бер сәғәт эсендә өҫтәп түләмәйенсә "Башавтотранс" автобустарынан һәм муниципаль электр транспортынан Дим - Шакша станциялары араһында йөрөгән ҡала яны поездарына күсеп ултырыу мөмкинлеге бар.** "Электричка пассажирҙары, "Алға" карталары эйәләре, был яңылыҡтың өҫтөнлөгөн тойҙо ла инде. Хәҙер, мәҫәлән, Шакшала йәшәгән студенттар, баш ҡала үҙәгендәге юғары уҡыу йортарына 18 һумға йөрөй. Был - транспорт картаһы эйәләре өсөн тариф. Ә элек ошо юл ваҡыты, хаҡы буйынса ла ике тапҡырға тиерлек оҙағыраҡ һәм ҡиммәтерәк ине", - тине Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһының матбуғат секретары Сергей Спатар. Ул шулай уҡ 60 минут эсендә икенсе һәм артабанғы юл йөрөү хаҡы нулгә тиң булыуын иҫкә төшөрҙө. Ҡала яны поездары пассажирҙарына "Алға" картаһы менән электричкала бер нисә тапҡыр йөрөргә була, ләкин Дим - Шакша участкаһында ғына.

✓**Башҡортостанда ҡатын-ҡыҙҙарҙың бушлай маммография үтеү һәм онколог менән кәңәшләшеү мөмкинлеге бар.** 12, 19, 26 октябрҙә һәм 2 ноябрҙә "Алһыу таҫма" акцияһы барышында республика онкология диспансерында ҡабул итеүҙәр ойоштороласаҡ. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәте буйынса, маммологка урындағы поликлиникаларҙың онкологтары аша, шулай уҡ Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Нефтекама, Октябрьский, Бәләбәй, Күмертау, Сибай, Белорет, Бөрө ҡалаларында, Дыуан районының Мәсәғүт ауылында Муниципаль-ара медицина онкология үҙәктәрендә һәм Онкология амбулатор ярҙамы үҙәктәрендә яҙылырға мөмкин. Өфөләр 32-се, 48-се, 43-сө, 13-сө, 50-се ҡала поликлиникалары ҡарамағындағы Онкология амбулатор ярҙамы үҙәктәренә лә мөрәжәғәт итә ала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺӨҘӨМТӘҺЕ КӘРӘК...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бер ай эсендә чиновниктар туризмына нөктә ҡуйырға ҡушты. Был хаҡта ул республика хөкүмәтендәге Инвестиция советы ултырышында төбәктең Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә төрлө эшлекле сараларҙа ҡатнашыуына ҡағылышлы мәсьәләне тикшереү барышында белдерҙе.**



Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, әгәр чиновник ҡайҙалыр барған һәм бер нимәһеҙ ҡайтҡан икән, тимәк, ул турист. "Миңә бында туристар кәрәкмәй. Шуға күрә Эксперт идаралығы эшкә ҡушылһын һәм беҙҙең ҡайҙа барыуыбыҙ, нимәләр алып ҡайтыуыбыҙ тураһында һығымта эшләһен", - тип йөкләмә бирҙе Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякинға. Бынан тыш, хәҙер чиновниктарҙың һәр сәфәре буйынса командировка йомғаҡтары буйынса шәхси отчетты көҙ уңында тотҡан регламент буласаҡ. "Барып ҡайттың икән, миңә яҙма рәүештә доклад яҙырға кәрәк. Шунда булдым, шунса осрашыуҙар үткәрҙем, шунса килешеүҙәр төҙөнөм йәки Каирҙың матурлығын ҡараным. Регламент индерегеҙ, быға бер ай ваҡыт", - тине республика етәксеһе Радий Хәбиров. Артабан ул республика хөкүмәте вице-премьеры вазифаһын башҡарыусы Илшат Тажетдиновтың Анкараға командировкаһын ыңғай миҫал итеп килтерҙе. Сәфәр һөҙөмтәһендә Төркиәнең биш инвесторы менән Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышын үҫтереү хаҡында килешеүҙәргә өлгәшелде. "Миңә сәфәрҙәребеҙ географияһын бирегеҙ. Министр урынбаҫарҙары, департамент начальниктары бара, улар унда нимә эшләйҙәр, аңламайым. Беҙҙең шул хәтлем бай йәшәрлек мөмкинлегебеҙ юҡ. Беҙҙең барыһы ла эшлекле булырға тейеш. Бының өсөн бер тин дә йәл түгел. Эшлекле һәм уйланылған сәфәрегеҙ өсөн аҡса түгергә әҙермен", - тип йомғаҡ яһаны ултырышҡа Радий Хәбиров.

# БАҠСА МЕНӘН КӨН КҮРӘЛӘР

**Башҡортостанда 500 мendән ашыу ғаиләнең дачаһы бар. Был - республикала йәшәгән халыҡтың 38 проценты тиерлек. Ошо күрһәткес буйынса Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында алтынсы урынды биләй.**

Ошо хаҡта Башҡортостан Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов һөйләне: "Республикабыҙҙа йәшәүселәр өсөн баҡсасылыҡты алып барыуҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ: был - социаль көсөргәнешлекте кәметеү ҙә, ялды һәм һауыҡтырыуҙы ойоштору ҙа. Хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң кешеләрҙең яраҡлашыуы һәм, иң мөһиме, торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү мөмкинлеге лә был. Шул уҡ ваҡытта, әйтергә кәрәк, дәүләт халыҡтың ошо категорияһына аҙ иғтибар бүлә. Һуңғы 10 йылда баҡсасыларға маҡсатлы ярҙам булманы. Саралар күрелһә лә, улар баҡсасылыҡтың дөйөм торошона йоғонто яһаманы", - тип билдәләне вице-премьер вазифаһын башҡарыусы.

Илшат Фәзрахманов майҙа баҡсасыларҙың проблемаларын хәл итеү буйынса ведомство-ара эш төркөмө булдырылыуы, баҡсасылыҡҡа булышлыҡ күрһәтеү йәһәтенән илдең башҡа төбәктәренең законлар сығарыу һәм норматив-хоҡуҡи базаһын анализлау хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, 68 муниципаль берәмектең 35-енең үҙ биләмәһендә баҡсасылыҡ ширҡәттәре юҡ. Башҡортостандың һалым хеҙмәтендә бөтәһе 1160-ҡа яҡын баҡсасылыҡ ширҡәте теркәлгән. Хәҙер республика хөкүмәтендә "Башҡортостанда граждандарҙың үҙ ихтыяжы өсөн баҡсасылыҡты алып барыуы тураһында" республика закон проекты әҙерләнә. Билдәләнеүенсә, баҡсасылыҡ тураһында закон ҡабул ителгәс, коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәттәренә ярҙам күрһәтеү буйынса республика программаһы төҙөү күҙаллана.

# КӘРИМ ХӘКИМОВ ТУРАҺЫНДА

**Август башында Бөйөк Британия архивы Башҡортостанға СССР-ҙың ғәрәп илдәрендәге беренсе тулы хоҡуҡлы вәкиле булып тарихҡа ингән совет дипломаты Кәрим Хәкимовтың эшмәкәрлеге тураһында уникаль документтар тапшырҙы. "Башинформ" агентлығындағы матбуғат конференцияһында "Ҡыҙыл паша" Кәрим Хәкимов тураһындағы яңы фактар хаҡында һөйләнеләр.**

Британия папкаһы Бөйөк Британияның Сит ил эштәре министрлығы архивынан алынған документтар корпусынан тора. Был - Кәрим Хәкимовтың Яҡын Көнсығыштағы эшмәкәрлегенә бағышланған бер нисә йөҙ бит. Документтарҙың төп өлөшө инглиз телендә. Британия архивынан документтарҙы юрист, хоҡуҡ яҡлаусы, Кәрим Хәкимовтың биографияһын өйрәнеүсе Владислав Йосопов алған. Ул ваҡытта саҡ 30 йәшен тултырған Кәрим Хәкимовты архив документтарында төрлөсә ҡылыҡһырлайҙар, тип һөйләне ул. Әйтәйек, 1924 йылдың августы тип билдәләнгән белдереүҙә совет дипломатының ғаиләһе менән сүллеккә бер ниндәй әҙерлекһеҙ, килешһеҙ кейемдә килеүе һүрәтләнә, уның дипломатик хаталары тураһында хәбәр ителә. Ләкин ярты йылдан һуңғы белдереүҙәрҙә Хәкимов хаҡында ҙур хөрмәт менән яҙа башлайҙар. Тәүҙә ул ғәрәп телендә һөйләшмәгән булһа, 1925 йылдың ғинуарында ошо телдә иркен аралаша. "Документтар тарихсыларға һәм ғалимдарға ҡыҙыҡлы булыр. Был документтарҙы Рәсәй Федерацияһының Сит ил эштәре министрлығына күрһәттек. Документтарҙың бер өлөшөн министрлыҡ менән килешмәйенсә йәмәғәтселеккә күрһәтә алмайбыҙ. Улар белгес-дипломаттар яғынан тикшереү талап итә", - ти Владислав Йосопов. Матбуғат конференцияһында журналистар, тарихсылар, яҙыусылар, Кәрим Хәкимовтың туғандары бар ине. Уларға ҡайһы бер документтарҙың күсермәләрен күрһәттеләр. СССР-ҙың ғәрәп илдәрендәге беренсе тулы хоҡуҡлы вәкиле Кәрим Хәкимов тураһында яңы фактар нигеҙендә тарихи документаль фильм төшөрөү күҙаллана. Продюсерҙары - Владислав Йосопов һәм билдәле рәссам Камил Буҙыҡаев.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының Ҙур сәхнәһендә М.Ғафури исемендәге драма театры Мостай Кәримдең комедияһы буйынса "Ҡыҙ урлау" спектакленең премьераһын ҡуйҙы. Спектаклдең яңы сәхнә вариантын режиссер, Башҡортостан Республикаһының Ш.Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Илсур Ҡаҙаҡбаев ижад итте. Күптәр әҫәрҙең яңы вариантын ҡыйыу аҙым тип атаны. Йәш геройҙар сәхнәгә 60-сы йылдарҙағы сағыу стилягалар образында сыға.

✓Юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары студенттары, шулай уҡ мәктәп уҡыусылары наркотиктарға тест үтергә тейеш. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бойороғо хоҡуҡи мәғлүмәт сайтында баҫылған. Документта хәбәр ителеүенсә, тикшереүҙәр уҡыусылар һәм студенттар араһында наркотик матдәләр ҡулланыу осраҡтарын иртә асыҡлау өсөн үҙгәрыла. Өфөлә тест 1-се Республика наркология диспансерында үткәрелә, ә Өфө районы уҡыусылары һәм студенттары 21-се ҡала клиник дауаханаһына ебәрелә.

✓9 октябрҙә Благовещен ҡалаһында урынлашҡан "ПОЛИЭФ" концернының ҡалдыҡ һыуҙар һаҡланған резервуарҙарының беренһенең стенаһы ыйнлап, ҡалдыҡтар тирә-яҡ территорияға аҡты. Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса оператив штаб ойошторолдо. Урында Минэкология лабораторияһы эшләй, белгестәр барлыҡ кәрәкле пробаларҙы ала һәм тикшерә. Оператив эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә ҡалдыҡтарҙың ҙур территорияға таралыуына юл ҡуйылмаған, тимәк, халыҡҡа һәм биләмәләргә хәүеф янамай.

✓"Өфө" халыҡ-ара аэропортының эске һауа юлдары терминалын реконструкциялауҙы 2020 йылдың 31 мартында тамамлау күҙаллана. Реконструкциянан һуң терминалдың майҙаны 35 процентҡа арта, был иһә сәғәтенә 1200 пассажирҙы хеҙмәтләндерергә мөмкинлек бирә. Реконструкциянан һуң Өфө аэропортында туғыҙ телескопик баҫҡыс була.

✓Башҡортостанда йөрәк сирле пациенттарҙың айырым категориялары йыл дауамында республика бюджеты аҡсаһы иҫәбенә дарыуҙар алыу хоҡуғына эйә, тип хәбәр итә Һаулыҡ һаҡлау министрлығы. Сирҙәр категорияһы исемлегенә йөрәктең ишемия ауырыуы һәм мейе инфаркты индерелде. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда ошондай диагнозлы 10,5 мең сирле йәшәй. Ҡарарҙы 2020 йылдың 1 ғинуарынан тормошҡа ашырыу күҙаллана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Тормош гел аҡ һыҙаттан ғына тормай, ул ҡараһы менән сиратлашып килә икәнен ошо көндәрҙә генә баш ҡаланың Ленин урамында ике "аҡыллы туҡталыш" павильонын ҡыйратып китеүҙәре тағы бер раҫланы.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Был юлы ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә тураһында һөйләүҙе ҡыуаныслы яңылыҡ менән уртаҡлашыуҙан башлайыҡ. Ҡыштың тәүге айы башланыу менән Затон биҫтәһендә Әҙеһәм Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбе ҡабаттан эш башлаясаҡ. Әлеге ваҡытта уны инженер коммуникацияларына тоташтырыу, тирә-яғын төҙөкләндереү эштәре башҡарыла. Дөйөм майҙаны 1500 квадрат метр тәшкил иткән, шәхси һәм төркөм менән шөғөлләнеү өсөн 17 бүлмәһе, заманса концерт залы булған өс ҡатлы бина тиҙҙән үҙ ишектәрен асасаҡ. 1966 йылдан бирле балаларға өҫтәмә музыкаль белем биреү йүнәлешендә эшләгән был белем усағы ремонттан һәм реконструкциянан һуң яңы һулыш менән эш башлар, тигән өмөт уяна күңелдә.**

# ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК ХЫЯЛ ҒЫНАМЫ?

Яйлап ҡына хәүефһеҙлек темаһына күсергә лә мөмкин. Мәғлүм булыуынса, һуңғы ваҡытта пассажир транспортындағы хәүефһеҙлек темаһы көн үҙәгенән төшмәй ҙә тиерлек. Был юлы иһә ҡыйыуына газ баллондары ҡуйып пассажирҙарҙы хеҙмәтләндергән транспорт саралары тураһында һүҙ булды. 1 июлгә ҡарата бындай автобустар һаны 117 тип теркәлһә, әлеге ваҡытта бер генә автобус ҡалған. Был йүнәлештә эш дауам итә һәм яуаплы ведомство вәкилдәре ай һуңына Өфө урамдарында ундай транспорт бөтәсәк, тип вәғәҙә итә. Әммә шуныһы бар: был һандарға "Башавтотранс" автобустары инмәгән, сөнки һуңғыларына заводта етештерелгән газ баллондары ҡуйылған һәм әлегә улар маршрутта йөрөй.

Тормош гел аҡ һыҙаттан ғына тормай, ул ҡараһы менән сиратлашып килә икәнен ошо көндәрҙә генә баш ҡаланың Ленин урамында ике "аҡыллы туҡталыш" павильонын ҡыйратып китеүҙәре тағы бер раҫланы. Әле видеояҙма алынған, вандалдың иҫерек йәш кеше булыуы билдәле, уның шәхесен асыҡлау буйынса хоҡуҡ органдары эш алып бара.

Һуңғы ваҡытта баш ҡалала ғына түгел, республиканың төрлө төбәктәрендә негатив күренештәр күбәйеүе һағайта. Психик сирҙәрҙең көҙгө киҫкенләшеүеме был, әллә башҡа сәбәптәре бармы? Көнөтөнө ағылған кире мәғлүмәттәрҙән өлгө алабыҙ, шуны гәзиткә индерә барабыҙ кеүек тойола башлай хатта. Ғәмәлдә иһә, йәмғиәттә ниндәйҙер хәүеф йәшәгән кеүек. Хәүеф тигәндән, кәңәшмәнең көн тәртибендә ошо тема тағы үҙәккә сығарылды. Баш ҡала халҡының именлеген кемдәр һәм нисек тәьмин итә - был хаҡта "Өфө ҡалаһы йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге" директоры Александр Овчинников сығыш яһаны.

Үҙәк бынан 7 йыл элек граждандарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү һәм йәшәү, эшләү өсөн имен шарттар булдырыу өсөн ойошторолған. Быйыл Үҙәк хеҙмәткәрҙәре 2,5 мең сарала именлек тәьмин иткән, Үҙәк ярҙамында 3 меңдән ашыу кешене берләштергән "Правопорядок" халыҡ дружинаһы ойошторолған. 9 ай эсендә дружинасылар полиция менән берлектә 3,5 мең административ хоҡуҡ боҙоуға кәртә ҡуйған. Учреждение хеҙмәткәрҙәре тәүлек әйләнәһенә видеокүҙәтеү системаһына мониторинг үткәрә һәм "Хәүефһеҙ ҡала" комплексы ҡорамалдарын техник яҡтан хеҙмәтләндерә. Был система ҡалалағы хәл-торошто күҙәтергә һәм гәҙәттән тыш хәлдәрҙә ваҡытында хәл итеү, хоҡуҡ боҙоуҙарҙы булдырмау һәм уларҙы асыу, башҡа хеҙмәттәр менән берлектәге эшмәкәрлекте координациялау мөмкинлеген бирә. Быйыл камералар һаны 395-кә еткән. Тиҙ арала уларҙың һаны 1,5 меңгә етеүе көтөлә. Тимәк, киләсәктә, ҡайһы урында ғына булмаһын, вандалдар булғанды ҡыйратырҙан алда иң элек "Хәүефһеҙ ҡала" системаһы хаҡында уйланасаҡ. Сөнки урамдарҙа камераларҙың күплеге һәр аҙымың күҙәтеү аҫтында буласағына ишара. Был осраҡта инде башҡа енәйәттәр ҙә, административ хоҡуҡ боҙоуҙар ҙа күҙгә күренеп кәмеүе ихтимал. Кем белә, бәлки Өфө тиҙҙән миллионлы ҡалалар араһында иң хәүефһеҙ баш ҡала булараҡ дан алыр?..

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# КЕМГӘ ЭШ ХАҠЫ АРТА?

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров дәүләт хеҙмәткәрҙәренә һәм республиканың дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын арттырыу тураһындағы указдарға ҡул ҡуйҙы.**

"2019 йылдың 1 октябренән Башҡортостан Республикаһы дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең оклад күләмен (вазифалы оклад) һәм һөнәри квалификация төркөмдәре буйынса минималь окладын билдәләү өсөн база бирәмеге күләмен 1,043-кә арттырырға", - тиелә документта. Республика Башлығының башҡа указы менән 1 октябрҙән Башҡортостандың дәүләт вазифаларын биләгән кешеләргә ай һайын аҡсалата бүләкләү һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы шулай уҡ 1,043 тапҡырға арта. Урындағы үҙидара органдарына "республиканың муниципаль учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын ваҡытында арттырыуҙы тәьмин итергә", шулай уҡ "муниципаль вазифаларҙы биләгән кешеләргә аҡсалата түләүҙе арттырырға" тәҡдим ителде. Ике указ да 2019 йылдың 1 октябренән көсөнә инә.

# ВЕТЕРАНДАРҒА ЛА...

**2020 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда ветерандарға айлыҡ түләүҙәр арта. Республика Башлығы Радий Хәбиров түләүҙәрҙе индексациялау тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы.**

"Документҡа ярашлы, киләһе йылдың башынан сәйәси репрессияларҙан зыян күргән тип танылған кешеләргә түләүҙәр 553,28 һумдан 600 һумға тиклем арта, - тип хәбәр итте Башҡортостан Хеҙмәт министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко. - Реабилитацияланған кешеләргә айлыҡ түләүҙәр 659,68 һумдан 700 һумға; тыл эшсәндәренә - 415,15-тән 450 һумға тиклем; хеҙмәт ветерандарына 376,06 һумдан 400 һумғаса арта. Пенсия танытмаһына льготаға хоҡуҡ тураһында ҡушымтаһы булған хеҙмәт ветерандарына, шулай уҡ оҙайлы эш стажына эйә хеҙмәт ветерандарына түләүҙәр 145,93-тән 200 һумға тиклем күтәрелә".

# ӨҪТӘМӘ АРЫУ ҒЫНА...

**Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Рәсәй хөкүмәтенә тейешле йөкләмәһе буйынса беренсел звено медицина хеҙмәткәрҙәренә федераль өҫтәмә түләүҙәр тәғәйенләйҙәр.**

1 ноябргәсә медицина эшмәкәрлеген лицензиялау тәртибе камиллаштырылырға, шулай уҡ Рәсәй субъекттары властарының медицина ойошмаһы булдырыу йәки уның эшмәкәрлеге йүнәлешен үҙгәртеү тураһында ҡарарҙарҙы алдан килешеү процедураһы индерелергә тейеш. Бынан тыш, 1 октябрҙә тиклем хөкүмәткә медицина вуздарын тамамлаусылар дәүләт һәм муниципаль медицина учреждениеларында өс йыл буйына тәжрибәле белгестәр контроле аҫтында эшмәкәрлек алып барһын өсөн "йәш белгес" һәм "табип-остаз" төшөнсәләрен ҡануни яҡтан нығытырға кәрәк ине. Быйыл июлдән Өфөнөң ашығыс ярҙам хеҙмәткәрҙәренә эш стажы өсөн өҫтәмәләр билдәләнде. Йәғни, әгәр бөгөн фельдшерҙың окладлы 11 мең һум тәшкил итһә, өҫтәмәнең максималь суммаһы 7 мең һумдан саҡ ҡына күберәк була.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# МӘЖБҮРИ РӘҮЕШТӘ...

**Башҡортостанда суд приставтары үпкә ауырыуы булғандарҙы мәжбүри рәүештә дауаханаға һала. 2019 йылдың 9 айында ғына туберкулез менән сирләгән 26 кеше тикшереүгә ебәрелде, тип хәбәр итә Федераль суд приставтары хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте.**

Туберкулезға ҡаршы диспансерҙа иҫәптә торған кешеләр медицина тикшереүе үтергә тейеш, ләкин бөтәһе лә тикшереүҙе мотлаҡ тип иҫәпләмәй. Тағы 25 кешене эҙләп табып, тейешле тикшереү үткәреү һәм дауалау өсөн мәжбүри рәүештә дауаханаға ебәрергә кәрәк. Сирлеләрҙе мәжбүри рәүештә дауаханаға һалыу тураһында документтар суд приставтары хеҙмәтенә тапшырыла, шунан һуң улар медицина учреждениелары менән берлектә үпкә ауырыуҙары булғандарҙы медицина тикшереүе үткәреү йәки тейешле дауа алыу өсөн учреждениеларға ебәрә.

# АҒАСҠА ХОҠУҒЫҢ БАР

**Башҡортостанда өс һәм унан күберәк балиғ булмаған балалы ғаиләләр, инвалид балалы ғаиләләр, шулай уҡ урман тармағының 35 йәшкә тиклемге йәш белгестәре йорт, башҡа ҡаралты төҙөү, уларҙы ремонтлау, йылытыу өсөн ағас алыу хоҡуғына эйә.**

Урман хужалығы министрлығы хәбәр итеүенсә, был норма ауыл ерендә йәшәгән һәм шәхси торлаҡ төҙөү, шәхси хужалыҡ алып барыу өсөн тәғәйенләнгән ер участкаларына эйә граждандарға ҡағыла. Билдәләнеүенсә, өй һалыуға - 25 йылға бер тапҡыр 110 кубометрға тиклем, өйҙө ремонтлауға - 5 йыл дауамында 25 кубометрға тиклем, йорт-ҡаралты төҙөүгә - 5 йыл дауамында 50 кубометрға тиклем, ошондай ҡаралтыларҙы ремонтлауға - 3 йыл дауамында 15 кубометрға тиклем, йылытыуға йылына 20 кубометрға тиклем ағас бүлеү ҡаралған. Килешеү буйынса ағас өсөн түләү күләме Башҡортостан һәм Рәсәй хөкүмәтенең ҡарарҙары менән раҫланған ставкаларға ярашлы билдәләнә. Билдәле булыуынса, киләһе пленар ултырышта БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары закон проектын ҡараясаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүткереү

❖ Йүткереүҙе, пневмонияны мәтрүшкә дауалай. 75 грамм мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм йылы көйөнә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда яртышар стакан эсергә. Пневмонияның ауыр формаһында бынан тыш тағы ла бер дауа ҡушып дауаланығыҙ. Эмалле һауытҡа 1 стакан ярҙырылмаған һоло һалып, уға 1 литр һөт ҡойорға ла, 1 сәғәт талғын утта бешерергә, һөҙөргә һәм аҡ май, бал өҫтәп, йоҡлар алдынан эсергә. Төнәтмәләрҙе көн һайын әҙерләргә.

### Гайморит

❖ 1 балғалаҡ глицеринға 4 балғалаҡ һыу, 10 мумие таблеткаһы (0,2 грамлыҡ) ҡушып болғатырға. Танауға көнөнә 3 тапҡыр тамыҙырға. Дауаланыу курсы - 3 аҙна. 5 көн ял иткәс, курсты тағы ҡабатларға. Ғәҙәттә ошолай 3 ай дауаланғандан һуң гайморит юҡҡа сыға.

### Ангина

❖ 100 мл йылы һыуға 1 балғалаҡ картуф крахмалы, 1 балғалаҡ глицерин, 2-3 тамсы йод ҡушып, яҡшылап болғатырға ла, тамаҡты сайҡатырға. Йоторға ярамай! Процедураны көнөнә 3-4 тапҡыр ҡабатларға. 2-3 көндән ангина үтә.

### Туберкулез

❖ Туберкулез аҙмаһын өсөн шундай дауа тәҡдим ителә: киптерелгән миндаль, ҡарбуз ҡабығын, имбир, корицаны ҡәһүә үткәргестә тартырға (тартылған көйө уларҙың күләме тигеҙ булырға тейеш), бал өҫтәргә, болғарға һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ашарға. Хәл яҡшырғансы дауаны дауам итегеҙ.

### Ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙары

❖ Иртән һәм йоҡлар алдынан ас ҡарынға мумие ҡабул итергә. Дауаны 25-28 көн дауам итергә. Ауырыу нығ аҙған булһа, ун көндән дауалау курсын яңынан ҡабатларға. Мумиены 1:20 нисбәтендә һөттә иретергә тәҡдим итәм. Шулай уҡ һыуға болғатһағыҙ ҙа була. Тәменә ҡарап, бал өҫтәргә ярай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**XX быуатта көньяҡ-көнбайыш райондарында яңы - сәскәле-үҫемлек орнаментлы балаҫтар барлыҡҡа килә башлаған. Ҡара төҫтәге ерлеккә боролмалы һабаҡлы ал ҡыҙыл һәм ҡыҙыл төҫтәге еләк-емеш тәлгәштәре, япраҡтар солғанышындағы роза сәскәләре, күк һәм һары сәскәләр төшөрөлгән.**

Айырым өлөштәре ҡайма орнаменттарына сығарылған. Ғөмүмән, балаҫтарҙағы үҫемлек биҙәктәре ныҡ геометриялашҡан булған. Һигеҙ тажлы асыҡ сәскәләр йыш ҡына түңәрәкләнеп, һигеҙ мөйөшлө йондоҙҙарға әүерелгән. Ҡайһы бер балаҫтарҙа үҫемлек биҙәктәре геометрик биҙәктәр менән берләштерелгән. Башҡортостан Республикаһы Милли музейы фондында уртаһына традицион ромбтар төшкән, ә ҡаймаһы таяу һабаҡта төрлө төҫлө мөйөштәрҙән торған түңәрәкләнгән бәләкәй ромб рәүешендәге сәскәләр менән биҙәлгән балаҫ һаҡланып ҡалған.



*XX быуат уртаһындағы балаҫтарҙағы сәскәле орнамент. Автор фотоһы. 1963*

Республиканың көньяҡ-көнбайыш райондары әле лә балаҫ етештереү актив үҫешкән территория булып иҫәпләнә. Дим һәм Ағиҙел буйҙарында сағыу биҙәкле келәмдәр эшләгән туҡыусыларҙы күп осратырға була. Келәмле әйберҙәр әле лә бирнәгә индерелә һәм заманса интерьерҙарҙы биҙәгәндә ҡулланыла.



*Төрлө төҫлө ерлектәге орнаментлы балаҫ. Ейәнсура районы. Ибрай ауылы. Автор фотоһы. 1981*

**Светлана ШИТОВА. "Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БАТШАЛАРҒА БАШ ЭЙМӘГӘН ӘЙЛЕЛӘРБЕҘ!

Юл ыңғайында тағы бына ошо фактты ла иғтибарһыҙ ҡалдырып булмай. Әйлеләр һәм, ғөмүмән, башҡорт тарихына ҡарата ошондай классик ҡараШта тороусы ғалимдар Көньяҡ Уралда беҙҙең эраға тиклем, таш һәм бронза быуат дәүерҙәрендә йәшәгән ҡәбиләләрҙең башҡорттар өсөн этник нигеҙ була алыуын әлегә тиклем ышаныслы фараз итеп ҡарамай әле. Ошондай тарихи версияны ысынбарлыҡта булыуы мөмкин, тип иҫәпләгәндә, шул уҡ Алтай - Урта Азия ерлегендә теркәлеүсе ырыу-ҡәбиләләрҙең беҙҙең эранан бик күпкә алдараҡ быуаттарҙа климатик катастрофаға дусар булған Уралдан көньяҡ тарафтарға күсеп китеп, заманалар үтеү менән иң боронғо төйәктәренә кире ҡайтыуҙары менән дә аңлатырға булалыр.

Йәнә әйлеләр тарихында булған (йәиһә булыуы мөмкин булған) үтә ҡыҙыҡлы бер факт хаҡында ла хәтергә алыу урынлы булыр. Хисам-ад-Дин ибн Шараф-ад-Дин әл Булғари исемле мосолман авторы үҙенең "Рисала-и таварих-и Булгарийа" китабында башҡорттар араһында иң беренселәрҙән булып әйле ырыуы вәкилдәренең Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ сәхәбәләренең тәбиғиндәре, йәғни уҡыусылары булып китеүе хаҡында яҙа. Ҡаҙан ҡалаһында 1902 йылда баҫылған "Рисала-и таварих-и Булгарийа ва зикр-и мавляна хазрат-и Аксак Темир ва хараб-и шахр-и Булгар" исемле китапта бына ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Первым, кто пришел с западной стороны Урала для обучения у сахабов из племени Башкурт, был Аиткул, сын Заита, который пришел из долины реки Ай. Затем Кутлубай, сын Давлетбая; Эткусты, сын Муйнака; Этимган, сын Кулчума; Уразбаки, сын Бурджана; Таймас, сын Тайсына - все они, придя с реки Ай, получили обучение у сахабов, вернулись в свои юрты, став мусульманами".

Әйлеләр һәм мырҙалар тәүҙәрәк Ағиҙел үре, Яйыҡ, Уй һәм Миәс йылғалары менән сикләнгән ғәйәт ҙур территорияла көн итә. Улар Яйыҡ йылғаһы буйлап хәҙерге Әбйәлил районы ерҙәренә тиклем килеп етә, бындағы Ярлыҡап ауылы эргәһендәге тау әле лә Әйҙегән тип атала. Риүәйәттәргә ярашлы, тап ошо тау башында әйле батырҙары ерләнгән икән. Әйлеләр, Урал һырты буйлап өҫкәрәк күтәрелеп, Миәс йылғаһы үҙәнен дә үҙләштерә, артабан Әй йылғаһы буйҙарында ла таралып йәшәй башлай. Легендаларҙың береһендә Әй йылғаһы башында бер тау булып, ошо тауҙа әйлеләр ханы Сәйҙәштең төп төйәге урынлашыуы хаҡында әйтелә. Һарт-әйлеләр, мырҙалар ҙа ошо төбәктә урынлаша. XVIII быуатта ғалим-сәйәхәтсе Паллас үҙенең яҙмаларында Урал һыртынан көнсығыш юҫыҡта, Миәс үрендә Һарт олоҫо булыуы хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған.

Ошо уҡ төбәккә табын ырыуы башҡорттары ла үтеп инә, һәм XIV быуат аҙағында әйлеләр Яйыҡ һәм Миәс үрендәге ерҙәренән төньяҡҡараҡ, Әй йылғаһы үҙәненә табан йүнәлә. XV быуатта һарттарҙың бер өлөшө әйлеләр артынан китә, байтағы табындар менән йәнәш йәшәүен дауам итә. Был ваҡытта Әй үҙәне башлыса әйлеләр, дыуан-әйлеләр, мырҙалар ҡарамағында булғас, һарттар Урал аръяғына юллана. Һарттарҙың ҙур булмаған төркөмдәре Тобол, Миәс һәм Уй йылғалары арауығындағы күлле далаларҙа көн итә. Әммә Урал аръяғындағы һарт-әйлеләр ошо төбәктә XVIII быуаттан ғына даими йәшәй башлай. Ошо шарттарҙа әйлеләр табын башҡорттары менән тығыҙ аралашып йәшәй, был ошо ырыуҙарҙың һөйләш уртаҡлығында бик асыҡ сағылыш тапҡан.

XVIII быуатта йыш ҡабатланып торған башҡорт ихтилалдарында әйлеләр даими әүҙемлек күрһәтә, тап шуның арҡаһында уларҙың күп ауылдары яндырыла, ерҙәре тартып алына, байтағы яуҙарҙа һәләк була. Тап ошо шарттарҙа әйлеләрҙең бер өлөшө көнсығышҡараҡ күсеп китеп, Уй һәм Тобол йылғалары буйҙарындағы далаларға барып сыға. Бында улар ҡатайҙарға йәнәш, йә был тарафтарға алдараҡ килеп йәшәүсе һарт-әйле ерҙәрендә төпләнә.

Һарттарҙың бәғзе бер төркөмдәре XVI быуат башынан уҡ Тарихи Башҡортостандың көнбайыш яғынараҡ күсеп китә, бында улар Ағиҙел йылғаһының урта ағымындағы, уның һул яғындағы ерҙәргә килеп сыға, бында һарттарға ғына хас топонимдарҙың күп булыуы ла тәбиғи. Һарт-әйлеләрҙең бер өлөшө Ыҡ тамағына барып етә, XVIII быуатҡа ҡараған сығанаҡтарҙа бында Һарт-Мең олоҫо булыуы ла билдәле. Хәҙер Әй йылғаһы буйында йәшәүсе һарттарҙың риүәйәттәрендә ата-бабаларының



ҡасандыр Минзәлә өйәҙендә йәшәп, шунда боронғо зыяраттары булыуы хаҡында ла бәйән ителә.

Ихтилалдар барышында карателдәр эҙәрләүенән ҡасып киткән байтаҡ ҡына әйле башҡорттары Бәләбәй өйәҙенә (хәҙерге Туймазы районы), Дим үрендәге, Үсән буйындағы башҡа башҡорт ырыуҙары ерҙәренә килеп урынлаша. Ҡаҙан даруғаһының Йәнәй олоҫо ерҙәренә күсеп килеүсе әйле башҡорттарының аҫаба ерҙәрендә тамам бөлгөнлөккә төшөрөлөүе сәбәпле тыуған яҡтарын ташлап китергә мәжбүр ителеүҙәре хаҡында тарихи документтар бар.

Әйле берләшмәһенә ҡараған башҡорт ырыуҙары XVI быуат урталарында, Иван Грозный Ҡаҙан ҡалаһын яулап алған ваҡытта, Себер ханы Күсем ҡулы аҫтында була. Себер ханлығы Мәскәү батшалығы хакимлығын танымай, шуға күрә XVII быуат баштарына тиклем ҡаршылыҡ күрһәтә. Күрәһең, ошо ханлыҡ составындағы әйле һәм табын башҡорттары ла батша наместниктарына баш һалып бармай, улар Себер ханлығы тамам тар-мар ителгәндән һуң ғына Рус дәүләтенә буйһондорола. Ошондай баш бирмәҫ, яугир рухлы башҡорттар урындағы батша хакимиәте тарафынан үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғы тупаҫ боҙолған саҡтарҙа, йәиһә халыҡ өсөн үтә мөһим булған башҡа бер сәбәптәр нигеҙендә береһе артынан береһе тоҡанып торған ихтилалдарҙа бик әүҙем ҡатнаша, көстәр тигеҙ булмағанда ла, аҙаҡҡы сиккә тиклем айҡаша. Әйле берләшмәһенең арҙаҡлы ир-уҙамандары, XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдары етәкселәренән Һары Мәргән (1662-1664 йылдар), Алдар Иҫәкәев етәкселегендәге күтәрелештә (1704-1711 йылдар) ҡатнашыусы ил ағалары Ялпай батыр, Миңлехужа (Әйле олоҫо), Илкәй Бикбаев (Һыҙғы олоҫо), Жиянбәт (Ҡошсо олоҫо), Аслай (Мырҙалар олоҫо), Таир хафиз (Ды-

ТӘҠДИМ БАР!

# АТЛЫБЫҘ ҘА УЛ...

**Күптән түгел Республика Башлығы Радий Хәбиров йылҡысылыҡты үҫтереүгә, тармаҡтың мөһимлегенә баҫым яһағайны. Был бик дөрөҫ аҙым, сөнки беҙ әле башҡорт атының ҡеүәтен дөрөҫ итеп, тейешле рәүештә ҡулланмайбыҙ. Һаман да бынан йөҙ йыл элекке кеүек ҡаҙылыҡ ашап, ҡымыҙ эсеүҙән ары китмәнек. Ысынлап та, йылҡы күп, әммә һыбай менерлек ат юҡ.**

Башҡортостан Рәсәйҙә күсмән халыҡтар мәҙәниәтен бөгөнгә көнгәсә һаҡлап ҡалған Европаға иң яҡын төбәк. Ат менән эш итеү - ғүмер буйы ат өҫтөндә яу сапҡан халыҡтың ҡанында. Шуға ла беҙ халыҡтың шөғөлөн арттырып, уның табышын, социаль хәлен яҡшыртыу өсөн этник спортты үҫтерә башларға тейешбеҙ.

Махсус программа төҙөп, был тармаҡты киңәйтеп, дәүләт кимәлендә тормошҡа ашырғанда, йылҡысылыҡ, уға бәйле этник спорт кеүек башҡа саралар беҙҙең халыҡтың йәшәү кимәлен күтәреүҙә мөһим урын биләр ине. Йылҡысылыҡ - төп шөғөлөбөҙ. Һәр хәлдә, Рәсәйҙә беҙҙең кеүектәр юҡ кимәлендә, һәм быны баҙар иҡтисады шарттарында дөрөҫ итеп ҡулланырға тейешбеҙ! Был йүнәлеш үҙ эсенә бәйгене, һыбай уҡтан атыуҙы, "Ылаҡ" уйынын, һыбай таһыллыҡты (джигитовка) алырға тейеш.

Бөгөн милли спорт тик милли көрәшкә генә ҡайтып ҡала. Минеңсә, Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында мотлаҡ рәүештә этник спорт бүлеге булдырыу зарур. Унда милли көрәштән тыш, был йүнәлештә 6-7 белгес эшләргә, улар йыл әйләнәһенә турнирҙар, семинарҙар, бәйгеләр, ҙур саралар ойоштороп, республикала этник спорт мөхитен булдырыу өҫтөндә эшләргә тейеш. Республика районДАРЫ хакимиәттәренең спорт бүлегендә этник спорт буйынса белгестәр вакансияларын булдырыу ҙа мөһим. Унда "Ылаҡ", һыбай һәм йәйәү уҡтан атыу, һыбай таһыллыҡ (джигитовка) кеүек милли спорт дисциплиналары буйынса командалар төҙөргә кәрәк.

Уҡытыу-өйрәтеү эшен дә йәнләндереү зарур. Был - Себерҙә өшөп-туңып йөрөгән башҡорт йәштәренә тыуған яҡтарында тәғәйен яңы эш урыны, тигәнде аңлата. Шулай уҡ этник спорт ат йәнле башҡорт йәштәренә социаллашыу өсөн социаль лифт ролен дә үтәр, аҙып-туҙып, көс-ғәйрәттәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгәндәр өсөн ылыҡтырғыс шөғөл һәм табыш сығанағына әйләнер ине. Йәш быуынға өлгө булырҙай милли кумирҙар барлыҡҡа килеренә лә шик юҡ.

Өфөләге "Аҡбуҙат" ипподромында һыбай уҡтан атыу, "Ылаҡ" һәм һыбай таһыллыҡ буйынса мәктәп асырға кәрәк. Әйткәндәй, Рәсәйҙә әле бер ерҙә лә һыбай уҡтан атыу менән шөғөлләнеү базаһы юҡ. Шул йәһәттән был бик табышлы йүнәлеш буласаҡ. Әле джигитовка буйынса Миҙхәт Солтангәрәев ағай кеүек уҡытыусы тренерҙар иҫән саҡта уның белемен киләсәк быуынға тап-

**✓ Татар-монголдарға тиклем үк башҡорт көслө халыҡ булған. Мәҫәлән, Х быуаттың башында Иҙел болғарҙарына Ислам динен индереү өсөн ебәрелгән Ибн Фаҙлан уларҙың илселегенең башҡорттарҙан ҡурҡыуын яҙып ҡалдырған.**

уан олоҫо), Мәмбәт (Салйоғот олоҫо), Һөйәрембәт (Күҙәй олоҫо), Байкөсөк (Һарт олоҫо), Өмөркәй (Өпәй олоҫо), Килдек (Түбәләҫ олоҫо), Көсөк хафиз (Ҡаратаулы олоҫо), шулай уҡ Ҡатайҙан Арыҡҡай, Балыҡсынан Байегет, Ҡыуаҡандан Байкеше үҙ ырыуҙары башында тора.

1735-1740 йылдарҙағы оҙайлы башҡорт ихтилалы бөтөн Башҡортостанды биләп ала, төньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы башҡорттары ла ошо халыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Әсир алынып, ҡаты язалауға дусар бер башҡорттоң әйткәндәре бына ошо рәүешле теркәлгән: "Салзаутской волости Исенгул с прочими, также Катайской, Черлинской, Сызгинской волостей башкирцы мириться не хотят, и одно у них согласие с Юсупом, и хотят русских рубить...". 1740 йылда Әйле башҡорттары үҙҙәре Ҡараһаҡал тип исемләгән кешене, аҡ кейеҙҙә күтәреп алып, йыйындарында Башҡорт ханы итеп иғлан итә. Бер фараз буйынса был кешене юрматы башҡорто Миңдеғол Юлаев тип тапһалар, икенсе фаразға ярашлы, Солтан-Гәрәй хан исеме аҫтында Күсем хан нәҫеленән булған Байбулат Хәсәнов исемле кеше була. Әлбиттә, башҡорттар зат-нәҫеле хандар династияһынан булмаған кешене үҙҙәренең ханы итеп танымаҫтар ине. Ҡараһаҡал етәкселегендәге ихтилалда төньяҡ-көнсығыш башҡорттары айырыуса әүҙем ҡатнаша, әйлеләрҙе старшиналар Аланзиянғол Ҡотлоғужин, Хужа Миңлехужин, Көҙәмеш Бикхужин, Ҡыҙрас Килдешовтар етәкләй.

1772-1775 йылдарҙағы ихтилалда Әйле ырыуҙары берләшмәһенә ҡараған Шайтан-Көҙәй ырыуынан йәш кенә Салауат Юлаевты барса башҡорт үҙҙәренең яу башы итеп таный. Ошо оҙайлы күтәрелештә әйлеләр башҡорт хәрәкәтенең башында тора, уларҙың йорт старшиналары үҙ егеттәрен яуға күтәрә. 1-се Әйле олоҫо старшинаһы Байғазы Көҙәмешев батша ғәскәрҙәре тарафынан ҡамалған Емельян Пугачевты һәм уның ярандарын таш-таулы урман араларынан үҙ биләмәһенә алып сығып, уны әсир алыныуҙан ҡотҡара. Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 1 ноябрендә төҙөлгән бер ведомосында ихтилалда ҡатнашҡан Себер даруғаһы старшиналары исемлегендә Иҫекәй Садыров, Тайыш Һыныҡаев, Илсеғол Итҡолов, Яуын Сыуашев, Яхъя Яҡшиев, Юлай Аҙналин, Өмөтәй Ураҙымбәтов, Собханғол Килтәков, Мәдияр Арҡаев, Томансы Йыуашкин, Алағуз Баҡыновтар күрһәтелә.

Башҡорт ихтилалдарын ҡанға батырған полковник А.И Тевкелев үҙенең генерал Соймоновҡа яҙған бер хатында әйле башҡорттары тураһында бына нимәләр яҙа: "Айские башкирцы всех протчих башкирцев непокорливее и злодейственнее, и всякое неспокойство во первых происходит от айских башкирцев". Ошо башҡорттарҙы тамам буйһондороу маҡсатында ул Әй йылғаһы буйында 3 ҡәлғә төҙөтөп, был яҡтарға күпләп рус кешеләрен күсереп килтереү хаҡында батша властарына үҙенең шәхси тәҡдиме менән мөрәжәғәт итә. Әммә был тәҡдим ғәмәлгә ашырылмай.

Этногенетик тикшеренеүҙәр әйле ырыуы башҡорттарының күп өлөшө табын, унлар, балыҡсы, танып, ҡатай, ҡошсо, көҙәй һәм башҡа башҡорт ырыуҙарына хас булғанса, R1a-M198 гаплотөркөмөнә ҡарауын күрһәтте. Был төркөмгә ҡараған ҡәбиләләр боронғо һинд-иран сығышлы халыҡтар иҫәбенә инә, улар беҙҙең эраға тиклем I мең йыллыҡ аҙаҡтарында Бөйөк Даланың ғәйәт киң территорияһына таралып көн итә. Тырнаҡлыларҙың һәм мырҙаларҙың ни сәбәпле I1-M253 гаплотөркөмөнә (башлыса, Скандинавия халыҡтарына хас) ҡарауын әлегә асыҡлау мөмкин түгел. Түбәләҫтәр, әйлеләрҙең бер өлөшө кеүек үк, N1c1-M178 гаплотөркөмөнә ҡарай, әммә уларҙың субклады - N1c1-F4205 монгол, тыва, бурят һәм ҡалмыҡтарҙыҡы менән бер иш. Ҡаратаулылар R1b-M73 гаплотөркөмө кешеләре, был уларҙың ҡыпсаҡтар менән нәҫелдәшлеген раҫлай.

Әйле берләшмәһенә ҡараған ырыуҙарҙың бөгөнгө вариҫтары Башҡортостандың Балаҡатай, Дыуан, Мәсетле, Ҡыйғы, Салауат, Туймазы райондарында, Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Красноармейский, Ҡуҫа, Сосновский, Сыбаркүл райондарында, Ҡарабаш ҡала округында, Курган өлкәһенең Әлмән һәм Сафакүл райондарында йәшәй.

Урта Азияла һәм Волга-Урал ерлегендә киң билдәле "Ҡиссаи Йософ" әҫәре менән дан алған Ҡол Ғәли, әйле ырыуы шәжәрәһен төҙөп китапҡа индергән Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди, башҡорт халҡының азатлыҡ көрәше символына әйләнгән Салауат батырыбыҙ әйлеләрҙең иң арҙаҡлы заттарынан һанала. Зәки Вәлидиҙең иң яҡын арҡаҙаштарының береһе, Арғаяш башҡорто Нуриәғзәм Таһиров, бер туған Харун һәм Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтар ҙа башҡорт халҡының милли автономияһы өсөн көрәштә ҡатнашҡан әйлеләрҙең иң күренеклеләре булып танылды.

Совет осоронда әйле берләшмәһенең элекке олоҫтары ерендә ойошторолған кантондарҙа, һуңынан яңыса исемләнгән райондарҙа йөҙәрләгән билдәле башҡорт зыялылары, яҙыусы һәм шағирҙар, фән эшмәкәрҙәре, артистар, Башҡортостан иҡтисады, мәғарифы һәм мәҙәниәте үҫешенә ҙур өлөш индергән арҙаҡлы шәхестәр үҫеп сыҡты. РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы Ғималетдин Минһажев, дәүләт эшмәкәре, 1930-1935 йылдарҙа БАССР-ҙың мәғариф наркомы Риза Әбүбәкеров, башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре, БАССР-ҙың Игенселек наркомы Шакир Төхвәтуллин (1926-1929 й.й.), БАССР Совнаркомы рәйесе, ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары Сабир Ваһапов, БАССР Юғары Советы Президиумы рәйесе Фәйзрахман Зағафуранов, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов, ЮНЕСКО-ның Г.Х. Андерсен исемендәге халыҡ-ара Почетлы дипломы эйәһе, шағир, драматург Сафуан Әлибаев, техник фәндәр докторы, академик Рәғиб Ғимаев, профессор, диалектолог Нәжибә Мәҡсүтова, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, йырсы Хәбир Ғәлимов, БАССР-ҙың халыҡ артистары Закирйән Ханов, Олег Ханов, Рәүис Заһитов, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артискаһы Рәфиға Галина, виртуоз-ҡумыҙсы Роберт Заһретдинов, СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Хәнифә Исҡәндәрова, композитор Әкрәм Даутов, Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғазимулла Хәйбуллин, яҙыусы, әҙәбиәт белгесе Суфиян Сафуанов, полиция генерал-лейтенанты Артур Әхмәтханов, сәнғәтте өйрәнеү докторы, композитор Риф Сөләймәнов, көрәш буйынса СССР чемпионы Харис Йосопов һәм башҡа бик күп зыялыларыбыҙҙың исем-шәрифтәре Башҡортостан тарихында лайыҡлы урын алды.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 39-40-сы һандарҙа).**

шырыу мөһим. Ипподромда "Ылаҡ", һыбай уҡтан атыу, һыбай таһыллыҡ буйынса республика ярыштары, финалдары үтергә тейеш. "Ылаҡ" - ул бик сағыу, мауыҡтырғыс, иң мөһиме, беҙгә яҡын уйын. Ул хатта футбол менән сағыштырғанда ла ҡыҙығыраҡ. Дәүләт программаһына ярашлы аҡса бүлеү, ҡиммәтле призлар һәм затлы бүләктәр был уйынға уйынсыны ла, тамашасыны ла күпләп йәлеп итер ине. "Аҡбуҙат" ипподромы дәүләт бюджет учреждениеһы булғас, унда тотолизатор ҡуйып, ҡомарланып, бәйгене "һайт" та "һайт" тип ихлас ҡысҡырып ҡарап та булмай. Шунлыҡтан, унда тамашасыға ҡыҙыҡ түгел. Шуға уның шәхсилек формаһын үҙгәртеп, программаһын байытырға кәрәк.

Аллаға шөкөр, хәҙер этник спорт, ат, уҡтан атыу менән бәйле булған халыҡ-ара спорт саралары йышайҙы. Күсмән халыҡтар уйындары ла даими ойошторолоп килә. Таһыллыҡты арттырып, ҙур еңеүҙәр яулап, билдәлелек алырға мөмкинлектәр бар. Урта Азия дәүләттәре был юҫыҡта уңышлы эшләй, ундағы этник спортсылар беҙҙең хоккейсылар һәм футболсылар кеүек популяр һәм уңышлы шәхестәр.

Халҡыбыҙҙың шөғөлөн арттырыу өсөн яңынан велосипед уйлап табырға кәрәкмәй. Ҡанда булған нәмәне тиҙ арала уятып, дөрләтеп ебәреү генә шарт. Генетик хәтер уны тиҙ генә иҫенә төшөрөп, кешене ылыҡтырасаҡ. Быны, бынан өс-дүрт йыл элек уҡтан атыуҙы йәнләндереп ебәргән Юлай Ғәлиуллин иҫбат итте. Бөгөн "Мәргән уҡсы"лар хәрәкәте йәшен тиҙлегендәй тарала. Башҡорт уҡсылары тик үҙ энтузиазмында ғына эшләп, халыҡ-ара турнирҙарҙа юғары баҫҡыстар биләй. Ә дәүләт программаһы сиктәрендә эшләһә? Республикаға дан һәм алтын миҙалдар ағылыр ғына ине.

Этник спорт индустрияһы киләсәктә эске туризмға ситтән туристар йәлеп итеү өсөн дә яҡшы үҙенсәлекле программа булып хеҙмәт итәсәк. Шулай уҡ ул үҙе артынан күн-тире етештереү, ат өйрәтеү, эйәр-йүгән яһау, милли кейем тегеү тармаҡтарын да локомотив кеүек алға һөйрәр, Башҡортостан Рәсәйҙә эйәр һалырлыҡ иң күп ат төйәгенә әүерелер ине. Быны үҙ сиратында Рәсәйҙә, донъяла күмәк аттар талап ителгән кинокартиналарҙың эпизодтарын төшөрөүҙә ҡулланырға ла мөмкин буласаҡ. Этник спорт индустрияһы үҫеп, хеҙмәт баҙарында тренерҙар, һөнәрселәр өсөн яңы эш урындары барлыҡҡа киләсәк.

Район-ауыл араһында ошо тармаҡта тауар етештереү киңәйеп, шәхси эшҡыуарлыҡ үҫеп, һалымдарҙың артыуына килтерәсәк. Иң мөһиме, перспективаһыҙ тип иҫәпләнгән ауылдарҙа ат йәнле башҡортҡа эш, шөғөл, табыш һәм бәхетле тормош тыуасаҡ. Башҡорттоң үҙенең "икмәге һәм тамашаһы" буласаҡ.

Ошо хаҡта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Ауыл хужалығы, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлыҡтары вәкилдәре, уҡсылар, атсылар, дағасылар, көтөүселәр ни уйлай икән? Беҙ тағы ла яҡшыраҡ булдырабыҙ, тип оран ташланыҡ та ул. Оранбыҙ ысынбарлыҡҡа таянһын ине...

**Дәүләт СУРА.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



# БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Башҡорттоң татар-монголдарға ҡаршы ун дүрт йыл буйы һуғышыуы тураһында монах Юлиан яҙмаларында һәм башҡа сығанаҡтарҙа ла бик күп мәғлүмәттәр теркәлгән. Ошондай ҡаты ҡаршылыҡ арҡаһында монголдар башҡортто танырға һәм улар менән килешеү төҙөргә мәжбүр булған. Әгәр ҙә һөйләшеү, килешеү булған икән, ошо һөйләшеүҙәрҙе алып барған, Килешеү төҙөгән кешеләр төркөмө лә булған, тип танырға мәжбүр буласаҡбыҙ. Сөнки монголдар бөтә башҡорт халҡы менән һөйләшмәгән, ә халыҡтың мәнфәғәтен сағылдырған кешеләр төркөмө менән һөйләшкәндер бит инде. Бер дәүләт тә халыҡ менән һөйләшмәй (был мөмкин дә түгел), ә ошо халыҡтың элитаһы менән һөйләшә.

Ниндәйҙер ерҙе баҫып алғанда төп ауырлыҡ армия елкәһенә төшә. Армия бар икән, был инде дәүләт тә бар тигәнде аңлата. Мәҫәлән, Ермак Себер ханлығын баҫып ала. Бында тарихсылар бер иң мөһим нәмәне күҙ уңынан ысҡындыра. Йәнәһе, Ермак Себер ханлығын үҙ белдеге менән баҫып ала. Әгәр уның кешеләренең артында Рус дәүләте тормаһа, Ермак Себергә һөжүм итергә йөрьәт итмәҫ ине. Ул саҡта Рус дәүләте әле бигүк көслө булмай, шуға күрә уның ҡапыл килеп Себер ханлығына һөжүм итерлек, уны баҫып алырлыҡ көсө булмай. Шуға ла ул Ермак юлбаҫарҙарына ярҙам итә, уның артында тора. Әгәр Ермактың юлы уңһа, ер Рус дәүләтенә күсәсәк, әгәр ҙә инде юл уңмаһа, бөтә бәләне Ермак өҫтөнә япһараһың да ҡуяһың. Юл уңа, Себер ханлығы емертелеп, Рус дәүләтенә буйһондорола. Ермак иһә милли батырға әүерелә.

Халыҡ тарихҡа инеп китһен өсөн уны тарихи аренаға алып сыҡҡан дәүләте булырға тейеш, ти ғалимдар. Татар-монголдарға тиклем үк башҡорт көслө халыҡ булған. Мәҫәлән, Х быуаттың башында Багдад хәлифе аль Муҡтадирҙың Иҙел болғарҙарына Ислам динен индереү өсөн ебәргән сәркәтибе Ибн Фаҙлан уларҙың илселегенең башҡорттарҙан ҡурҡыуын яҙып ҡалдырған. Был илселекте бәләкәй генә бер төркөм, тип уйларға ярамай. Ул - яҡшы ҡоралланған биш меңдән ашыу кешене берләштергән, үҙен-үҙе һаҡларлыҡ көсө булған каруан булған. Быларҙан тыш, каруанда өс меңдән ашыу ат, уларҙан башҡа, иҫәпһеҙ-һанһыҙ дөйәләр, ишәктәр булғанлығы Ибн Фаҙлан яҙмаларында теркәлгән. Ошо көс башҡорт ере аша үтергә ҡурҡҡан. Тимәк, башҡорттоң ҡурҡытырлыҡ көсө булған, тип уйларға кәрәк. Баҫып алыу - дәүләт барлыҡҡа килеү юлдарының тик береһе генә. Башҡорт тарихына ҡағылышлы, дәүләт барлыҡҡа килеүҙең икенсе бер юлын да күрһәтеп китеү зарури булыр. Икенсе юл менән сығыштары, телдәре буйынса туғандаш, яҡын ырыу, ҡәбиләләр бер дәүләткә берләшәләр. Тәбиғи үҫеш арҡаһында кеше һаны арта, ырыу-ҡәбиләләр ҙурая, эреләнә, кешеләр араһында, ихтыяждарҙың, мөнәсәбәттәрҙең төрлөлөгө сәбәптәренән, үҙ-ара һыйыша, килешә алмайынса, талаш-ыҙғыштар күбәйә. Был осраҡта ла кешеләрҙең ихтыяждарын, мәнфәғәттәрен бер-береһенә яраҡлаштырыу, уларҙы килештереү өсөн дәүләт кеүек идара итеү ойошмаһына мохтажлыҡ килеп тыуа. Мохтажлыҡ, ихтыяж тыуа икән, әҙәм балаһы уны хәл итеү юлдарын, ысулдарын эҙләй һәм уны таба. Башҡорттар ҙа башҡаларҙан бигүк ҡалышмаған, донъя көтөргә, үҙ-үҙен яҡларға, һаҡларға тырышҡан. Уларҙың да бүтәндәр эшләгәнде эшләргә баштары еткән, хәлдәренән килгән. Халыҡтарҙың мәҙәниәт кимәле, йәмғиәт ҡоролошо кеүек нәмәләре бер-береһенән айырылыуы, төрлө кимәлдә булыуы мөмкин. Быны сәбәптәрен төрлөсә аңларға һәм аңлатырға була. Әммә донъяла аңра халыҡтар юҡ һәм булмаған да. Тимәк, бөтә халыҡтар ҙа дәүләт төҙөүгә һәләтле, тик уға ихтыяж, мохтажлыҡ барлыҡҡа килергә тейеш.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Әле ойошма ойошоп та бөтмәгән, әммә уның тураһындағы мәғлүмәт, үҙенең ваҡытлы баҫмаһы булыуы йәштәргә шул тиклем ныҡ тәьҫир итте - улар беҙҙең рәттәргә күпләп ағыла башланы.***

# КӨСӨБӨҘ -

**1990 йылдың 11 октябре - алтын көҙҙәге Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация ҡабул ителгән көнө тарихыбыҙ биттәренә алтын юлдар менән яҙылды. Сөнки ошоға тиклем башҡорт халҡы тарихына һәр көрәш ҡанлы юлдар менән теркәлгәйне. Ошондай хәл иткес ваҡыттарҙа, шанлы йылдарҙа халыҡ барыбер аҡыллы, төплө һүҙгә, лидерға мохтаж. Йылдар аша ҡабат ошо ваҡытҡа урап ҡайтып, Башҡортостандың халыҡ шағиры Тамара ҒӘНИЕВА һәм БР-ҙың күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-етештереү үҙәге директоры Данир ҒӘЙНУЛЛИН менән хәтерҙе барлайбыҙ.**

**Шул ваҡытта Башҡортостан яҙыусыларының, ғөмүмән, башҡорт зыялыларының роле ниндәй булды? Йәштәр үҙ артынан башҡаларҙы туплай, уларҙы артынан эйәртә, ошо ваҡиғаларҙың мөһимлеген аңлата алдымы?**

**Тамара Ғәниева:** Мин - шағир. Шағирҙың төп бурысы - күргән-кисергәндәренән һығымта яһап шиғыр яҙыу һәм шуның менән уның бурысы тамам. Ул халыҡтың байрағы ла, халыҡтың да, власть органдарының да кәңәшсеһе лә, уларға юл күрһәтеүсе лә булырға тейеш түгел. Хоҙай Тәғәлә уны Ергә кисерештәр даирәһендә йәшәргә, халҡының кисерештәр һәм интеллектуаль юғарылығын күрһәтергә тип ебәргән.

Ләкин Рәсәй илендә, Башҡорт илендә лә шағирҙар шағирҙан ҙурыраҡ тигән инаныс йәшәй. Шағирҙарға әллә нишләп рупор вазифаһы көсләп тағылды. Беҙҙең халыҡ та Салауат Юлаев, Шәйехзада Бабич кеүек шағир һәм батырҙар өлгөһөндә һәр бер шағирҙы батыр һәм көрәшсе итеп күргеһе килә. Шул уҡ ваҡытта башҡорт халҡының төп, аңына һәм ҡанына һеңгән идеалы - азатлыҡ. Нисәмә-нисә быуаттар халыҡ шул идеалға инанып, өмөтләнеп, бәлки, ҡасан да булһа мөстәҡиллек һәм бойондороҡһоҙлоҡҡа өлгәшеп булыр, тип йәшәй. Ул тойғо һәр ғаиләлә һалына. Атайыма 9 ғына йәш булғанда олатайым Ағзам Әхмәтзәки Вәлиди ғәскәре составында һәләк булған. Ағзам олатайымдың ҡустыһы Муса бабай ҙа шул ғәскәрҙә йөрөп-йөрөп, Ҡытайға сығып киткән. Шулай булғас, азатлыҡ тураһында, көрәш тураһында һөйләшмәй мөмкин түгел. Нимә тип әйтергә теләйем: был көрәш шағирҙарҙың, яҙыусыларҙың бурысы булмаһа ла, намыҫлы шағирҙарҙың ниндәйҙер эске талабына әүерелде. Әйтәйек, беҙ, Факиһа Туғыҙбаева, Таңһылыу Ҡарамышева, Йыһат Солтанов, Мәрйәм Бураҡаева кеүек битараф булмаған әҙиптәр, шул 90-сы йылдарҙың бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшенә әүҙем ҡушылып киттек. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге төҙөлөү ҙә эшмәкәрлеккә ярҙам итте. Сөнки мин ошо үҙәктең ағзаһы булыу сәбәпле, иҫ киткес көслө рухлы, ғәжәйеп белемле башҡорттар бар икәнен аңланым. Бер ауыл булып йәшәмәгәс, бер-беребеҙҙе бигүк белмәйбеҙ. Төрлө өлкәләрҙә, төрлө ойошмаларҙа һөнәребеҙ буйынса эшләп тик йөрөгәнбеҙ. Нефтселәр, ғалимдар, табиптар, иҡтисадсылар, журналистар, юристар, уҡытыусылар, тарихсыларҙы әйтеп тә тормайым - шундай энтузиаст һәм белемле кешеләр менән танышыуым минең офоҡтарымды киңәйтте. Ниндәйҙер берҙәмлек һәм ойошҡанлыҡ, яңғыҙ түгелбеҙ икән, тигән тойғолар барлыҡҡа килде. Шундай берҙәмлек тойғоһо кешеләә ышаныс тыуҙыра.

**Данир Ғәйнуллин:** 7-8 йәштәрҙә бер фильм ҡараным. Унда Әхмәтзәки Вәлидиҙең әйткән ҡайһы бер һүҙҙәрен, нисектер, совет цензураһы үткәреп ебәргән. Шуны ҡарағас, әсәйемдән: "Ул ағай дөрөҫ һүҙҙәр һөйләй, нишләп уны насар итеп күрһәтәләр", - тип һорайым. Ул шул саҡта: "Улым, ул башҡорттар өсөн, беҙҙең республика булһын өсөн көрәшкән, шуға уны ситкә сығып китергә мәжбүр иткәндәр",- тип аңлатты. Оҙаҡ уйландым. БДУ-ға уҡырға кергәс, асыҡлыҡ башланғас, уҡып белгәндәр аша Әхмәтзәки Вәлидиҙең дөрөҫ юлдан барғанын, дөрөҫ көрәш алып барғанын, автономия яулауыбыҙ, башҡорт халҡының милләт булып һаҡланыуы ни өсөн кәрәк икәнен аңланым. "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни клубы, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге ойошторған сараларға йөрөй башланыҡ. Унда беҙҙең абруйлы ағай-апайҙар сығыш яһай. Беҙ, йәштәр, ололарҙың ойошмаһы бар, йәштәрҙеке лә булырға тейеш, беҙ ҙә көрәшергә тейешбеҙ, тип уйлана башланыҡ. Сөнки сәнғәт институтына барғайныҡ, унда музыка ҡоралдарында уйнайҙар ҙа, йырлайҙар-һөйләшәләр ҙә ҡайталар, "Аҡ тирмә" эргәһендәге йәштәр йыйынына барғайныҡ, унда ҡурай уйнарға өйрәтә башланылар. Был беҙгә кәрәкмәй, тип, үҙебеҙ йәштәрҙең милли хәрәкәтен ойошторорға ҡарар иттек. Тарих факультетының 8 студенты йыйылып, ойошманың уставын яҙып, Башҡорт йәштәре иттифағы булдырҙыҡ. Ойошманы танытыр өсөн нимә эшләргә кәрәк? Төрлө эҙләнеүҙәр аша коммунистар партияһының юлын ҡабатларға булдыҡ: баҫма матбуғат булдырырға! Ул ваҡытта милли ойошмаларҙың береһенең дә гәзите юҡ ине әле.

Сибайҙа төндә гәзит сығарып булғанын белә инек. Бер гәзитлек мәҡәләләр тупланыҡ та, Артур Иҙелбаевҡа: "Артур, һинең атайың - ғалим, әсәйең - журналист, гәзиттең беренсе һанын һин баҫтырып алып ҡайтырға тейешһең" - тинек. Артур ысынлап та поезд менән сығып китте лә, өс көн тигәндә 999 тиражлы "Оран" гәзитенең беренсе һанын баҫтырып алып ҡайтты. Әле ойошма ойошоп та бөтмәгән, әммә уның тураһындағы мәғлүмәт, үҙенең ваҡытлы баҫмаһы булыуы йәштәргә шул тиклем ныҡ тәьҫир итте - улар беҙҙең рәттәргә күпләп ағыла башланы. Һәм беҙ "Башҡорт йәштәре иттифағы" тигән исем менән милли хәрәкәткә ҡушылып киттек. Митингыларҙа ҡатнаштыҡ, башҡорт байраҡтарын тергеҙҙек. Ойошма хәрәкәте төрлө уҡыу йорттарына таралды. Улар бик актив эшләп китте.



**Атайҙар һәм балалар проблемаһы һәр ваҡытта ла йәшәгән һәм йәшәй. Әммә өлкәндәрҙә - аҡыл, сабырлыҡ, түҙемлек тупланған, ә йәштәр - максималист, уларҙа ҡайнар йөрәк, ҡыйыу фекер, ҡыҙыу ҡан. Ошондай йәштәрҙе лә ололар ул заманда үҙҙәре менән бер рәткә туплай алды. Бөгөн иһә йәштәр менән ололар бер нисек тә уртаҡ фекергә килә алмағандай...**

**Тамара Ғәниева:** Йәштәрҙе үҙ эргәбеҙгә ылыҡтырыуҙың сәбәбе ябай - маҡсаттың уртаҡ булыуы. Бөгөнгө көндә халыҡтың маҡсаттары төрлө-төрлө. Кемдең башына ниндәй уй килә - ул үҙен генә хаҡлы тип уйлай башлай. Икенсе сәбәбе - ул ваҡытта йәштәрҙә өлкәндәргә ҡарата ихтирам тойғоһо ныҡ тәрбиәләнгәйне. Хәҙерге заманда ни өсөндөр өлкән кешенең абруйы юҡ. Был башҡорттарҙың борондан килгән өлкән кешегә ҡарата ихтирамы һәм иғтибары йолаларының ҡаҡшауынан килә. Әлбиттә, был ярайһы ауыр мәсьәлә. Бөтә төрки халыҡтарында ла аҡһаҡалдар, ил инәләре - был башҡортта бик һирәк бирелгән абруйлы статус - һаҡланып ҡалған. Өлкәндәр әйттеме - бөттө. Нишләптер тик башҡортта ғына бөгөнгө көндә атайҙар һәм бабайҙар хужа була алмай: донъяһына ла, балаһына ла, йәштәргә лә. Был үҙенә күрә проблема һәм фажиғә, тиергә мөмкин.

**Данир Ғәйнуллин:** Ваҡыт үтеү менән мин был мәсьәләгә бик фәлсәфәүи ҡарайым, сөнки был хәлде тиҙ генә төҙәтеп булмай. Кешенең биологик тәбиғәте шундай: йәштәрҙең максимализмына, ололарҙың һәр аҙымын үлсәп баҫыуы, аҡыл менән эш итеүенә фәлсәфәүи ҡарарға кәрәк. Сөнки бөгөнгө йәштәр олоғайғас барыбер "аҡылға ултырасаҡ" - беҙ ҙә йылдар үткәс бер аҙ баҫылдыҡ. Йәшлек үткән кеүек, йәш ваҡыттағы уйфекерҙәр ҙә, яндырайлыҡ та, ҡыҙыулыҡ та, холоҡ та үтә ул.

Эйе, һәр быуын ололар дөрөҫ эшләмәй, тип уйлай. Беҙ ҙә, ололар пассив, улар ҡурҡа, беҙ ҡыйыуыраҡ булырға, суверенитетты күберәк умырырға тырышырға тейешбеҙ, тип уйлай, һәр нәмәлә радикаль ҡараштарҙа тора торғайныҡ. Беҙ ҙә ололарҙы тәнҡитләнек. Ә бөгөнгө күҙлектән сығып фекер йөрөтһәк, анализлаһаҡ, ул ваҡытта ағай-апайҙар ҙа бик ҡыйыу һәм шул уҡ ваҡытта төплө аҡыллы булған. Беҙҙә йәшлек максимализмы өҫтөнлөк иткән - бөтөн нәмә лә шунда, ошо уҡ урында, минутында-секундында кәрәк. Мөстәҡиллек яулайбыҙ икән, шул секундында уҡ азат булырға тейешбеҙ. Ә бөтөн нәмәнең дә бер юлы булмауын миңә Булат ағай Рафиҡов бик матур итеп төшөндөрҙө. Федератив килешеүгә риза булмайынса, аслыҡ иғлан иткәс, һәйкәл янында 7-8 егет менән ултыра инем, Булат ағай килде лә: "Ҡустым, нишләйһегеҙ, нимә талап итәһегеҙ?" - ти. Үҙебеҙҙең ҡәнәғәтһеҙлекте белдергәс: "Ҡустым, йәһүдтәрҙең бер алымы бар: улар ҙур яуҙарҙа көрәшеп еңә алмағас, һәр бер кеше, бәләкәй генә ғаилә халҡы өсөн көн дә бер бәләкәй генә еңеү эшләргә тейеш, тигән бурысты алға һөрә. Шул бәләкәй еңеүҙәр тотош халыҡтың ҙур еңеүенә килтергән дә инде", - тине.

**Тарих ҡабатлана, тиҙәр. Ул ваҡиғаларға сирек быуаттан ашыу ваҡыт үтте. Мөсәл һайын тарих ниндәйҙер дәрәжәлә ҡабатланып тора. Уйлап ҡараһаң, шул йылдарҙа ҡуйылған талаптар бөгөн дә актуаль. Шул уҡ ер мәсьәләһе, экология, туған тел, иҡтисад һ.б. Был нилектән килә: яулап алғандарҙы һаҡлай, яҡлай алмауҙанмы, әллә үҙебеҙҙең битарафлыҡтанмы?**

**Тамара Ғәниева:** Үкенескә күрә, Татарстанда ҡабул ителгән декларациянан айырмалы, Башҡортостанда төп халыҡтың туған теле дәүләт теле тип иғлан ителмәне. Башҡорт теленә дәүләт статусы 1930 йылда уҡ бирелә һәм уны бер кем дә ғәмәлдән сығармаған. Башҡорт зыялыларының фиҙаҡәр һәм ныҡышмал, эҙмә-эҙлекле, туҡтауһыҙ талап итеүе арҡаһында ете йылға һуҙлап булһа ла был указ кире ҡайтарылды. Шул йылдарҙа хатта Президент ауыҙынан "Проблему языка поднимают лишь представители гнилой интеллигенции", тигән һүҙ сығыуы ла беҙҙе шаңҡытты. 1994 йылдың авгусында Рәсәй Федерацияһы менән Башҡортостан Республикаһы араһында төҙөлгән килешеүҙең 1-2-се статьяларына Декларацияла иғлан ителгән сәйәси һәм иҡтисади хоҡуҡтарыбыҙ теркәлде, әммә күп тә үтмәй, был килешеү юҡҡа сыҡты. Ә милли хәрәкәт зыялылары төшөнкөлөккә бирелде.

Ауыр йылдар булды. Янауҙар ҙа ишеттек, милләтсе тигән мөһөр ҙә баҫтылар. Ә бит милләтсе - ул башҡаларҙы инҡар итеү түгел, ә үҙеңдең милләтеңде яратыу һәм уның мәнфәғәтендә эшләү. Ошо үҙаллылыҡ яулауҙа алдан йөрөгән, милләт өсөн ҙур эштәр эшләгән интеллигенция вәкилдәренә һуңынан дәүләт структураларында вазифалар табылманы. Улар ҡайҙа тәғәйенләһәң, шунда эшләп алып китерлек ағай-апайҙар ине. Киреһенсә, был зыялыларға ниндәйҙер кимәлдә юлдар ябылды. Күп шағир, яҙыусылар был көрәштән ситтә йөрөнө, мине лә унда ҡатнашмаҫҡа өндәгәндәре һуңынан ҙур-ҙур вазифаларға үрләне, төрлө регалиялар алды. Был, әлбиттә, кәйефте төшөрҙө, сәләмәтлекте ҡаҡшатты. Сөнки ғәҙелһеҙлек шул тиклемгә барып етте: өҫтән ҡарап, мыҫҡыллап, нимәгә өлгәштегеҙ инде, тигән мөнәсәбәттәрҙе лә күрергә тура килде.

**Данир Ғәйнуллин:** Беҙҙең көрәш, барыбер ҙә, ниндәйҙер кимәлдә халыҡ аңында, милли

***Беҙ ҙә ололарҙы тәнҡитләнек. Ә бөгөнгө күҙлектән сығып фекер йөрөтһәк, анализлаһаҡ, ул ваҡытта ағай-апайҙар ҙа бик ҡыйыу һәм шул уҡ ваҡытта төплө аҡыллы булған. Беҙҙә йәшлек максимализмы өҫтөнлөк иткән - бөтөн нәмә лә шунда, ошо уҡ урында, минутында-секундында кәрәк. Мөстәҡиллек яулайбыҙ икән, шул секундында уҡ азат булырға тейешбеҙ. Ә бөтөн нәмәнең дә бер юлы булмауын миңә Булат ағай Рафиҡов бик матур итеп төшөндөрҙө.***

***✓ Беҙ хәл-торошто Чечен Республикаһы ситуацияһына алып барып еткермәүсе быуын. Лидерҙарҙың болғанышлы мәлдәрҙә лә бына-бына ҡабыныр усаҡты һүндерергә башы, шуға аҡылы етте.***

хәрәкәттә революцион сара булды. Күптәр ошо тулҡынға инеп китте. Ләкин 90-сы йылдар үткәс, күп йәштәребеҙ ошо күтәрелештән тыныс тормошҡа, халыҡҡа тыныс юл менән хеҙмәт итеүгә яраҡлаша алманы. Был бик ҙур проблема булды. Мин шунда аңланым: күп егеттәребеҙ ысын революционерҙар, ғөмүмән, башҡорт - ул яугир халыҡ икәнлеге шунда күренде. Британ яҙыусыһы, тарихсы һәм фәйләсуф Томас Карлейль әйткәнсә, революцияны романтиктар уйлап сығара, фанаттар тормошҡа ашыра, уның емештәре менән ҡәбәхәттәр ҡуллана. Шуның кеүек, күптәр тыныс тормошҡа яраҡлаша алманы һәм яуланған емештәр тиҙ яраҡлашҡандар өлөшөнә эләкте. Шунан мин, Булат ағай әйтмешләй, ысынлап та, халыҡҡа хеҙмәт итер өсөн урамға сығып революция эшләргә түгел, ә ҡайҙалыр бер урынға ныҡлы баҫып (станок артынамы, һабан артынамы, дәүләт посынамы) анығ эш башҡарырға, баш менән аҡыллы эш итергә ҡоро закон индереүе йоғонтоһонон көслө булыуында ине. Ауылдарҙа, ҡалаларҙа ул осорҙа байтаҡ халыҡ айыҡ булды. Айыҡ кешеләр, нигеҙҙә егеттәр, айыҡ фекергә килә һәм айыҡ һығымталар яһауға һәләтле була. Һунынан, ҡоро закон бөтөрөлгәйне, егеттәрҙең күбеһе эскегә һабышты. Эскелек - беҙҙең иң ҙур фажиғәгә әйләнде.

Шул уҡ ваҡытта нимәһе менән һәйбәт булды был көрәш заманы, ғөмүмән, шул үҙгәртеп ҡороуҙар тигән бигүк аңлашылып бөтмәгән формацияның алышынышы? Мәҫәлән, шағир өсөн, публицист өсөн тыйылған темалар ҡалманы: теләһәң күңелеңдә асып һал, теләһәң, табыштарың, үҙең эҙләнеп барып осраған мәғлүмәтең менән уртаҡлаш. Был, әлбиттә, ҙур ҡаҙаныш ине.

**Данир Ғәйнуллин:** Ул ваҡытта ҡуйған талаптар һәм беҙгә бирелгән үҙаллылыҡ осоронда эшләнгән эш - ул республикаға ҙур карт-бланш булды. Күп иҡтисади мөмкинлектәр тыуикенсе эштәрҙә лә башҡара. Мин бер төн эсендә район-ҡалаларға, сит республикаларға митингыға саҡырып, тексын үҙем машинкала баҫып, 300 хатты конвертҡа һалып йәбештереп ебәрҙем. Президент һайлауҙары ваҡытында Тәнзилә Йәндүрина менән икәүләп өйҙән-өйгә, фатирҙан-фатирға йөрөп, кешеләр менән һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ. Бындай бөтмәҫ-төкәнмәҫ, күҙгә күренмәгән мәшәҡәттәрҙе әллә ниндәй ҙур эш түгел тип ҡарарға ла була. Әммә бая Данир ҡусты әйтмешләй, былар ҙур ениүгә илткән бәләкәй енеүҙәр ине. Һәр механизмда бәләкәй генә шөрөп тә ҙур роль уйнай. Иң мөһиме, беҙ хәл-торошто Чечен Республикаһы ситуацияһына алып барып еткермәүсе быуын. Лидерҙарҙың болғанышлы мәлдәрҙә лә бына-бына ҡабыныр усаҡты һүндерергә башы, шуға аҡылы етте. Һәр хәлдә, милләтебеҙҙең йәш киләсәк быуыны барыбер беҙ эшләгән эштәрҙән илһам алып

**Данир Ғәйнуллин:** Башҡорт халҡының Уралда халыҡ булып ойошоуына ла бәйләнгән был. Ошо Уралда иркенләп ырыу-ырыу булып йәшәгән, үҙенең аҫабалыҡ хоҡуғын монголдар алдында ла, Рәсәй империяһы алдында ла иҫбат итеп ҡалдырған һәм ниндәйҙер ауырлыҡ килеп тыуғанда тиҙ генә туплана белгән атабабалар. Беҙ бер ҡасан да хан һайлап, бер етәкселек аҫтында йәшәмәгәнбеҙ. Ләкин хәрби демократия ысулы менән халыҡ берҙәм булған. Уйлап ҡараһаң, беҙ ысынлап та уникаль милләт.

**Тамара Ғәниева:** Минең "Катын" тигән поэмам бар. Унда мин Рус дәүләтенә ҡушылған ваҡытты һүрәтләйем. Ошо поэманы яҙа-яҙа халҡыбыҙҙың ни саҡлы аҡыллы, зирәк булыуын аңланым. Ул саҡта бит өс йыл рәттән Башҡортостанда аслыҡ була. Аҡман тигән бей Ҡаҙанды яҡларға китеп бара - халыҡ ҡырылып ята, көсһеҙ, хәлһеҙ. Бына ниндәй бейҙәр һәм ҡатындар булған милләтебеҙҙә. Был - ҡараш бар. Был бигерәк тә социаль өлкәгә ҡағыла. Радий Фәрит улы Хәбировтың инаугурацияһынан һуң беренсе указы үҫеш стратегияһы булды. Уны ентекләп ҡарап сыҡтым. Башҡортостан халҡына ла, башҡорт халҡына ҡарата ла бик яҡшы пункттар бар. Мәҫәлән, билдәле археолог Нияз Мәжитовтың эшен дауам итеп, "Боронғо Өфө" республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы базаһында археологик парк һәм асыҡ һауала "Атайсал" музейын төҙөү. Был бит күптәнге хыялыбыҙ, башҡорт халҡының этногенезы музейын эшләү, тигән һүҙ. Беҙ уны нисәмә йылдар тормошҡа ашыра алманыҡ. Бөгөнгө етәксебеҙ шуны аңланы, сөнки тарих - ул халыҡтың тамыры. Тарихы булған, тарихын хөрмәт иткән халыҡтың киләсәге бар. Үҫеш стратегияһында Шүлгәнташты үҫтереү, "Торатау" геопаркын булдырыу, был объекттарҙы ЮНЕСКО-ның мәҙәни мираҫы исемлегенә индереү тураһындағы пункттар ҙа бар. Ҡыҫҡа-

# ТАМЫРҘАРЫБЫҘҘА!

кәрәклекте аңланым. Сөнки урам буйлап күкрәк һуғып йөрөү менән генә бер нәмәгә лә өлгәшеү мөмкин түгел. 90-сы йылдар үтте-бөттө, ә алда - киләсәк.

Тел мәсьәләһендә һуңға ҡалдыҡ тиһәк тә, Татарстанға, Ҡаҙанға күп тапҡыр барғаным бар, аралашып торам. Урам буйлап барғанда дәүләт структураларында, рекламаларҙа, магазиндарҙа татар теләндәге алтаҡталарҙы күрмәйһең. Ҡаҙанды татар ҡалаһы тип хис итеп булмай. Күп нәмә русса. Башҡортҡа аҡыл һуң төшә, һуң төшһә лә мул төшә, тигәндәй, беҙҙә закон һуң ҡабул ителһә лә, шунда уҡ Терминология комиссияһы булдырылды, ҡала-райондарҙа улар һаман да бар. Райондарға барып, мәктәптәрҙә йөрөп, башҡорт теле нисек уҡытылыуы, дәүләт структураларында вывескалар нисек эшләнгәне тикшерелде. Әле лә Өфөлә ике телдә яҙалар. Һәм мин бының менән ҡәнәғәтмен.

Эйе, һуңғы 7-8 йылда артҡа китеүҙәр ҙә, торғонлоҡ та булды. Хөкүмәттәге ул комиссия бөтөнләй эшләмәне, телгә иғтибар булманы. Шуның арҡаһында артҡа киттек, ләкин уға тиклем бик күп нәмәне эшләп өлгәрҙек. Беҙҙә ҙур тәжрибә тупланған һәм уны ҡабаттан тергеҙеүе, ул эште ҡабаттан йәнләндереп ебәреүе ҡыйын булмаҫ.

**▶ Нисек кенә тиһәк тә, ул бит шул тиклем ҙур күтәрелеш, алға китеш булды, шул иҫәптән халыҡтың аңы ла үҫте...**

**Тамара Ғәниева:** Был күтәрелештең ниндәйҙер кимәлдә уңышлы булыуының сәбәптәренең береһе - Горбачевтың ҙы, шул ваҡытта республикала төҙөлөш киң ҡолас алды, юлдар һалынды, газ үтте, яңы объекттар төҙөлдә. Бөгөн беҙ белгән үҙен үҙе тәьмин итә алған республикаға шул йылдарҙа нигеҙ һалынды. Әле күп позицияларҙа артҡа сигендек, тиһәк тә, тормош гелән алға барыуҙан ғына тормай. Тарих мөмкинлек биргән ниндәйҙер мәлдә беҙ ҙур һикереш эшләйбеҙ ҙә, икенсе ауыр ваҡыттарҙа саҡ ҡына артҡа сигенәбеҙ. Шуларҙы күҙ уңында тотоп, тағы ла алға барыу мөмкинлектәре бар, тип уйлайым һәм һуңғы ваҡытта республикала барған үҙгәрештәрҙе ыңғай баһалайым, артабанғы үҫешкә нигеҙ итеп күрәм.

**▶ Хәҙер Данир Әхмәҙи улы - үҙе ир-азамат ҡорона еткән, Тамара Әхмәтшәриф ҡыҙы - ағинәй йәшендә. Бөгөн шул йылдарға күҙ һалып, ниндәй хаталарҙы, яңылышлыҡтарҙы күрәһегеҙ һәм уларҙы булдырмаҫҡа ла мөмкин ине, тип уйлайһығыҙ?**

**Тамара Ғәниева:** Минең ундай үкенесем юҡ. Хаталар эшләгәнбеҙҙер, тигән уй башыма ла килмәй. Беҙ намыҫыбыҙ ҡушҡанса, бөтә нәмәне - ҙурмы-бәләкәйме - еренә еткереп эшләнек. Ҙур күтәрелеш ваҡытында бөтә кешеләр ҙә трибун булмай. Ә ниндәйҙер алға баралыр, тигән фекерҙәмен.

**Данир Ғәйнуллин:** Мин дә ниндәйҙер хаталар эшләгәнбеҙҙер тип уйламайым, сөнки бер нәмәне лә үҙгәртеү мөмкин түгел - ул тарих, ә тарихты үҙгәртеп булмай. Нисек булған - шулай булған. Хатта нимәләр дөрөҫ эшләнмәгән тиһәк тә, ул ваҡытта дөрөҫ тип уйланылған.

Халҡыбыҙ бик аҡыллы, зирәк. Шул ваҡытта ошо сәйәси сараларҙы тыныс юл менән хәл итеү һәм аҡыллы фекер йөрөтөү яҡшы булған, тием. Ысынлап та, беҙ, башҡорттар, ҡыҙыу, гөлтләп ҡабынырға ғына торабыҙ, ләкин интеллигенциянын, етәкселәрҙең, аҡһаҡалдарҙың был осконды алҡынға әйләндермәҫкә аҡылы етте. Халҡыбыҙҙың 17-18-се быуаттарҙағы ихтилалдарының һабағынан сығыптыр инде, йәштәрҙе тынысландырып тороуҙа ла, беҙгә артыҡ юл ҡуймауҙа ла улар аҡыллы эш итте.

**▶ Башҡорттарҙы яугир, ҡыҙыу, ярһыу сифаттарға эйә тип белһәк тә, тарихтан ҡараһаҡ, ниндәйҙер киҫкен ваҡыттарҙа ул шунда уҡ берләшергә әҙер генә тора. Әммә ундай хәл-торош юҡ икән, һәр ҡайһыһы айырым, үҙ алдына йөрөп тик ята...**



***Хәҙерге заманда ни өсөндөр өлкән кешенең абруйы юҡ. Был башҡорттарҙың борондан килгән өлкән кешегә ҡарата ихтирамы һәм иғтибары йолаларының ҡаҡшауынан килә. Әлбиттә, был ярайһы ауыр мәсьәлә. Бөтә төрки халыҡтарында ла аҡһаҡалдар, ил инәләре - был башҡортта бик һирәк бирелгән абруйлы статус - һаҡланып ҡалған. Өлкәндәр әйттеме - бөттө. Нишләптер тик башҡортта ғына бөгөнгө көндә атайҙар һәм бабайҙар хужа була алмай: донъяһына ла, балаһына ла, йәштәргә лә.***

беҙҙең гендарыбыҙҙа ята, ҡаныбыҙға һеңгән, менталитетыбыҙға һалынған.

**▶ Быйыл Башҡортостан автономияһының 100 йыллығын билдәләнек, яңы тарихта күптән түгел суверенитет яулауҙың сирек быуатын байрам иттек. Алдағы сирек быуатты ниндәй төҫтәрҙә күҙаллайһығыҙ? Ниндәй фаразлар бирәһегеҙ?**

**Данир Ғәйнуллин:** Ғөмүмән, һуңғы бер йылда булған үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алып, мин республиканың киләсәген бик яҡты итеп күҙ алдына килтерәм, сөнки бөтөн Башҡортостан халҡына әлеге көндә етәкселек яғынан яҡшы, ыңғай һы, был указ башҡа йүнәлештәр менән бер үк ваҡытта тамырҙарҙы нығытыуға йүнәлтелгән. Ә тамыры ныҡ ағас ел-дауылға бирешмәй, уның көсө - тамырҙарында.

**Тамара Ғәниева:** Мин дә киләсәккә позитив ҡараштa. Сөнки, ысынлап та, йәшәйеш серпантин формаһында үҫешә. Уның юлы, әлбиттә, гелән еңеүҙәрҙән тормай, еңелеүҙәр ҙә була. Кешенең яҙмышында ла шатлыҡ менән ҡайғы аралашып килә. Һәр бер милләт - тере организм. Ул төшөнкөлөккә бирелә, алға табан бара, үҫеш кисерә, бер урында тапанып тора, һ.б. Иң мөһиме - милләттең киләсәгенә һәр ваҡыт ышаныс менән ҡарарға тейешбеҙ. Әлбиттә, глобалләшеү шарттарында беҙҙең төп хәстәребеҙ - туған телде һаҡлау булырға тейеш. Төрки донъяһында ғына түгел, хатта тотош донъяла үҙенсәлекле теле булған, телен һаҡлаған башҡорттар беҙ. Артабан да телебеҙҙе һаҡлап ҡала алһаҡ, Алла бойорһа, юғалмабыҙ, бөтмәбеҙ, киләсәгебеҙ яҡты булыр, тип өмөтләнәйек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәне йомғаҡлауҙы оҙонораҡҡа һуҙмай, тарих өсөн бер мөһим фекерҙе генә яҙып ҡуйғы килә: быйыл республикабыҙ автономияһының 100 йыллығын билдәләгән кеүек, Алла бойорһа, киләсәк быуын Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеүҙең 100 йыллығын да донъя кимәлендә барлыҡ өлкәләрҙә һәм тармаҡтарҙа үҙен танытҡан, дан тотҡан дәүләт булып, башҡорт телендә һөйләшеп байрам итһен!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Батша хеҙмәтенән яһауыл булып ҡайтҡан Көсөк батыр Бүгәс - Салауат яуҙары осоронда баш күтәреүселәр яғына ыҡлап ҡына ҡалмай, үҙ артынан иреккә сарсаған ватандаштарын да эйәртә.***



Комбриг Мортазин үҙенең артынса Лефорт төрмәһенең шомло ишеге шалтыр-шолтор итеп ябылғас ҡына, бөгөнгө таңдың аяуһыҙ ваҡиғалары төш түгел, ә ҡот осҡос хәҡиҡәт икәнлегенә төшөндө. Ваҡиға бөгөн - бер мең дә туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йылдың утыҙ беренсе майында, иҫ китмәле матур иртәлә, үҙенең көтөлмәгәнлеге һәм дәһшәтлелеге менән ап-аяҙ көндә күкрәгән күктәй уға ябырылды.

Дөрөҫ, кисә ете төн уртаһына тиклем һуҙылған Юғары команда составы кәңәшмәһендә ҡатнашыусылар араһында ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа йәнде тетрәтерлек хәбәр таралды: НКВД Иона Эммануэлович Якирҙы ҡулға алған! Кеше ышанмаҫлыҡ хәл: һыналған большевик, иң талантлы полководецтарҙың береһе, I рангылы армия командующийы, ғөмүмән, ил тарихындағы сағыу шәхес һис көтмәгәндә шик аҫтына алынһынсы! Кем аптырамаҫ икән быға? Был насар хәбәрҙе ишеткән һәр кем, Муса кеүек үк, үҙ яҙмышын, яҡындарының киләсәген уйлап борсолоп, шомлана биреп ҡуйһа ла, өмөтһөҙ - шайтан, тигәндәй, кеше тәбиғәтенең сәйер бер үҙенсәлеге улар күңелендә: "Был миңә ҡағылмай үтергә тейеш", - тигән хыянатсыл ышаныс уятмай ҡалмағандыр. Әгәр шулай булмаһа, көндән-көн ҡеүәтләнә барыусы хәтәр ойошмаға ҡаршы күмәкләп берәй сараһын табырға тырышырҙар ине. Һис юғы, унан һаҡланыу әмәлен. Был нисек була инде: кисә Якир, бөгөн Мортазин, ә иртәгә?..

Пайтәхеттең төрлө-төрлө фекерҙәрҙән ут сәсрәтеп, ҡайнап торған өҫкө ҡатламында, бигерәк тә генераль штаб тирәһендә эске эштәр наркомы Ежовтың елле хоҡуҡтар менән файҙаланыуы киҫкен бәхәстәр, кире ҡараштар тыуҙыра башлағайны инде.

"Дәһшәтле Иван заманындағы опричнинаны тергеҙеү кемгә кәрәк булды икән?" "Әгәр граждандар һуғышында түгелгән ҡан даръяһы, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡорбандар ошоноң өсөн икән - бөтәһе лә харам булып сыға". Барыһынан да йышыраҡ яңғыраған был фекерҙәрҙе Муса һуңғы мәлдә күп ишетһә лә, ошо ваҡиғаларҙың ипкене туранан-тура үҙенә ҡағылыр, тип һис башына килтермәгәйне.

Эйе, утты-һыуҙы кискән полководецтарҙан торған Юғары командованиела башлы егеттәр юҡ түгел, тик улар ҡайһы тәңгәлдә яңылышты, ҡасаныраҡ тупланырға, ойошорға өлгөрмәй ҡалды икән? Был үкенесле хата эске эштәр комиссариатының көсөн, мөмкинлектәрен баһалап еткермәүҙән килеп сыҡты, шәт.

Таш төрмәнең тар ғына камераһына килеп инеү менән ул үҙен тимер ҡоршауға эләккәндәй хис итте. Кемдеңдер ауыр, ҡотолғоһоҙ ҡаты ҡулдары күмәгәйенән алып, торған һайын нығыраҡ быуғандай, таш иҙәнгә һалып иҙергә теләгәндәй.

Атаҡлы комбригтың мөһәбәт, мыҡты кәүҙәһе килеп ултырыуҙан ҡаҡ һике шағыр-шоғор итеп ҡалды, тик ул быны ишетмәгәндәй терһәктәрен тубығына, эйәген көрәк дәүмәле устарына терәп, уйға сумды. Иртәнге ваҡиғалар уның күҙ алдынан тағы ла бер ҡабат ап-асыҡ булып үтеп киттеләр.

...Таңғы сәғәт дүрттәр тирәһендә ҡаты итеп ишек дөбөрләүгә ҡош йоҡоло Муса Лутович менән бер юлы Фәтиха Мөжәһетдиновна ла уянып китте. Инәһенең тертләп уяныуынанмы, әллә уның уяулы-йоҡоло килеш һаҡһыҙыраҡ ҡағылыуынанмы, эргәлә ятҡан сабый - дүрт айлыҡ Асҡар саяланып иларға тотондо.

- Эй, Хоҙайым! Муса, ишетәһеңме, һиңә килделәр бит... - тине шомланып уянған ҡатыны һәм тора һалып, өҫтөнә халатын кейҙе. Уның ҙур асылған күҙҙәрендә мөлдөрәмә тулы хәүеф ине.

- Сеү, белмәйенсә һөйләмә! Ана, баланы әүрәтһәңсе, - комбриг тыныс булырға, кинәт дарҫлап тибергә тотонған йөрәгенең ярһыуын тыйырға тырышты. Ул ашыҡ-бошоҡ кейенгән арала түҙемһеҙ дөбөрләү йәнә ҡабатланды.

- Аһ, Муса, һинең менән бер-бер хәл генә була инде, яман насар, ҡурҡыныс төш күрҙем: сабып барған ерҙән эйәреңдең айылы өҙөлөп, аттан ҡоланың да, артта килгәндәр тапап, иҙеп үттеләр бит...

- Ярай, тыныслан, хәйерлегә юра - аттың ҡасан кешене тапағаны бар? - тине үҙен тамам ҡулға алған Муса йоҡо бүлмәһенән сығып барышлай. Ни булһа ла ишекте асырға кәрәк ине.

- Ә һеҙ ниңә торҙоғоҙ? - тип һораны ул үҙ бүлмәләренән залға сыҡҡан ҡыҙҙарын күреп. Тиң етеп килгән Зөбәржәт менән Шәүрә өйҙә кинәт ҡупҡан ғауғанан йөрәкһеп уянып, берсә аталарына, берсә кескәй Асҡарҙы йыуатырға тырышып күкрәгенә баҫҡан инәләренең ҡурҡынған йөҙөнә ҡарап, өнһөҙ ҡалғандар.



Мәүлит ЯМАЛЕТДИН

# ҠОТОЛОУ ЮЛҠАЙҘАРЫН ТАПМАҺЫМ

(Повестан өҙөк)

Ишек асылыуға, өйгә өс ҡоралды конвоир эйәрткән НКВД комиссары килеп инде.

- Комбриг Мортазинмы? - Комиссарҙың тауышында инабат юҡ ине.

- Эйе. Ә нимә кәрәк?

- Һорауҙар бирмәҫкә! Ҡоралығыҙҙы тапшырығыҙ ҙа, тиҙ генә йыйынығыҙ! Бына ордер.

Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, ниңәлер, Мусаның күҙ алдына алыҫ Башҡортостандың иң төпкөлөндә, тауҙар ҡуйынында ятҡан Көсөк ауылы килеп баҫты, ваҡыттың керпек ҡаҡҡандай ғына бер миҙгелендә ҡолағында атаһы яратып йырлаған "Ғүмәров" көйө сыңлап китте:

..Аҡ сабаҡҡай кеүек килеп ҡаптым,
Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым.

Муса Лутович тиҙүк иҫенә килде - хыялға бирелеп торор мәлме?

- Туҡтағыҙ әле, был ниндәйҙер ҡот осҡос аңлашылмаусылыҡ... - Комбригтың бирешер самаһы юҡ ине. Ниәте - аҙағына тиклем сыйышыу. Комиссарҙың яуабы аҡтыҡ дәрәжәлә ҡәтғи, уҫал яңғыраны:

- Иҫкәртелде бит: приказға бер һүҙһеҙ буйһонорға тәҡдим итәм. Ни тиклем тиҙерәк булһа, шул тиклем яҡшыраҡ! Үҙегеҙ һәм ғаиләгеҙ өсөн!

Бөтәһе лә аңлашылды: былар менән артабан һүҙ көрәштереү - үҙ-үҙеңде түбәнһетеү, абруйыңды төшөрөү генә. Комиссар, эттән тыуған бәндә, дөрөҫ әйтә: ҡатыныңды, балаларың яҙмышын уйлаһаң, теште ҡыҫып түҙергә тура килә.

Фәтиха Мөжәһетдиновна мыжыуынан көскә тыйылған Асҡарҙы Зөбәржәткә тотторҙо ла илай-һыҡтай төйөнсөк әҙерләргә керешә. Йоҡолары осҡан ҡыҙҙар был таңдың серле шом тулы тамашаһын өн-тынһыҙ ғына күҙәттеләр. Бөгөнгө көндөң һәләкәтле һулышын тойоуҙан, аталарының ҙур, ҡотолғоһоҙ бәләгә тарыуын һиҙемләүҙән күҙҙәре мөлдөрәшеп торған Зөбәржәт менән Шәүрәне күреп, Мусаның бөтә булмышын сикһеҙ йәлләү тойғоһо биләп алды, йөрәге һулҡылдап һыҙларға тотондо. Нисек кенә аянысслы булмаһын, хушлашырға ваҡыт ине.

- Йә, балалар, хушлашайыҡ. - Ул тәүҙә Асҡарҙы һаҡ ҡына ҡулына алып күкрәгенә ҡыҫты, шунан һуң тауышын тигеҙ сығарырға тырышып дауам итте. - Мине һорау алыр ҙа ҡайтарырҙар тип уйлайым. Шулай ҙа донъя хәлен белеп булмай, оҙағыраҡ тотоуҙары ла ихтимал. Һеҙ бында бер-берегеҙҙе тыңлашып ҡына, һәйбәт итеп донъя көтөгөҙ, йәме. Һеңлеләрегеҙ Ынйыҡай, Наилә, Ләйлә өйҙә булмай ҡалдылар, бик үкенес. Уларҙы, бына ҡустығыҙ Асҡарҙы ҡаҡмай-һуҡмай ғына ҡарашығыҙ, һеҙ ҙур бит инде.

Комбриг тамағына килеп тығылған ҡаты төйөрҙө йоторға көсәнеп, алмаш-тилмәш ҡыҙҙарының башынан һыйпаны, арҡаларынан һөйҙө лә яттар алдында йомшаҡлыҡ күрһәтеүҙән ҡурҡып, ҡатыны менән һаубуллашырға ашыҡты.

- Балаларҙы һаҡла, - тине ул йөҙөнә йылмайыу билдәләре сығарырға тырышып.

Күҙҙәренән бер туҡтауһыҙ йәш ағылған Фәтиха Мөжәһетдиновна һүҙ әйтә алмайынса баш ҡаҡты. Комбриг үҙе лә бынан һуң өндәшмәүҙе хәйерле күреп, ғүмерендә беренсе мәртәбә балалары алдында йәмәғәтен ҡосағына алып, биттәренән алмаш-тилмәш үбеп хушлашты.

Ул тупһаны аша атлап сыҡҡас, артҡа боролоп бер ҡараны. Ҡатынының йәш монары аша бөткөһөҙ хәсрәт бөркөүсе күҙ ҡарашы, кескәй Асҡарҙың саяланып илаған тауышы, ике ҡыҙының "Атай!" тип өҙәләнеп ҡысҡырыуы бергә ҡушылып, Мусаның йөрәген телеп үтте лә, бәғеренә ауыр таш булып ятты...

Яманатлы Лефорт зинданының таш стеналарынан килгән һалҡынлыҡ тәндән дә былайыраҡ йәнгә өшәнес тәьҫир итә, йәмле май иртәһенең йылы нурҙары тимер рәшәткәле кескәй тәҙрәнән үтеп инергә ҡыймағандай, тоноҡ ҡына яҡтылыҡ һибә.

Комбриг яңы уяна башлаған тәнен турайтып, аяуһыҙ ысынбарлыҡҡа бер аҙ күнегергә теләп, тирә-яғына күҙ һалды. Таш стена, таш иҙән, таш түшәм. Тимер менән көпләнгән ишектә ат күҙендәй генә тишек ҡарайып күренә, коридорҙа сәғәт йөрөшөн хәтерләтеп, надзирателдәрҙең аяҡ тауышы ишетелеп тора: тап-топ, тап-топ.

"Был көндө лә күрәһе булған икән, - тип уйланы ул әсе көләмһөрәп, - кемдәрҙең генә һағышлы кисерештәрен үҙенә һеңдермәгән икән бынау ҡалын стеналар? Кемдең ғәзиз балаһының аянысына шаһит булмаған тиһең ошо таш иҙәндәр? Бәлки, әле мин ултырған һикелә берәй ярһыу рухлы тотҡон ултырғандыр, язалаусыларына әйтер яуаптарын әҙерләгәндер... Яуап тигәндәй, уны ысынлап та алдан барлап ҡуйғанда һис зыян итмәҫ ине - эш олоға киткәнгә оҡшай. Һорау, һорау... Һорау ниҙән башлана? Ул, ғәҙәттә, баштан башланыусан. Һыуҙың сыҡҡан инешен юллағандай, һорау алыныусының да тәү сығанаҡтарын төпсөп, анығлайҙар булыр".

Тәү сығанаҡ, тыуып үҫкән ил, алтын бишек, Ватан. Был төшөнсәләрҙе күпме генә теҙмә, уларҙың барыһы ла башлап аҡ донъяны күргән, тупрағына кендегендең ҡаны һеңгән ғәзиздәрҙән-ғәзиз ереңә килеп тоташа. Муса тыуған яҡ тигән һүҙҙе ишетһә, йә шул турала уйлар булһа, күҙ алдына иң тәүҙә Урал тауҙарының көнсығыш армыттары араһында урынлашҡан Көсөк ауылы килеп баҫа.

Көсөк - таулы Башҡортостандың Тамъян-Ҡатай кантонындағы ауыл. Күбәләк-Тиләү улысына ҡарай. Атаһынан, әзәһе Айһылыуҙан күп тапҡыр ишетеүенсә, был ауылға нигеҙҙе Тиләү ырыуының арҙаҡлы уҙаманы Көсөк Мортазин һалған. Батша хеҙмәтенән яһауыл булып ҡайтҡан Көсөк батыр Бүгәс - Салауат яуҙары осоронда баш күтәреүселәр яғына ыҡлап ҡына ҡалмай, үҙ артынан иреккә сарсаған ватандаштарын да эйәртә. Уның был ҡылығы өсөн карателдәр ихтилалдан һуң Көсөк ауылының көлөн күккә осора. "Эй-й, уландар, - тип һуҙыр ине Айһылыу әбей ауылының боронғо тарихына төшөп киткән саҡтарында, - халыҡтың теләккәйҙәрен тыйып буламы ла, ниәттәрен үртәп буламы?"

Шунан күңелендәге рух күтәренкелеген аңлатыр өсөн ҡарһүҙҙең көсһөҙлөгөн тойоп, иҫ киткес моңло, иркен тауышы менән зыңғырлата йырлап ебәрер ине:

...Ир-егеткәйҙәрҙең өмөткәйен
Тәфтиләүҙәр мәңге быуа алмаҫ.

Бала саҡ! Донъялағы һәр бер кешенең бәхетле лә, ғәмһеҙ ҙә йәшәү дәүере, ат башындай алтын биреп тә ҡайтарып алып булмай торған иң ҡиммәтле тормош киҫәге.

Мусаның балалыҡ донъяһында әзәһе үҙенә бер башҡа урын биләп тора. Аҙ һүҙлерәк Орҡояның - Мусаларҙың инәһенең хәстәре башҡасараҡ ине: гел ир балаларҙан торған ишле ғаиләне туйындырыу, өҫ-баштарын бөтәйтеү. Хужалыҡтың үҙенә күрә тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ эшен башҡарырһыңмы ла, хәбәр менән булырһыңмы? Шуға күрә өй эсендәге өн-тынһыҙ килешеү буйынса рухи яҡты ҡайғыртыу әзәй ҡулына тапшырылғайны. Ә уның ейәндәргә әйтер һүҙе, тапшырыр аманаты бихисап. Әкиәт тиһеңме, тапҡыр һүҙ, мәҡәл тиһеңме, боронғо ер-һыу, йыр тарихы тиһеңме - тыңларға ҡолаҡҡынаң һау булһын.

Ғаиләлә икенсе бала булған Муса ғибрәтле хәлдәрҙе, йор һүҙле хикәйәттәрҙе тыңларға әүәҫлеге менән айырылып торҙо. Ул әзәһенең ауыҙына инә яҙып, уның хикмәттәрен йотлоғоп тыңлағанын, тәьҫирләнгән күңеленең хыял ҡанаттарында бөтөнләй икенсе донъяға сәйәхәткә киткәндәрен яҡшы хәтерләй. Әкиәт батырҙары сафында яуыз аждаһаларға, дейеүҙәргә ҡаршы һуғышҡанды, нахаҡҡа рәнйетелгәндәрҙе ҡотҡарып оло кинәнес кисергәнде нисек оноторһоң? Ҡайһы саҡта һүҙ тәьҫиренән күңелең йомшарып илағаныңды йәки күҙеңдән йәш сыҡҡансы көлгәнеңде нисек хәтерләмәҫһең инде? Йәки ауылыңа нигеҙ һалған олатаң Көсөк яһауыл менән бергә баярҙарға ҡаршы көрәшкә күтәрелеүҙәр, уларға дәһшәт һалып Салауат менән Бүгәсәүҙең тыуы аҫтына баҫыуҙар? Аҙаҡтан Көсөк ауылы менән бергә янып, көлгә ҡалыу, ҡоллоҡҡа ҡыуылған үҫмерҙәр, мәсхәрәләнгән ҡыҙ-ҡыҙҡындың йәненә әүерелеп иңрәүҙәр. Уларҙы нисек онотор һоң?

**(Дауамы бар).**

✔ *Ул минең армиялағы егетемдә, уны оҙатып-көтөүемдә хөрмәт итеп, хистәрен белдермәгән, ә мин ҡыҙ башым менән беренсе булып хистәремдә аңлатыуҙан тартынып, әлеге ҡырағайлыҡтан үтә алмай, тороп ҡалғанмын инде...*



ИҒТИБАР: КОНКУРС!

**Башҡорт мәҙәниәтен һуғарыусы йәншишмә - башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. Йолаларҙа сағылған халыҡсан йәшәү фәлсәфәһе төпкә аңды уята. Йола фольклоры һәр төбәктәге гөрөф-ғәҙәттәрҙе, тел һәм кейем, йола һәм ырым, йыр һәм бейеү күренештәрен туплай. Республика Халыҡ ижады үҙәге тарафынан республикала төбәк-ара башҡорт фольклор ансамблдәре фестивале "Ашҡаҙар таңдары" (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), "Туй йолалары" (Шаран районы), "Салауат йыйыны", "Башҡорт тирмәһе" бәйгеләре ойоштороla килә. Беҙ Бөтә донъя фольклориадаһы алдынан "Башҡорт йолаһы" сценарийҙар конкурсы иғлан итәбеҙ. Төбәктәрҙән ер-һыу тарихына һәм этнографик мираҫҡа таянып ижад ителгән сәхнә һәм майҙан тамашалары өсөн яҙмалар көтәбеҙ. Иң уңышлы сценарийҙарҙы ҡиммәтле бүләктәр көтә.**

# ҠОРАМА КҮЛДӘК ЙОЛАҺЫ

*Сәхнәгә бер төркөм ҡатындар - ағинәйҙәр сығып ултырыша, улар ҡорама күлдәк, бетеү күлдәк, бетеү юрған тегә башлай.*

**Шәүрә:** Бына һеҙгә төрлө ҡорамалар - ҡырҡ ҡораманан күлдәк тегәйек! Тағы ла бетеү күлдәк тегербеҙ. Ҡалғанынан бетеү юрған яһарбыҙ. Әйҙәгеҙ, ике кеше күрмәһен, икендегә етмәһен, эшебеҙ уң булһын, тип өмөгә тотонайыҡ.

**Ағинәй:** Шәүрә апай, әйҙәле берәй матур йырынды йырлап ебәр!

**Шәүрә:** Яҡын күргән кешеләренә истәлеккә бүләк ҡалдырыу - борондан ҡалған йола. Бирәү: "Тәҫөм итеп һаҡларһың", - тип тотоноп йөрөгән ҡәҙерле ҡоралын бирә, бирәү - биҙәүес әйберен... Йыр ҙа - бүләк. Улай булғас, "Йырым ҡалһын мине иҫләргә", - тип йыр бүләк итәйем әле үҙегеҙгә.

*Шәүрә апай йырлай. Балалар инә.*

**Балалар:** Һаумыһығыҙ!

**Сыңғыҙ:** Инәй, мине бәләкәй саҡта башым ауыртҡанда һин ҡанат менән имләнең бит? Эйе бит? Ҡарға ҡанаты менән имләгәндәр, тиһәм, ышанмайҙарсы!

**Балалар:** Инәй, шундай серле ырымдарҙы беҙ ҙә беләйек, һөйләгеҙ әле.

**Ағинәй:** Эйе, ҡарға ҡанаты менән имләү ырымы булған ул. Башы йыш ауырыған кешенең башын, тәнен ҡарға ҡанаты менән һыйпап, шул ҡанатты эстән кейемдең күренмәгән еренә тегеп ҡуйғандар. Ҡайһы бер кешеләр ҡарғаның итен дә ашаған. Шуға абайлап йөрөгөҙ, башығыҙҙы төкөтөп ауырттырмағыҙ.

**Сыңғыҙ:** Инәйҙәр, өйәңкегә менгәндә күҙемә ағас ботағы төртөлгәйне, һыҙлап тора, нимә эшләтәйем икән?

**Ағинәй:** Ана бит ана! Ипләп кенә, ҡарап ҡына йөрөһәгеҙ ни була? Атай-әсәгеҙ һеҙҙе Хоҙайҙан һорап ҡына ала, аяп ҡына үҫтерә, шуға һеҙ ҙә үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ. Нәҡ шул ағас таптҡырында һоло бөртөгө, энә һәм епте ергә күмеп ҡуйырға кәрәк. Шулай эшләһәң, күҙеңә зыян килмәҫ, балам. Энә һәм башҡа әйберҙәрҙе күмгәндә урман эйәһен бәхилләү өсөн былай тип әйтергә кәрәк:

*Минең элекке күҙемдә бир,*
*Һине ашатам, һине эсерәм,*
*Һыуһағанда һыу бирәм,*
*Асыҡҡанда аш бирәм...* - тип, әпсен һүҙҙәрен әйтерһең дә шул урынға һыу һибеп ҡуйырһың. Аҙыҡ-түлек, бутҡа-боламыҡ та ҡалдырһаң була.

**Ҡыҙ:** Урман эйәһе лә була икән. Бутҡа яратамы?

**Ағинәй:** Бутҡаны кем яратмай? Әпсен һүҙе - ул теләк, үтенес була. Һүҙ көсө, теләк көсө кешене үҙе дауалай.

**Сыңғыҙ:** Шулай, инәй. Йылы һүҙ - йән аҙығы, тиҙәр бит.

**Ағинәй:** Йә, баяғы урман эйәһенә әпсен һүҙҙәрен ҡабатлап әйтеп ҡара әле!

**Сыңғыҙ:** *Минең элекке күҙемдә бир,*
*Һине ашатам, һине эсерәм,*
*Һыуһағанда һыу бирәм,*
*Асыҡҡанда аш бирәм.*

**Ағинәй:** Яҡшы, балам. Мин әйткәндәрҙе теүәл генә үтә, онотма.

**Нәсиә:** Инәй! Минең ҡолағымдың тишелгән урыны боҙолдо, ҡарап ҡына ебәрегеҙ әле.

**Ағинәй:** Ҡолағыңды ҡоштар килгәндә тиштергәнһең бит, ҡыҙым! Ҡолаҡты ҡош килгәндә, ҡош-ҡорт сала башлағанда тишмәйҙәр. Ҡош киткәндә лә тишергә ярамай. Югиһә, ҡолаҡ яраһы боҙола. Борондан яҙғы йәки көҙгө һауа алмашынған саҡта һаҡланырға ҡушҡандар. Ҡолағыңа көмөш тағып, балауыҙлы май һөртөп, доға уҡып имләрбеҙ, ҡыҙым.

**Нәсиә:** Рәхмәт, инәй.

**Нурислам:** Ә һеҙ матур ғына итеп нимә тегәһегеҙ ул?

**Ағинәй:** Ҡорама күлдәк тегәбеҙ.

**Наҙгөл:** Ә кемгә кейҙерәһегеҙ уны?

**Ағинәй:** Яңы тыуған бәпестәр өсөн ул, балалар.

**Нәркәс:** Ә ни өсөн кейҙерәһегеҙ уны?

**Ағинәй:** Йәш сабый балаға ҡорама күлдәк тегәбеҙ, балалар. Өйрәнеп, белеп тороғоҙ. Бик йыш сирләй, бик һауһыҙ бала икән ул. Уны боронғоса имләп дауалап ҡарайбыҙ. Беҙҙең яҡ башҡорттары элек балаға ғүмер теләп, өс ҡорама күлдәк теккән. Тәүге күлдәк - өс төрлө ҡорама тауар ҡоршап тегелгән, икенсеһе - ете ҡораманан, өсөнсөһө ҡырҡ ҡораманан торған. Был күлдәктәрҙе, баланан ҡалғас, ағын һыуға ағыҙыу йолаһы ла булған.

Ҡораманы йәштәрҙән дә, йыртыш, яулыҡ, күлдәк тауары киҫәктәренән, хатта ҡарт әбей-бабайҙарҙың кейеменән дә ҡырҡып алғандар. Әбей-бабай кеүек, ғүмерле булһын тип ырымлағандар, шулар кеүек ныҡ та булһын, тигәндәр. Шулай итһәң, бала әбей-бабайҙар кеүек оҙаҡ йәшәйәсәк, уның ауырыу-сирҙәре ағын һыу менән ағып китәсәк, тигәндәр.

**Нәркәс:** Ағын һыу көсөнә беҙ ҙә ышанабыҙ. Һыу менән бөтә сирҙе дауалап була. Бисмилла тип, теләк теләп йотомлап эсергә генә кәрәк. Ә ҡорама күлдәкте ағын һыуға ағыҙғандарын ишеткәнем юҡ.

**Ағинәй:** Йыйылған ҡораманы өсмөйөшләп, йәғни бетеүләп киҫеп тә күлдәк теккәндәр. Шул күлдәкте "бетеү күлдәк", тиҙәр. Бетеү күлдәк сабыйға күн дә - һыу ҡойондорған һайын - кейҙерелгән. Күлдәк өсөн ҡорама әбей-бабайҙарҙың иҙеүҙәренән, ягаларынан уйып алынған ҡорама тауар киҫәге булырға тейеш. Бетеү күлдәкте ташламайҙар, һалып ҡуялар. Ул ғүмер буйы кешене һаҡлай, хатта уның балала-сағаларын да һаҡлау көсөнә эйә икән.

**Сыңғыҙ:** Минең дә бетеү күлдәгем булған, әле лә һандыҡта ята!

**Ағинәй:** Балаһы тормаған, йәғни балаһы тыуып та үлеп тик торған кешегә, балаһы тыуғас, әсәһе, әләсәһе, ҡәйнәһе йәки башҡа оло әбей бәпәйгә бетеүле юрған эшләгән. Был юрған да өсмөйөшлө ҡорамаларҙан торған. Бетеүле юрған баланы яман күҙҙән, ен-пәрейҙәрҙән, ауырыу эйәләренән һаҡлаған.

**Балалар:** Бик ҡыҙыҡ икән. Бетеү тигән өсмөйөш яман күҙҙе ҡурҡыта инде, улайһа. Ҡыҙҙарҙың сәс толомон ҡаплап торған елкәсүк та өсмөйөшлө бетеү кеүек.

**Ағинәй:** Киндер туҡыманан, хатта иләнгән тиренән дә алынған ҡорама, шуны бетеүләп, өсмөйөшләп уратып тегеп кейемгә ҡуша беркеткәндәр, уның көсө бик ныҡ була, тигәндәр. Өсмөйөшлө бетеү биҙәген еләнгә ҡуйғандар.

**Сыңғыҙ:** Инәйҙәр, һеҙ теге ваҡыт "Дүртле бейеү"ҙе өйрәтербеҙ, тигәйнегеҙ.

**Ағинәй:** Эйе шул, балалар! Әйҙәгеҙ әле, бергәләп бейешеп алайыҡ! Таҡмаҡ әйтегеҙ! Шуға дәртләнеп бейербеҙ.

*"Дүртле бейеү". Бөтәһе лә бейей. Тамам.*

**Тәзкирә ҒӘЛИНА.**
**Федоровка районы**
**Яңы Яуыш ауылы.**

ҺӨЙӨҮ ҺҮҘЕ

# УЛ ДА ЯРАТҠАН!

**"Һөйөү һүҙе" рубрикаһындағы серҙәрҙе уҡый барып, ғөмүмән, был тормошта үҙебеҙҙең милләт ҡатын-ҡыҙының мөхәббәт тарихтарын ишетә-тыңлай барып, барыбыҙға ла хас булған бер төшөнсәне аңланым. Асыла белмәйбеҙ икән беҙ. Ҡырыҫлыҡ, тыйнаҡлыҡ, баҫалҡылыҡтан шулай йомолғанбыҙмылыр инде - аңламаҫһың. Һәр хәлдә, был холоҡ һыҙаты беҙҙең күптәребеҙгә бәхетле булырға ҡамасаулаған. Олоғая барып беҙ быны аңлайбыҙ, тик йәшлеккә кире ҡайтып та, хаталарҙы төҙәтеп тә булмай.**

Яратыуҙы ҡабул итә, уға ҡарата асыла, һөйөүебеҙҙе бирә, белдерә алмайбыҙ. Яратҡанда ла наҙланып, иркәләп кенә түгел, ә ҡырағай ат шикелле тибешеп-тешләшеп яратабыҙ. Иң мөһим мәлдә бер ауыҙ һүҙ, бер ым-ҡараш, бер аҙым эшләй алмайбыҙ. Оялабыҙ, ҡурҡабыҙ, ниндәйҙер сикләүҙәрҙән сыға алмайбыҙ, ғорурлыҡ баштан ашҡан.

Мин мәктәптән дуҫлашып йөрөгән егетемдә армияға оҙатып, икенсе ауылға эшкә барғас, бер егетте осраттым. Район үҙәгендә үткән йәш уҡытыусылар йыйылышында шығырым тулы залдың икенсе осондағы кешене әллә ҡайҙан аңғарҙым да, йыйылыш буйына бер-беребеҙгә күҙ һала-һала ултырҙыҡ. Саранан һуң ул туп-тура килеп һаулыҡ һорашты. Мин эшкә барған ауылдыҡы икән, тик үҙе икенсе ауылда уҡыта. Күптәнге таныштар кеүек һөйләштек тә киттек. Ашханала бергә ултырып ашаныҡ, көлөштөк, шаярҙыҡ, киҫкә киноға барҙыҡ. Барыһы ла беҙҙе күптәнге таныштарҙыр тип уйланы. Икенсе көн уның матайына ултырып, кәрәк-ярағыбыҙҙы тейәп, юлға сыҡтыҡ. Көҙгө бысраҡта, урман юлынан кәзә матаста ҡолай-ауа, бата-бата оҙон юл үттек. Матай боҙолдо. Ут яғып, бәшмәк йыйып өтөп ашап, матайын япраҡҡа күмеп китеп, төнгә йәйәүләп саҡ ҡайтып индек. Шул бәхетле ике көндө мәңге онотмайым. Һәр һөйләшкән һүҙебеҙ, егеттең һәр ҡарашы бөгөн дә иҫемдә.

Әлбиттә, мин уға армияға егет оҙатҡанлығымды әйттем. Ул иһә, "Оҙатҡас - көт", тине. Үҙен ҡыҙы оҙатып ҡалып көтмәүе тураһында һөйләне. "Бик ауыр кисерҙем, һаман үпкәм бар", - тине. Шул мәл ул хыянатсы ҡыҙҙы күрә алманым, үҙем шунан көнләшеп яндым.

Ҡыш буйына осрашып йөрөнөк. Ул ял һайын ауылына ҡайтты ла минә килде, бергәләп клубҡа сыҡтыҡ, бейенек, концерттар ҡуйҙыҡ. Мине башҡа егеттәрҙән яҡлашып, бәйләнеүселәрҙән аралап һуғышыуҙары, кисәләрҙә эсергә көсләүселәрҙе туҙҙырып ебәреүҙәре, ҡайҙа барырға-ҡайҙа бармаҫҡа икәнлекте өйрәтеп, контролдә тотоуы окшауҙын арьяғында ине инде. Тик ул бер нисек тә хистәрен белдермәне. Бер нәмә лә вәғәҙә итмәне. Ҡосаҡламаны, үпмәне. Мин уның тойғоларын белә алмай ҡаңғырҙым. Ҡайҙалыр кемелер бар кеүек булып тойолоп тик торҙо. Уны тоткан, минә яҡынлатмаған ниндәйҙер шәүлә йәшәгән һымаҡ ине арала.

Йәйге каникулдарға ауылыма ҡүсереп алып килеп ҡуйҙы. Әсәйемә "Мин уны яратам" тип әйткәйнем инде, шуға ул уны өйгә саҡырып индерҙе, сәй эсерҙе, һөйләшеп ултырҙы. Аҙаҡ: "Белмәйем, балам, илағаһын инде быныың менән", - тип ҡуйҙы. Шунда оҙата сыҡтым да, ауыл ситендә хушлаштыҡ. Ул бик моңһоу ине. Нығышҡайным, "Йәшһең һин, аңламайһың әле бер нәмә лә", - тине. Йәнем көйҙө. Үпкәләп тороп ҡалдым.

Аҙаҡ унан хат килде. "Өйләнәм" тигән. Армиянан көтмәгән ҡыҙының ире ташлап сығып киткән дә, был уға барып йөрөгән икән. Унан ҡатын ауырға ҡалған. Барыһы ла ябай, тормошсан ғына булды ла ҡуйҙы шулай.

Армиянан егетем ҡайтты. Уға кейәүгә сыҡтым. Өйләнешер алдынан икенсене яратыуым тураһында һөйләп бирҙем. "Икебеҙ өсөн дә үҙем яратам", - тип әүрәтте. Йәшәп киттек, балалар үҫтерҙек. Тик мәхәббәтемдә онота алманым. Ул минең тормошомда параллель яҙмыш менән йәшәне. Башымдан сыҡмай торған бер уйға әйләнгәйне лә ҡуйғайны. Бәлки, шул ваҡыт психолог ярҙамы ла кәрәк булғандыр инде, тик ул саҡта кем уны аңлаһын? Ирем дә икебеҙ өсөн яратып арыны. Минең битарафлыҡтан да ялҡты күрәһең, икенсе ҡатынға әүрәне. Айырылыштыҡ...

Мөхәббәтем тураһында бер нәмә лә ишеткәнем булманы, берәүҙән һорарға ла ҡыйманым. Икебеҙ ике яҡтағы ҡалаларҙа йәшәнек. Былтыр, ҡунаҡтар оҙатып барып, вокзалда уйламағанда уның еңгәһен осраттым һәм поезы килгәнсе һөйләшеп ултырҙыҡ. Әллә нимәләрҙе иҫләнек, тик уның хаҡында һорашманым. Ахырҙа, еңгәһе үҙе әйтте. "Ҡалай ҡатыһың, ҡәйнешем һине уйлап, бер ҡатын менән тора алманы, ә һин ҡыҙыҡһынмайһың да икән", - тине. Был хәбәрҙән шаҡ ҡаттым! "Дүртенсе ҡатын менән йәшәй. Һәр беренен нимәһендер һинә оҡшатам тип алды", - тип һөйләп шаңҡытты мине. Иҫемә килгәс, уйымдан ғына "Үсем" тинем. Минең ғүмерем үкенестә, уйланыуҙарҙа, һағышта үтте, әйҙә, уныҡы ла шулай булһын, тинем. Аҙаҡ, ҡайтҡас, уны ла, үҙемде лә йәлләп, шулай аймылышып китеүебеҙгә үкенеп, тәгәрәп ятып иланым. Ул минең армиялағы егетемдә, уны оҙатып-көтөүемдә хөрмәт итеп, хистәрен белдермәгән, ә мин ҡыҙ башым менән беренсе булып хистәремдә аңлатыуҙан тартынып, әлеге ҡырағайлыҡтан үтә алмай, тороп ҡалғанмын инде...

Ә шулай ҙа ошо хәбәрҙе ишеткәс, минә барыбер еңел булып китте. Яуапһыҙ мөхәббәт ҡорбаны түгелмен, ул да мине яратҡан, тип ҡыуанып йөрөнөм оҙаҡ ҡына. Нисек булһа ла булған был яҙмыш, әммә ул да мине яратҡан. Минә шуны белеү ҙә етте...

**ХӘЛИҘӘ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# УТ ЯҠТЫҺЫНДА ЙОҠЛАМА

■ Лондрина университеты ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, мүк еләге һуты быуындары һыҙлаған ҡатын-ҡыҙҙарға шифалы. Ревматоидлы артрит менән сирләүселәргә көнөнә ярты литр мүк еләге һуты эсергә кәңәш ителә. Өс ай буйына эскәндән һуң быуындарҙы зарарлаусы антиесемдәр күләмен кәметергә мөмкин. Һуҙ anti-ССР антиесемдәре тураһында бара. Улар ҙы гипeрактив иммун системаһы етештерә. Тап ошо антиесемдәр күләменә ҡарап, табиптар артрит тураһында диагноз ҡуя. Эксперимент күрһәтеүенсә, мүк еләген гел эсеү арт-риттың билдәләрен - аяҡ-ҡулдарҙың быуындары шешен кәметә. Мүк еләгендәге антиоксиданттар был билдәләрҙе булдырыусы аутоиммун реакцияһын ййлата.

■ Түлһеҙлек - хәҙерге замандың төп бәләләренең береһе. Ғалимдарҙың яңы асышы күрһәтеүенсә, беҙҙе уратып алған замана уңайлыҡтары ла быының сәбәбе булып тора ала. Пластик һәм винил составындағы фталат уларҙы һығылмалы, йомшаҡ итә, оҙаҡ ҡулланыу мөмкинлеге бирә. Улар аҙыҡ-түлек ҡаптарында, иҙәнгә түшәй торған материалдарҙа, медицина ҡоролмаларында, косметикала бар. Ғалимдар эксперимент барышында инә ҡомаҡтарға кәүҙәнең һәр килограмына ҡарап 20 микрограмдан 200 миллилитрға тиклем фталат биргән. Өс ай барған һынауҙарҙан һуң ин аҙ күләмдә фталат алған инә ҡомаҡ та нәҫел дауам итеүсе булыуҙан туҡтаған. Фталаттар гормональ тайпылыштарҙан тыш, тотош репродуктив система эшмәкәрлеген юҡҡа сығара алыуы ихтимал, тигән фекергә ғалимдар.

■ Төнөн урамдағы реклама уттары, бағаналағы яҡтыртҡыстар һ.б. тәҙрә аша һеҙ йоҡлаған бүлмәгә төшөп тора икән, был күкрәк яман шешенә килтереүе ихтимал тип иҫкәртә ғалимдар. Улар ҡомаҡтар миҫалында быны раҫлаған да инде. Йоҡоно килтереүсе мелатонин, билдәле булыуынса, яман шешкә ҡаршы көслө сара. Әгәр ҙә төнөн йоҡлағанда ла яҡтылыҡ бар икән, мелатонин аҙыраҡ бүленә башлай.

■ Кардифф университеты тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тамаҡ ауыртҡанда һура торған рецептһыҙ һатылған кәнфиттәр сирҙәрҙең антибиотиктарға ҡаршы торосанлығын көсәйтә ала. Сөнки быйдай дарыу ҙа, кәнфит тә булмаған сараларға антибиотиктар өстәйҙәр икән. Әммә шуға ҡарамаҫтан, улар ауырыуҙы дауалай алмай. Һөҙөмтәлә, бактерия тағы ла көслөрәк булып китә, ныығыраҡ үсешә һәм антибиотиктарға ҡаршы тора ала. Шуныһы ла бар, вирустар тыуҙырған сирҙәрҙе антибиотиклы саралар менән дауаларға ярамай.

■ Бәшмәкте ризыҡҡа иҫәпләмәһәк тә, ғалимдар өлкән кешеләргә ул файҙалы, тип белдерә. Бәшмәктә эрготионеин тигән берләшмә бар, ул антиоксидант һәм шешеүгә ҡаршы сифаттарға эйә, ти Сингапур милли университеты белгестәре. Һынауҙарҙа 600 өлкән йәштәге ҡытай кешеһе ҡатнашҡан. Аҙнаһына ике тапҡыр бәшмәк ашағандарҙың мейеһе ҡартлыҡ сирҙәренә бирешмәй икән. Ғалимдар шампиньон, шиитаке, шулай уҡ тоҙланған бәшмәктәр ашарға тәҡдим итә. Эрготионеиндан тыш, бәшмәктә нервы туҡымаларына файҙалы берләшмәләр бар.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ



# ИҘЕЛБАШЫ - АҠ НИӘТТӘР БАШЫ

**Белорет ҡалаһы уртаһында быуат менән бер йәштәге янғын һүндереү ҡалансаһы бар. Ҡаланың бер күркәм боронғолого һанала ул. Ҡалансаның ҡаршыһында шулай уҡ быуаттан ашыу торған бер бина бар - ул бер бай йорто булған, революциянан һуң бында партия мәктәбе, төрлө учреждениелар урынлаша. Иҙелбашы-Белоретта башҡорт ҡала мәктәбе асыу менән янған бер төркөм зыялылар юллауы менән был бинала 2010 йылда Яңыбай Хамматов исемендәге башҡорт гимназияһы асыла һәм уның директоры итеп Зөбәржәт Әхмәҙулла ҡыҙы Суфиянова тәғәйенләнә. Бөгөн ул Белорет районы һәм ҡалаһы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын етәкләй.**

Бына беҙ ошо гимназияла үтәсәк Белорет ағинәйҙәре йыйынында. Осрашыуға район ауылдарынан һикһән һигеҙ ағинәй килде, тип һөйөнсөләнеләр беҙҙе уҡыу йортонон ишек төбөнән үк. Йыйын дилбегәһен үҙ ҡулына алған Зөбәржәт Әхмәҙулла ҡыҙы матур итеп, тәфсирләп, осрашыуҙың ниәте-маҡсаттары һәм программа менән таныштыра, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының эшсе составы тураһында хәбәр итә. Гимназия директоры, Белорет ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы, район гәзите баш мөхәррире, район Советы хеҙмәткәрҙәре һәм ағинәйҙәрҙән торған был составты координацион совет тип атағандар икән. Һәр береһе менән берәм-берәм таныштырып, уларға бурыстар йөкмәткәс, һүҙҙе Белорет район хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Сафиулла улы Теләүбаев ала. Уның ағинәйҙәр эшмәкәрлегенә юғары баһа биреүе, үҙе етәкселек иткән район башҡорттары ҡоролтайы эшендә лә алыштырғыһыҙ ярҙамсылар булыуы тураһында әйткән һүҙҙәре һәр кем йөрәгенә һары май булып яғыла. Илгиз Сафиулла улының күҙәтеүҙәре аша тыуған бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт хәтергә уйылды: айыҡ ауыл булып йәшәгән Рысыҡайҙа былтыр ун ике сабый тыуған һәм бер кеше лә вафат булмаған. Кешеләргә кешесә оран ташлау, йәғни айыҡлыҡҡа, яҡшыға өндәү бер ваҡытта ла эҙһеҙ үтмәй, ошондай саҡырыуҙарға ҡушылғандар ота ғына, ти ул.

Артабан йыйын фекер алышыуға күсте. Хөсәйен ауылынан Рәйлә Иҫәнғужина ағинәйҙәрҙе борсоған уйҙар менән уртаҡлашты: "Ауылдарҙа һаулыҡтары ҡаҡшаған бик күп кеше медицина ярҙамына мохтаж. Улар бәләкәй пенсияларын нимәгә бүлергә белмәй интегә: кейемгәме, дарыуғамы, юлғамы, балаларғамы... Ғүмер буйы колхозға йә урман хужалығына бил бөгөп тә, бөгөн ошондай ауыр көнгә алған ауылдаштарға ла, яңғыҙ ҡарттарға ла ярҙам итергә тейешбеҙ", - тигән тәҡдимде индереп ҡуйҙы Рәйлә апай ағинәйҙәр башҡара торған бурыстар исемлегенә.

Межгорье ҡалаһы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Фәнүзә апай Хажина үҙҙәренең биләмәһендә иркенләп эшләү шарттары булмауы, уларҙы йәмәғәт ойошмаһы тип танырға теләмәүҙәре тураһында телгә алды. Улар адресына ҡырын ҡараштар, тортмә һүҙҙәр яуҙырылһа ла, Межгорьела башҡорт мөхите булдырыу, халыҡты башҡортса мәҙәни сараларға йәлеп итеү буйынса күп эш башҡарыуҙары, эште шулай дауам итәсәктәре тураһында ла белдерҙе ул.

Сәхнәгә бер-бер артлы сығып, төрлө ауылдарҙың башҡорт милли кейемендәге ағинәйҙәре халҡыбыҙҙың матур йолалары менән таныштыра башланы. Сосновка, Рысыҡай, Мөхәмәт, Абҙаҡ, Ҡоҙғон-Әхмәр, Үҫмангәле, Ғәбдүк, Үткәл, Йөйәк, Үҙәнбаш, Хөсәйен һәм Нура ауылдары ағинәйҙәре "Килен төшөрөү", "Килен һөйөү", "Тула баҫыу" кеүек йолаларҙы сәхнәләштерҙе, мөнәжәттәр көйләне, үҙҙәре теккән йә тегергә йыйынған милли кейемдәр тураһындағы фекерҙәрен яңғыратты.

"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының координация советы ағзаһы, "Урал" район гәзите баш мөхәррире Сатура Минһажетдинова яҡташтарының ни хәтле талантлы һәм уңған булыуы тураһында һөйөнсөләне. "Маҡташып ҡына йәшәмәйбеҙ, артыҡ маҡтауҙы бер ҡасан да өнәмәйбеҙ, әммә шул хәтле тырыш, фиҙаҡәр кешеләребеҙҙе ил менән белергә, күтәрмәләргә тейешбеҙ", - тине ул. Ағинәйҙәр йыйынын хуплап килеп ҡушылған ир-егеттәргә рәхмәт яуҙырырға ла онотманы. Һүҙ ыңғайында Сермән ауылында утыҙ ике кешенән торған "Ир-егеттәр ҡоро" төҙөлөүе тураһында ла хәбәр итте.

Урамда ямғыр һибәләп торһа ла, ағинәйҙәр алдан уйланылған пландарын тормошҡа ашырып, милли кейем парадына теҙелде һәм гармунға ҡушылып йырлай-йырлай, Белорет ҡалаһы урамы буйлап атланы. Һыуыҡтан һәм ямғырҙан ҡурҡып шәпшәп атлап килгән кешеләр, туҡталып, был матурлыҡты телефондарына күсерә һалды, ихлас йылмайып, күҙ ҡараштары менән оҙатып ҡалды...





Былары - координация советы ағзалары.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# РӘСӘЙҘЕҢ БАЛЛЫ ЙӨРӘГЕ БЕҘ!

**Бөтә донъя умартасылары йыйыны - 47-се "Апимондия" 2021 йылда баш ҡалабыҙ Өфөлә үтәсәк. Өлгөрбикә ағинәйҙәр ошо ваҡиға айҡанлы әҙерлек эштәрен башлап ебәрҙе лә инде. Федоровка районы ағинәйҙәре, мәҫәлән, үҙҙәренең сираттағы йыйынын "Бал байрамы" тип атап, Башҡортостан - Рәсәйҙең баллы йөрәге, тип күтәрмәләп, баллы табынға күрше райондар ағинәйҙәрен ҡунаҡҡа саҡырҙы.**

Яңы Яуыш мәктәбенең башланғыс кластар уҡытыусыһы Тәзкирә Ғәлина менән 4-се класс уҡыусыһы Камалия Хәйбуллина сараны ҡунаҡтарҙы барлауҙан башланы һәм Федоровка районы Бала Сытырман ауылында үткән бал байрамына Стәрлебаш, Мәләүез, Ишембай, Күгәрсен, Көйөргәҙе райондары, Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм районы ағинәйҙәре лә килеп ҡушылыуын хәбәр итте. Бал күргәҙмәһен ҡарап сыҡҡандан һуң, тамаша залына йыйылған ҡунаҡтарҙы "Айгүзәл" халыҡ ансамбле (етәксеһе И.Маликов), "Замандаш" халыҡ ансамбле (етәксеһе Г. Сәлишева), "Умырзая" бейеү коллективы (етәксеһе Г. Әминева) сәләмләне һәм йыйындың маҡсатына ярашлы мәғлүмәтле һүҙ әйтте, йола-мөнәжәттәр, йыр-бейеү аша үҙҙәренең һәләтенә алҡыш-хуплауҙар ҡабул итте. Артабан район хакимиәте башлығы урынбаҫары Эдуард Сәлишев, Бала Сытырман ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Фәзел Ниғмәтуллиндар ҙа йыйынды сәләмләп, ағинәйҙәргә оло хөрмәт күрһәтте.

Федоровка районында үткән башҡортса сараларҙың бик үҙенсәлекле, талантлы сценарийҙар менән үтеүенә өйрәнеп бөтөлгән инде. Был юлы ла сараны алып барыусы Тәзкирә Ғәлинаның, республикала билдәле сценарийҙар авторының, иждад емеше менән үтте "Бал байрамы". Һәр сығыш алдынан урынлы, йөкмәткеле, аҫыл һүҙ әйтелде. Сәхнәгә күтәрелеүсе ағинәйҙәр сығышы шулай уҡ мәртәбәле, йөкмәткеле һүҙ менән дауам итте. Бала Сытырман ағинәйе Бибинур Кәримованың сығышын тамашасылар бигерәк тә тәрән ихтирам менән тыңланы, сөнки алып барыусы алдан уҡ был ағинәйҙең изге эштәрен ҡуҙаллатып, ауыр хәлдә ҡалған бөтә туғандарын үҙенең янына алып бағыуы, ҡарыйҙарын һуңғы юлға оҙатып, ғәрип булғандарына аулаҡ урын, ас булғанына йылы аш, яңғыҙына ағымлы йөрәк һүҙе табып, үҙ ҡанаты аҫтына алыуы тураһында әйтеп үткәйне инде.

- Беҙҙең Юрматы ырыуы хаҡында ҡалын, бик ҙур йөкмәткеле китап сыҡты, уны миңә "Киске Өфө" гәзите бүләк итте, - тип һөйләп китте Бибинур апай. - Туғанҡайҙар, был китап бит беҙҙең хаҡта! Һеҙ ундай яҙмаларҙы уҡып сығығыҙ, күҙҙәрегеҙ асылһын. Унда беҙҙең ата-бабаларҙың ауыр заманда ла бирешмәй, тырышып йәшәгәне, эшләгәне, ил һаҡлап яуҙарға сапҡаны, илде яңынан тергеҙеп, артабан ғаилә ишәйткәне тураһында яҙыла. Ошо яҙылғандарҙан ғибрәт-өлгө алайыҡ, манҡорт булмайыҡ. Өйҙәребеҙгә үҙ матбуғатыбыҙ килеп торһон, үҙ радио, телевидениебыҙ һөйләп торһон, клубҡа барһаҡ уйнап торһон үҙ йәштәребеҙ, мәсеттә вәғәз әйтһен үҙ муллабыҙ... Беҙ бит ағинәйҙәр булырға, ағинәйлек сифаттарына өлгәшергә ниәтләнек, ярты юлда туҡтамайбыҙ инде!..

Бөрйән ырыуы башҡорттары төйәк иткән Юлдаш ауылы ағинәйҙәре бал күргәҙмәһе өҫтәле артында теҙелеп торған сағында уҡ иғтибарҙы йәлеп иткәйне инде. Ауыл ағинәйҙәрен әйҙәп йөрөүсе Зилиә Тимербулатова улар менән таныштырып, барыһының да - Мабирура Зәйнәғәбдинова, Мәнәүәрә Әлибаева, Ғәлимә Йәнәлиналарҙың ата-бабаларҙың боронғо кәсебенә тоғро булып, балаларын да йәлеп итеп, күпләп умарта тотоуҙары тураһында һөйләне. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тап ошо төбәктән фронт өсөн бал ебәрелгәнен, "Ашҡаҙар туғайы" балы бөгөн дә халыҡ-ара конкурстарҙа бик юғары баһа алып, алтын миҙалдар яулауын да телгә алды.

Яңы Яуыш, Бала Сытырман, Оло Сытырман... Бер тиҫбегә теҙелгән ағинәй доғалары улар. Көнөн биргәс, йүнен дә бирһен Хоҙай уларға. Әлбиттә, башҡорт кешеһенең донъяны ҡабул итеүе матди байлыҡтар менән бәйләнмәгән. Әлмисаҡтан алып әҙәм күнеленә моң, уй-хис, хыял тулҡындары - фәнни тел менән әйткәндә, рухи энергия бирелгән, тип ышана һәм тормош менән йәнгә-йән килеп аралаша башҡорт. Барса тәбиғәт энергиялар тулҡынынан, йәндәр торошонан хасил, тигән Йыһани ҡанун менән йәшәгән йәнде шул ғына борсой: ниндәй энергия-йән әйҙәүендә йәшәйһең, үҙеңдән ниндәй энергия-ғәмәл ҡалдыраһың? Әлмисаҡтан бирле тулҡынған йән энергиялары һәр бәндәнең үҙ юлын тулыһынса именлектә үтеүен талап итә. Ҡыйылған йәндәр, өҙөлгән ғүмерҙәр, ҡалған хәтерҙәр - дейеүҙәй ҡара көс булып иҫәндәрҙең тормошон болғай. Быуын-быуын ошо хаҡта иҫкәртеп, иртәк, ҡобайыр, ҡарһүҙҙәр һөйләгән, йолалар уйлап сығарған башҡорт инәй-олатайҙары. Бөгөн ағинәйҙәр ошо вазифаны иненә артмаҡламаҡ булып ең һыҙғанған. Ярҙам итәйек, таныйыҡ, баһалайыҡ уларҙың изге эшен.

**Сәрүәр СУРИНА.**



СӘЛӘМӘТ БУЛ!



## ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### "Погондар" (ятҡан ауырыуҙар өсөн)

Арҡала ятҡан килеш, терһәктән бөгөлгән ҡулдарҙың устарын йоҙроҡҡа төйнәп, бил тирәһенә ҡуйырға (эскә ҡыҫырға). "Бер" тигәндә, йоҙроҡтарҙы аяҡ табандарына табан көс менән этергә. Терһәк ҡапыл тураятә, ә бармаҡтар табанға йүнәлтелгәндә - тарбая. Йәғни аҫҡа табан нимәнелер ташлаған йәки этеп ебәргән кеүек хәрәкәт яһайбыҙ. Бер уҡ ваҡытта ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алабыҙ. Йоҙроҡтарҙы көс менән этеп ебәрҙек - тын алабыҙ, йоҙроҡто кире урынына алып эскә ҡыҫабыҙ - тын сығарабыҙ. Бер-бер артлы 4 тапҡыр шаулы, ҡыҫҡа итеп тын алғандан һуң 3-5 секунд ял итегеҙ һәм тағы ла 4 тын алыу-тын сығарыу күнегеүен хәрәкәт менән бергә башҡарығыҙ. Норма: 24 тапҡыр 4 тын алыу-тын сығарыу+хәрәкәт күнегеүен башҡарыу. Әгәр ҡулығыҙ йәрәхәтләнгән йәки фалиждан һуң икән, "погондар" күнекмәһен сәләмәт ҡулығыҙ менән башҡарығыҙ, ҡыбырламағаны менән тәүҙә уйығыҙҙа ғына эшләгеҙ, йайлап уны ла хәрәкәтләндерә башлағыҙ.

### "Иңбашынды ҡосаҡла" күнегеүе

Арҡала ятҡан килеш, ҡулдарҙы терһәктән бөгөп, уларҙы күкрәк тәңгәлендә бер-береһенә ҡаршы ҡуйып, өҫкә күтәрергә. Ҡул суҡтары еңелсә генә итеп йоҙроҡлана, йоҙроҡтар бер-береһенә тейеп тора.

Ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алғанда ҡулдарҙы, үҙегеҙҙе иңбаштан ҡосаҡлаған кеүек, бер-береһенә ҡаршы (параллель рәүештә) хәрәкәтләндерәбеҙ. Ҡулдар ҡаушарылырға тейеш түгел. Уларҙың ҡайныһы өҫтә булһа ла ярай, әммә һул ҡул өҫтән китһә, артабан да шулай эшләгеҙ. "Ҡосаҡлау" ваҡытында ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алабыҙ, һуңынан ҡулдарҙы тәү тороштағыҫа айырабыҙ һәм был ваҡытта тын сығарабыҙ. Шунан тағы ла үҙ-үҙегеҙҙе ҡосаҡлағыҙ, ҡулығыҙҙы бер ваҡытта ла алмаштырмағыҙ!

Норма: 24 тапҡыр 4 тын алыу-тын сығарыу хәрәкәтен ҡабатларға.

Әгәр бер ҡулығыҙ хәрәкәтләнмәһә, күнегеүҙе сәләмәт ҡулығыҙ менән башҡарығыҙ, ә ҡыбырламағанын йайлап эшкә егегеҙ. Күнегеүҙе эшләгәндә сәләмәт ҡулығыҙҙы өҫтән, икенсеһен аҫтан ҡуйығыҙ. Йайлап хәрәкәтһеҙ ҡулығыҙ ҙа ҡыбырлай башлар.

Сикләүҙәр: әгәр күптән түгел генә инфаркт үткәрһәгеҙ, йөрәгегеҙ хәлһеҙ һәм күкрәгегеҙҙең һул яғында гелән уңайһыҙлыҡ тойһағыҙ, был күнегеүҙе һаҡ ҡына эшләгеҙ. Ҡулығыҙҙы бер ваҡытта ла көсәндермәгеҙ. Һаҡлаҡ сараларын күргән осраҡта ла күнегеүҙе эшләү ауыр булһа, уны күпмелер ваҡыт бөтөнләй эшләмәгеҙ. Бик һаҡ ҡына алда яҙылған **"Устар"** һәм **"Погондар"** һәм **"Башты бороу"** (киләһе һанда биреләсәк) күнегеүен башҡарығыҙ. Нығынғандан һуң, 2-3 ай үткәс, "Иңбашынды ҡосаҡла" күнегеүен дә эшләй башларһығыҙ.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 14 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчаянные". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]
1.00 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]
3.35 На самом деле. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Холодные берега". [16+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина. Взлёт". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.15 Полезные новости. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Спектакль "Записки сумасшедшего". [12+]**
**1.15 Т/с "Тут". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**3.15 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 15 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчаянные". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]
3.40 На самом деле. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Холодные берега". [16+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина. Взлёт". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Республика Live. #Дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Сказка о Емеле-Лодыре". [6+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Витязь" (Московская область) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.30 Т/с "Тут". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Оль-ля-ля!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 16 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчаянные". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]
3.40 На самом деле. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Холодные берега". [16+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина. Взлёт". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Неужели меня нет". [6+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Ты можешь! [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Т/с "Тут". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Под знаком Марса". [12+]**
**4.45 Ете егет. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 17 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Х/ф Премьера. "Пилигрим". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]
3.40 На самом деле. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Холодные берега". [16+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина. Взлёт". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Тимур и его команда". [6+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Д/ф "Назер". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "На полпути в Париж". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 18 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.50 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Я - Патрик Суэйзи". [16+]
2.05 На самом деле. [16+]
3.10 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Юморина". [16+]
23.45 "Сто причин для смеха". Семён Альтов.
00.15 Х/ф "Отцовский инстинкт". [12+]
03.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Узел вечности". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Точка Z. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Точка Z. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Спектакль "Жил-был пес". [6+]**
**1.15 Х/ф "Суперстар". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**3.15 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Д/ф "Огонь и свет оставил он". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 19 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.40 Д/с "Россия от края до края". [12+]
5.35 Х/ф "Человек-амфибия". [0+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Человек-амфибия". [0+]
7.20 Играй, гармонь любимая! [12+]
8.00 Бокс. Бой за титул чемпиона мира. А. Бетербиев - А. Гвоздик. Прямой эфир. [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Скорая помощь". [16+]
11.15 Д/с "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Михаил Козаков. "Разве я не гениален?!" [12+]
13.25 Х/ф "Человек-амфибия". [0+]
15.20 Х/ф "Покровские ворота". [0+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 Сегодня вечером. [16+]
23.00 "Что? Где? Когда?" [16+]
0.15 Х/ф Премьера. "Почему он?" [18+]
2.25 На самом деле. [16+]
3.20 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
08.15 По секрету всему свету.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
09.20 Пятеро на одного. [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Петросян-шоу". [16+]
13.50 Х/ф "Поезд судьбы". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Завтра будет новый день". [12+]
01.05 Х/ф "Серьёзные отношения". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ты можешь! [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 Х/ф "Мальчишки". [6+]**
**10.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**10.30 "Тамыр селтәре". [6+]**
**11.00 Күстәнәс. [12+]**
**11.30 Бай баҡса. [12+]**
**12.00 "Аҫылташ". [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак барс" (Казань).**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00 Балет "Волшебный сундук". [6+]**
**1.15 Х/ф "Я знаю, что ты знаешь". [16+]**
**2.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.15 Спектакль "И судьба - не судьба". [12+]**
**5.45 Д/ф "Клич мой будет звучать над землею". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 20 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.20 Фигурное катание. Гран-при-2019. Передача из США.
8.15 Здоровье. [16+]
9.25 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Видели видео? [6+]
13.45 Наедине со всеми. [16+]
14.35 Премьера. Концерт Наташи Королевой "Ягодка". [12+]
16.05 Фигурное катание. Гран-при-2019. Передача из США.
18.05 Премьера. "Щас спою!" [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Большая игра. [16+]
23.45 Х/ф "Скрюченный домишко". [16+]
1.55 На самом деле. [16+]
2.55 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

04.40 Сам себе режиссёр. [12+]
05.20 Х/ф "Обет молчания". [12+]
07.20 Семейные каникулы. [12+]
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна. [12+]
08.00 Утренняя почта. [12+]
8.40 Местное время. Воскресенье.
09.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым. [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 "Смеяться разрешается". [12+]
13.40 Х/ф "Третий должен уйти". [12+]
17.50 "Удивительные люди-4". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.00 Д/ф "Мустай". [12+]
02.20 Х/ф "Сестрёнка". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 Д/ф "Радость нашего дома". [6+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТек?!" [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Д/ф "Боец. Творец. Мудрец". [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Дорога к храму. [0+]**
**15.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**16.00 Х/ф "Долгое-долгое дество". [12+]**
**17.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**17.30 Д/ф "Мустай Карим". [12+]**
**18.30 Лидеры региона. [12+]**
**19.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.15 Ты можешь! [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Әлләсе... [12+]**
**20.30 Теге өсәү! [12+]**
**21.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 Спектакль "Наброски судьбы". [6+]**
**1.00 Х/ф "Агент 117". [16+]**
**2.45 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (15) дүшәмбе | 6:14 | 7:44 | 13:30 | 16:49 | 18:19 | 19:49 |
| 15 (16) шишәмбе | 6:16 | 7:46 | 13:30 | 16:47 | 18:17 | 19:47 |
| 16 (17) шаршамбы | 6:18 | 7:48 | 13:30 | 16:44 | 18:14 | 19:44 |
| 17 (18) кесе йома | 6:20 | 7:50 | 13:30 | 16:42 | 18:12 | 19:42 |
| 18 (19) йома | 6:22 | 7:52 | 13:30 | 16:40 | 18:10 | 19:40 |
| 19 (20) шәмбе | 6:24 | 7:54 | 13:30 | 16:37 | 18:07 | 19:37 |
| 20 (21) йәкшәмбе | 6:26 | 7:56 | 13:30 | 16:35 | 18:05 | 19:35 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ ***Нисек кенә булмаһын, һулаҡайҙар менән уңаҡайҙар бары тик теге йәки был ҡулын файҙаланыуы менән генә айырыла. Был айырма уларҙың аҡыл йәки физик һәләтенә бер нисек тә йоғонто яһамай.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ КЕЙЕМДӘРЕН ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**40-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Катод. Йосопов. Кенәз. Санта. Уҡлау. Ҡырғаяҡ. Ҡаланса. Аласа. Нимәрә. Һыу. Тәгәс. Ләлә. Ғәфү. Халыҡ. Алоха. Ипле. Назрань. Тамға. Шафиҡов. Рамаҙан.

**Вертикаль буйынса:** Ҡолонсаҡ. Сөләймәнов. Нардуған. Йорт. Акушер. Аҡана. Көсөк. Һәүер. Африка. Ниғмәтуллин. Пьеро. Девиз. Ван. Уҡа. Тәхет. Лүшә. Сүрә. Уба. Саҡма.

ХУЖАБИКӘГӘ

# КӘСТРҮЛЕҢ...

♦ Эмалле кәстрүл оҙаҡ йылдар бөтәүлеген һаҡлаһын өсөн кер һабыны йәки башҡа төр һауыт-һаба таҙартҡыс ҡушып, йылы һыуҙа йыуып, яҡшылап йауып киптереп һөртөргә. Шунан кәстрүлгә тултырғансы тоҙло һыу ҡойоп (1 литр һыуға 2 ҡалаҡ тоҙ) ҡайнатырға, һыуытып түгергә.

♦ Һауыт-һабаға ултырған тутты бөтөрөү өсөн яңы ғына әрселгән һуғандың яртыһын ҡулланырға кәрәк. Икмәк тимерен таҙартыу өсөн ваҡ ҡына ҡом һәм уртаға ҡырҡылған яңы картуф ярҙам итә.

♦ Бер-нисә лимон бүлкәһе йәки лимон һуты һалынған һыу ҡайнатып, сәйнүк һәм шәшкеләргә ултырған тутты бөтөрөргә була.

♦ Дөгө тәмле һәм иҙелмәй бешһен өсөн көсһөҙ генә аш һеркәһе ҡушып бешереп алып, аҙағынан сайҡатырға була.

♦ Ҡайнатҡанда һөт ташмаһын өсөн кәстрүл ауыҙын майларға кәрәк. Ә һөт тиҙерәк ҡайнаһын өсөн бер аҙ шәкәр ҡушып ебәрергә була.

♦ Тауыҡ итен һурпанан йылы саҡта алып, тоҙлап таҙа һәм ҡоро кәстрүлгә һалып, таҫтамал йәки марля менән ҡаплап ҡуйғанда, айырыуса тәмле килеп сығасаҡ.

♦ Байрамға ит ашы әҙерләһәгеҙ, ит һурпаһынан эшләнгән соус ҡушып ултыртығыҙ. Балыҡ һурпаһын балыҡ ризыҡтарына әҙерләнгән соусты эшләгәндә, бәшмәк һәм йәшелсә ҡайнатылған һыуҙы йәшелсә, балыҡ һәм тауыҡ ите булған ашамлыҡтар менән бирелгән соус яһағанда ҡулланығыҙ.

♦ Соус әҙерләрҙән алда ондо ҡоро табала һарғылт төҫкә ингәнсе ҡыҙҙырығыҙ, йәки майҙа ҡурығыҙ. Мотлаҡ ошо кәңәште тотоғоҙ, юғиһә соустан сей он тәме килеп торасаҡ һәм иҙелмәгән төйөрсөктәр барлыҡҡа киләсәк.

♦ Әҙер соуста тәмһеҙ шекәрә барлыҡҡа килмәһен өсөн уны махсус һауытҡа ҡойоп, өҫтөнә бәләкәй генә киҫәк аҡ май һалып, ҡапҡас менән өҫтөн ябып ҡуйырға кәрәк.

♦ Он ҡортламаһын өсөн уны яҡшы ябылған быяла йәки пластмасса һауыттарҙа һаҡларға кәрәк. Ваҡыты-ваҡыты менән он һәм башҡа ярмаларҙы тикшереп тороу ҙа мөһим. Бөжәктәрҙе ҡурҡытыу өсөн шкафҡа таҙартылған бер-нисә һарымһаҡ бүлкәһен һалып ҡуйырға була.

♦ Ҡоймаҡ йоҡа һәм тәмлерәк килеп сыҡһын өсөн ҡамырға ике балғалаҡ крахмал ҡушырға кәрәк. Был осраҡта ҡоймаҡ табаға ла йәбешмәҫ, кетерләп кенә торор һәм йоҡа килеп сығыр.

♦ Әгәр һауыт-һабанан үҫемлек майының еҫе килһә, киптерелгән гәрсис менән йыуырға була.

♦ Артыҡ шыйыҡ соусты ҡуйыртыу өсөн бер ҡалаҡ гәрсис йәки бер ҡалаҡ крахмал ҡушылған ярты стакан һөт өҫтәгеҙ.

♦ Ҡайһы осраҡта ҡамыр йомшартҡыс (разрыхлитель теста) урынына эҙләп табыуы ауыр булған икмәк бешереү онтағын (пекарский порошок) ҡулланыу тәҡдим ителә. Кәрәкле осраҡта икмәк бешереү онтағын үҙеңә эшләп алырға була. Бының өсөн 5 грамм аш содаһын, 3 грамм лимон кислотаһын һәм 12 грамм ондо ҡушып болғарға кәрәк. Ошо рәүешле әҙерләнгән 20 грамм өҫтәмә ҡамырҙы еңел, күҙәнәкле итер.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# ҺУЛАҠАЙҘАР, УҢАҠАЙҘАР...



**Планета халҡының 85 проценты - уң ҡул менән эшләүселәр (уңаҡай), 5 проценты - һулаҡай. Теге йәки был көндәлек эште башҡарғанда ҡайһылыр ҡулға өҫтөнлөк биреү, ғәҙәттә, баш мейеһе эшләүенең ҡайһы бер үҙенсәлектәре менән аңлатыла. Һулаҡайҙарҙы нимә айырып тора һәм тәбиғәттә уларҙың аҙ булыуы нимәгә бәйле?**

Кеше организмының барлыҡ йәшәү системалары үҙ-ара бәйләнгән. Был баш мейеһе төҙөлөшөн тикшергәндә лә раҫлана. Мәғлүм булыуынса, уң ярымшар кешенең киңлектәге йүнәлеше өсөн яуаплы, ә һул яҡ ижадҡа бәйле, нигеҙҙә, ул телгә һәләтте контролләй. Бынан тыш, баш мейеһе нервылары үҙ-ара киҫешеп, ҡыҙыҡ һөҙөмтәгә килтерә: һул яҡ ярымшар тәндең уң яғы өсөн яуап бирә, уң яҡ - һул яҡ өсөн. Бындай ғәҙәти булмаған төҙөлөш бик йыш мейенең күп эште башҡарырға һәләтле булыуынан килеп сыға. Кешенең тәбиғәттә йәшәй алыуын тәьмин итеү өсөн, эволюция уны бер түгел, ә бер юлы ике ярымшар менән бүләкләргә булған. Уларҙың һәр ҡайһыһы икенсеһе башҡармаған эште эшләй ала.

Кенияла табылған боронғо кеше торағындағы таш ҡоралдар, яҡынса 600 мең йыл элек ата-бабаларыбыҙҙың, нигеҙҙә, уң ҡул менән эш башҡарыуын асыҡ күрһәтә. Боронғо кешенең теле үҫешеп, тел өсөн яуаплы һул ярымшар актив үҫешә башлағас, һулаҡайҙар барлыҡҡа килеүенә сәбәп булыуы мөмкин. Был теорияға ярашлы, һул ҡулды төп ҡул итеп ҡулланыу үҙенсәлекле сит һөҙөмтә сифатында барлыҡҡа килеүе ихтимал. Был теорияны раҫлау мөмкин түгел, шуға күрә ғалимдарҙың тағы бер нисә ҡыҙыҡ гипотезаһы бар.

Улар әсә организмында тестостерон күләме ныҡ артһа, һулаҡай бала тыуыу ихтималлығы арта, тип иҫәпләй. Шулай итеп, тестостерон әле тыумаған баланың мейеһенә ҙур йоғонто яһай. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, һулаҡайҙар инфекцион сирҙәр менән йышыраҡ сирләй.

Тыумыштан һулаҡай булып тыуғандар менән бер рәттән, уны үҙләштереүселәр ҙә бар. Ғәҙәттә, балалар атаәсәһенең ҡылығын ҡабатлай һәм шул сәбәпле уларҙың ҡайһы ҡулын ҡулланыуына өҫтөнлөк бирә.

Нисек кенә булмаһын, һулаҡайҙар менән уңаҡайҙар бары тик теге йәки был ҡулын файҙаланыуы менән генә айырыла. Был айырма уларҙың аҡыл йәки физик һәләтенә бер нисек тә йоғонто яһамай. Бынан тыш, был үҙенсәлек боронғо кешенең йәшәү өсөн көрәшендә эволюцион ыңғай күренеш булып торғандыр, тип уйларға урын бар. Сөнки һул ҡул ирекле булғас, һулаҡай үҙенең потенциаль дошманына көтмәгәндә һул ҡулы менән һуғып ебәреүе мөмкин.

✓ *Эт - туйған ерендә, бисә - һыйған ерендә, ир - тыуған ерендә.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ



# ҠАПҠАЛАР ҺӘМ КҮПЕРҘӘР

**М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры быйылғы утыҙынсы ижад миҙгелен Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса ҡуйылған спектакль менән башланы. Тамашаһы фекеренсә, спектакль "ифрат мауыҡтырғыс, уны ҡараған һайын ҡарағы килә..."**

Күҙ алдына килтерегеҙ: ҙур сәхнәне иҙәндән түбәгә хәтле ҡаплап торған ҡәҙимге шаршау, бәктиһән, ике яҡҡа шар асылып китә торған оло ҡапҡалар икән! Был образ - яңы тыуған сабый алдында йәйрәп киткән ҙур йыһан һәм донъя. Бәй, ул бер генә ҡатлы түгел, бер аҙ барғас, йәнә ике яҡҡа ике ҡанат кеүек яңы ҡапҡалар һирпелеп асыла, артабан бара биргәс - тағы ла яңы ҡапҡалар ҡоласын кирә. Әйҙүк, Кешем, рәхим ит Йәшәүгә! Был бит ерҙәге ожмах ҡапҡалары, тип ымһынып китә Кеше йәнә. Уғаса булмай, ҡапҡаларҙы үтеү өсөн шарттар - әҙәми зат әллә үҙе уйлап сығарған, әллә фәрештәләрҙән ишеткән ташҡа яҙылмаған ҡанундар яңғырай башлай: "Кеше ғүмере буйы күперҙәр һала: уйҙан, йырҙан, хыялдан... Таштан, ағастан... гәмәлдәрҙән..." Тимәк, күперһеҙ йәшәй алмай, ҡапҡаларҙы аса алмай бәндә. Шағир булып тыуған бәйгәмбәр был шарттарҙы спектакль буйы ҡабатлай, бер-берәһен танымаған йәндәрҙә таныштыра, аңламағандарын яҡынайта. Ләкин ҡапҡаларҙы асырға ынтылыу бар кешегә лә хас түгел, имеш, һәм кемдер уларҙы асырға кәрәк, тип тә уйламай. Ә кемгәләр улар һәр ваҡыт ябыҡ, йәки танау төбөндә ябыла... Кендек ҡушаматы өсөн гәрләнеп йәшәгән малай ҙа тәрлә яҙмыштар, хикәйәттәр араһында күпер ҡороу менән мәшғүл. Уның күперҙәре - самими хыялдан, өҙөлөп йәлләүҙән, һынсыл ҡыҙыҡһыныуҙан хасил.

Аҡ плащ кейгән Шағир (Башҡортостандың халыҡ артисы Марат Ҡорбанғәлиев) тамашаһы ҡаршыһына сыға, яй ғына үҙенең хикәйәтен бәйән итә башлай. Тауышы тәүәккәл һәм ҡәтғи, һағышлы һәм бәхетле - ул барыһын да әйтеп бөтөргә, барса һорауҙарын да биреп ҡалырға тейеш. Ләкин бер туҡтауыҙ ағылған тормош дарьяһы ашыҡмай. Башта тыуаһы, шунан үҫеп әҙәм булаһы бар... Әҙәмдәрҙән өйрәнәһе бар. Өйрәтәһе бар.

Милли Йәштәр театры тормошонда ифрат мөһим булған тамаша - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Мәсәлим Күлбаев ҡуйған спектакль шулай тының һәм ҡабаланмай ғына башлана. Уның һалмаҡлығы, бер нөктәгә төбәлгән укталышы, режиссер алымының серле ябайлығы - һәммәһе бер маҡсатҡа буйһонған: фәлсәфи әҫәрҙең тәүтауышын, халыҡсан ғибрәти заңын һаҡлау. Милли Йәштәр театрының "Оҙон-оҙаҡ бала сағы" - ул тамашаһы менән серләшеү, әңгәмә ҡороу, "назлы психологизм" хозурында аралашыу.

Мостай Кәримдең повесы - сикһеҙ йомаҡ һәм һорауҙар йомағы бит ул. Бала саҡта күн һайын тыңланған әкиәт һис тә ялҡытмаған кеүек, был әҫәр ҙә уҡыған һайын, театрҙа ҡараған һайын яңыса тағатылған йомаҡ кеүек үҙенә арбай. Оло инәйҙең (Альбина Кашанова) һабаҡтары, Кесе инәйҙең (Аида Күлбаева) саялығы, Атаһының (Марат Сәйфуллин) киң күңеле, Әсғәттең (Дмитрий Гусев) үҙен-үҙе тоттора торған шаян хәйләләре, Мәрәһимдең (Кирилл Ажмяков) йыры һәм Аҡйондоҙҙоң (Юлиә Абрарова) һөйөүе... Спектакль серле яҙмыш һорауҙарынан тора. Ләкин улар тере тамсыларҙан торған шишмә һыуы кеүек таныҡ. Һәм был шишмә ғәрләр һыуһынды ҡандырмаҫтыр, ахыры.

Спектакль аҙағына хәтле бер тында ҡарала. Тамашаһының йәше-ҡарты геройҙар менән бергә "күпер төҙөй", "ҡапҡаларҙы асып яба". Ләкин был эш - мәңгелек хеҙмәт, әҙәм булыу өсөн һалған көс, имеш... Аҡ плащлы Шағир тамаша аҙағында инде һалдат гимнастеркаһы кейеп, һуғыш гәрәсәтенән иҫән-имен ҡотолған Кендек менән бик һаҡ һөйләшә, хатта гәйепле йылмая. Ни өсөн тигәндә, ул бит Шағир, ул бик күп һорауҙарын биреп өлгәрмәне, бик күптәренә яуап таба алманы... Ә ғүмер дарьяһы аға... Туҡтамай ҙа һәм ҡабаланмай ҙа.

Режиссер Мәсәлим Күлбаевтың һәм театр коллективының халыҡ шағирының мираҫын арымай-талмай халыҡҡа тапшырыуы - йөрәк ҡапҡаларын асыуҙары һәм сәхнәүи талант аша замандаштар күңеленә күпер һалыуҙары һәр яңы спектакль һайын тамашаһыны һоҡландыра һәм ғәжәпләндерә. Артабан да шулай булһын.

**Кинйә МӘЗИТ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КИС УЙЛАҒАН УЙҘАН...

## иртән тапҡан аҡыл артыҡ

Эт - туйған ерендә, бисә - һыйған ерендә, ир - тыуған ерендә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күңел тыныслығы теләйһең икән, телеңде тый.

**(Латин мәҡәле).**

Тыуым һәм үлемдән бер ниндәй дауа ла юҡ, шуға ла ошо ике арауыҡ араһында йәшәп ҡал.

**(Сантаяна).**

Кем үҙе теләгәндән аҙыраҡҡа эйә, тип иҫәпләй, шул үҙе лайыҡлы булғандан күберәккә эйә икәнен белергә тейеш.

**(Георг Лихтенберг).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Малайҙар көтөү көткән бер яланда ағыулы йылан йәшәгән. Бер саҡ был ялан аша бер дәрүиш үтеп бара, ти. Малайҙар уның янына йүгереп килгән һәм: "Әй, изге ҡарт, был тирәнән һаҡ ҡына үт, ағыулы йыланға барып эләкмә", - тип иҫкәртеп ҡысҡырған. "Мине ул йылан бер ни ҙә эшләтә алмай, балалар, - тигән ҡарт дәрүиш. - Мин яуызлыҡтан һаҡлана торған доғалар беләм..." Шулай тигән дә, дәрүиш юлын дауам иткән. Йылан уның ҡаршыһына сығып, башын күтәргән генә икән, дәрүиш уға ниндәйҙер доға уҡып өргән һәм йылан бөгәрләнеп ҡарттың аяҡ аҫтына йығылған. "Ниңә һин кешеләргә яуызлыҡ ҡылаһың? - тип һораған йыландан дәрүиш. - Мин һиңә Хоҙайҙың изге исемен атайым, һин уны минең артымса ҡабатла һәм Аллаһы яратырға өйрән, шул саҡта яуызлыҡ эшләү теләгәнән һүрелерһең..." Ошо ваҡиғанан һуң бер нисә көн үткән. Баяғы көтөүсе малайҙар йыландың кешеләргә ташланмай башлауын, йыуашланып ҡалыуын шәйләп ҡала һәм уны таш менән бәргеләргә тотона. Малайҙарҙың берәһе йыланды ҡойроғонан тотоп, баш осонда өйөрөлтөп, таш араһына атып бәрә хатта. Шунан улар, үлгәндер, тип уйлап, йыланды ҡалдырып китә. Йылан ысынлап та үлем хәлендә була, күп ҡан юғалта. Иҫәнә килгәс, өңөнә тәшөп ята, япраҡтар, ҡороған үләндәр менән туҡлана.**

**Бер саҡ был тирәнән тағы ла баяғы дәрүиш уҙып бара. Ул тирә-яғын байҡап, йыланды эҙләй. Малайҙар уға, йылан үлде, тигән хәбәр еткерә, әммә дәрүиш уның тере икәнен белә, сөнки йылан дәрүиш өйрәткән доға аша Аллаһы һөйөргә өйрәнмәйенсә торып, был донъяны ҡалдыра алмай. Шул саҡ йылан өңөнән сыға һәм дәрүишкә үҙе менән ни булғанын һөйләй. Дәрүиш ҡысҡырып ебәрә хатта һәм асыуланып шулай ти: "Ниндәй ахмаҡлыҡ! Үҙ дошмандарыңдан нисек һаҡланырға белмәү өсөн ысынлап та алйот булырға кәрәк. Мин бит һиңә кешеләргә ташланма һәм ағыуыңды сығарма, ғына тинем. Ниңә һин уларҙы ҡурҡытыу өсөн ыҫылдау ҡоралыңды эшкә екмәнең?.."**

БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК

# ТУҒЫРЛАМА НИМӘ БУЛА?

**Биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры Сәфәрғәли Йәнтүриндың "Зоология терминдарының русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлеге"нән Башҡортостанда йәш осраған һөтимәр хайуандарҙың башҡортса-русса атамалары менән танышығыҙ.**

## Һөтимәрҙәр

**Барсук** - бурһыҡ
**белка обыкновенная** - ябай тейен
**бобр речной** - йылға ҡондоҙо
**бурозубка крошечная** - ваҡ туғырлама
**бурозубка равнозубая** - туғырлама
**бурундук** - әлгәнйәк
**вечерница малая** - әнер ярғанаты
**волк** - бүре
**выдра** - ҡама
**выхухоль** - йофар
**горностай** - аҫ
**еж обыкновенный** - терпе
**заяц-беляк** - аҡ ҡуян
**заяц-русак** - үрғуян, үр ҡуяны
**кабан** - ҡабан, ҡыр сусҡаһы
**колонок** - һары шәшке
**корсак** - ҡарһаҡ төлкө, дала төлкөһө
**косуля** - ҡоралай, илек, ҡыр кәзәһе
**крот обыкновенный** - һуҡыр сысҡан, ләпәк
**крыса водяная** - көшөл
**куница** - һуҫар, һыуһар
**ласка** - йәтсә
**лемминги** - леммингтар, ала сысҡандар
**летяга обыкновенная** - осар тейен
**лисица обыкновенная** - төлкө, ябай төлкө
**лось** - мышы
**марал** - марал
**медведь бурый** - ҡөрән айыу
**мышь домовая** - йорт сысҡаны
**мышь лесная** - урман сысҡаны
**мышь полевая** - баҫыу сысҡаны
**мышь-малютка** - ваҡ сысҡан
**нетопырь Натузиуса** - киске ярғанат
**нетопырь-карлик** - ваҡ ярғанат
**норка европейская** - шәшке
**ночница водяная** - һыу ярғанаты
**ночница Наттерера** - этбаш ярғанат
**ночница прудовая** - яр ярғанаты
**ондатра** - ондатра-ҡомаҡ
**пищуха малая (степная)** - бесәнсе ҡомаҡ
**полевки** - ҡыр сысҡандары
**рысь** - һеләүһен
**серая крыса, пасюк** - һоро ҡомаҡ
**слепыш** - һуҡыр сысҡан, төрткө
**соня садовая** - баҡса ҡомағы, баҫыу сысҡаны
**сурок** - һыуыр, байбаҡ йәнлеге
**тушканчик большой** - ялман
**усатая ночница** - мыйыҡлы ярғанат
**ушан бурый** - оҙонғолаҡ ярғанат
**хомяк обыкновенный** - ябай алйырҙан
**хомяк серый** - һоро алйырҙан
**хомячок Эверсмана** - Эверсман алйырҙаны
**хорь** - көҙән.


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идараһында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2020/10